ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Ҡиске Өфө

11-17 июль (майай) 2015

№28 (654)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Башҡортостандың баш ҡалаһы -**

Рәсәйҙең яңы конгресс үҙәге



4

**Ҡаҙылы ҡымыҙҙы…**

Баймаҡҡа барып тәмлә!



6

**Йылға буйындағы ҡалалар**

Уларҙың икеһенең береһе Өфө булыр



7

**Барыһы ла ҡулыбыҙҙан килә,**



әммә ололар тәжрибәһенә лә мохтажбыҙ

8-9

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Һеҙҙең арала 2015 йылдың икенсе ярты йыллығы өсөн "Киске Өфө" (индексы: 50665) гәзитенә яҙылырға онотҡандар барҙыр, моғайын. Хәлде төҙәтергә мөмкин: июлдең 17-һенә тиклем яҙылып, яратҡан баҫмағыҙҙы августан уҡый башлай алаһығыҙ. Гәзиткә яҙылыу тураһындағы квитанцияларығыҙҙы редакцияға ебәрһәгеҙ, кемдәргәлер бүләккә матур китаптар ебәреп ҡыуандырыу ниәтебеҙ ҙә бар. Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ!***

*ҠУНАҠТАР ҺҮҘЕ*

# ӨФӨ - ЙЫЛМАЙЫУСЫ ҠАЛА

**Баш ҡалабыҙ ысын мәғәнәһендә бик күп ҡунаҡтар йыйылған байрам майҙанын хәтерләтте был көндәрҙә. Эшлекле форматтағы етди сараға килһәләр ҙә, ҡунаҡтарҙың барыһының да йөҙҙәре яҡты, ҡәнәғәт ине. Иң мөһиме, барыһы ла йылмая. Рәсәй Президенты Владимир Путиндың йөҙөнән дә йылмайыу китмәне. Ҡытай Халыҡ Республикаһы Президенты Си Цзиньпин да барыһына ла йылмайып баҡты. Был күренешкә ҡаҙаҡ журналистары үҙҙәренсә баһа биреп тә ҡуйҙы: "Өфөгөҙ бит - үҙе ялт итеп, йылмайып торған ҡала. Шуға ла барыһы ла йылмая…" ШОС һәм БРИКС саммиттары барышын яҡтыртыуҙа ҡатнашҡан, бөтөн донъянан килгән 1700 самаһы журналистың да фекере шулай булғанмылар, билдәһеҙ, әммә күптәр шул һүҙҙәрҙе ҡабатланы: сара шул тиклем яҡшы ойошторолған! Ошо сама журналистар барыһы бергә Конгресс-холдан алыҫ түгел 19 мең квадрат метр тәшкил иткән, сатырҙарҙан махсус ҡоролған Халыҡ-ара матбуғат үҙәгендә эшләне. Үҙәктә улар өсөн бөтөн шарттар ҙа тыуҙырылғайны: брифинг залдары, яҙышыусы журналистар өсөн компьютер, ҡала-ара, халыҡ-ара телефон элемтәһе, күсермәләр эшләү өсөн аппаратуралар менән йыһазландырылған павильон, телерадиокомпаниялар өсөн павильон. Саммиттар саралары барышын видеоэкрандарҙан күҙәткән журналистар баш күтәрмәй эшләне, үҙ илдәренә һис һуңлатмайынса мәғлүмәттәр тапшырҙы. Ә беҙ, урындағы журналистар, эштән бушаған мәлдәрендә уларға Башҡортостаныбыҙ, Өфөбөҙ тураһында, саммиттарға әҙерлекте нисек баһалауҙары хаҡында һорауҙар бирергә ашыҡтыҡ.**

**Чжоу Лян, Ҡытай мәғлүмәт үҙәгенең Алматылағы бүлексәһе шеф-корреспонденты:** Ҡунаҡсыл ғына түгел, ә йылмайыусы ҡалаға килеп юлыҡтыҡ бына. Кешеләрҙең йылмайыуы тураһында ғына әйтмәйем, ҡаланың һәр йорто, һәр урамы, сәскәле тротуарҙары - бар нәмә йылмайған һымаҡ тойола бында. Бар ерҙә таҙалыҡ, иң яҡшы хужабикәләр генә тыуҙыра ала торған бөхтәлек. Бик яҡшы әҙерләнгән Өфө ҡунаҡтар ҡаршылауға. Өйгә ҡунаҡ килгәндә уны йыйыштырыу, биҙәү, матурлау һеҙҙең халыҡтың да изге йолаһы, буғай. Беҙҙең ҡытайҙарҙа ла бар бындай йола. Тағы башҡорт кухняһы бик оҡшаны. Ҡаҙылыҡты ашап туйып булмай. Беҙҙең ҡытайҙарҙа ла ҡаҙылыҡ бар шикелле, тик минең үҙемә ашарға тура килмәне. Ә башҡорт балы беҙҙең илдә лә ҙур һорау менән файҙалана. Күстәнәскә күп итеп алып китәсәкмен. Ғөмүмән, ошондай һоҡланғыс Башҡортостан менән Ҡытай араһында эшлекле бәйләнештәр урынлаштырылыуы, беҙҙең инвесторҙарҙы йәлеп итеүегеҙ шатлыҡлы күренеш. Республика башлығы Рөстәм Хәмитов менән брифинг ваҡытында мин, инвесторҙарға ниндәй шарттар тыуҙырыласаҡ, тигән һорау бирҙем һәм ҡәнәғәтләнерлек яуап алдым. "Беҙ инвесторҙар өсөн яҡшы шарттар тыуҙырабыҙ. Уларға һалым льготалары булдырыла, административ ҡаршылыҡтар ҙа аҙ, бер һүҙ менән әйткәндә, эшләү өсөн шарттар бик уңайлы", - тине республика Башлығы.

**(Дауамы 2-се биттә).**




12+

ҠУНАҠТАР ҺҮҘЕ

# ӨФӨ - ЙЫЛМАЙЫУСЫ ҠАЛА

(Башы 1-се биттә).

**Ляо Чунь Ян, Ҡытайҙың үҙәк телевидениеһы алып барыусыһы:** Башҡортостан Республикаһы һәм Өфө ҡалаһы тураһында тәьҫораттарым бик матур. Ҡала яланғас түгел, йәшеллеккә күмелгән, тирә-яҡтағы тәбиғәт, урман, йылғалар һәм күлдәр иҫ китмәле. Беҙ ҡаланың төп парктарының береһе - Енеү паркын барып күрҙек. Унда балалар уйнап йөрөй, туй үткәреүсе йәштәр килгәйне. Ошо күренеш беҙгә бик ныҡ тәьҫир итте, быуындар араһындағы рухи бәйләнеш сағылышын күрҙек беҙ бында. Өфө ҡалаһы тураһында "Йылмайыуҙар ҡалаһы" тип әйткәндәрен ишеткәнебеҙ бар ине, бына әле килеп быға үҙебеҙ шаһит булдыҡ. Кемгәлер интервью алырға тип мөрәжәғәт итһәң, иң тәүҙә һиңә киң йылмайып бағалар, шунан ниндәйҙер тәмле аш-һыуҙар менән һыйлайҙар, шунан ғына һинең һорауҙарыңа яуап бирәләр. Беҙгә, үҙегеҙҙе өйөгөҙҙә кеүек тойоғоҙ, тип әйтәләр. Бындай мөнәсәбәт беҙҙе йылытты, хатта һауа торошоноң һыуыҡ булыуын да һиҙмәнек. Әйткәндәй, урындағы халыҡ был турала ла хәстәрлек күрергә тырышты, һәр ерҙә "Йылы кейемдәрегеҙ бармы?" тип һорайҙар. Әйе, ысынлап та, һауа торошоноң ошолай һалҡынсараҡ булырын белеп, йылы кейемдәрҙе үҙебеҙ менән алып килгәйнек. Хәйер, йылы кейемһеҙ ҙә өшөп йөрөмәҫ инек, өшөргә бирмәҫтәр ине...

**Диана Ҡомағамбәтова, Астана информбюроһы хәбәрсеһе:** Ҡала урамдары буйлап йөрөп килдек, уның йәшеллегенә, тәҙеклегенә, таҙалығына һоҡландыҡ. Беҙҙең ҡаҙаҡ журналистары барыһы ла әйтә: Өфө бер аҙ Алматыға оҡшаған. Алматы ла шундай уҡ йәшел, һил, йыйнаҡ ҡала. Аэропортҡа килеп төшөү менән тойҙоҡ ҡунаҡтарҙы нисек йылы ҡаршылай белеүегеҙҙе. Волонтер ҡыҙҙар һәм егеттәрҙең мөнәсәбәте, бар йәһәттән ярҙам итергә әҙер тороуы, бар һорауҙарға ла яуап биреүе оҡшаны. Ғөмүмән, ҡала урамдарында осраған кешеләрҙән дә шундай уҡ мөнәсәбәт тойҙоҡ. Беҙҙең Ҡаҙағстандан икәнде белгәс, Президентыбыҙ Нурсолтан Назарбаевты маҡтай башлай барыһы ла. Был беҙҙең өсөн айырыуса күңелгә май булып яғылған күренеш, әлбиттә.

Үҙәк баҙарҙағы сауҙа үҙәгендә булдыҡ, төрлө сувенирҙар, аяҡ кейемдәре һатып алдыҡ. Ғөмүмән, һеҙҙә тауарҙар беҙҙәгегә ҡарағанда бик арзан икәнен күрҙек.

Ҡала урамынан үткәндә башҡортсарусса яҙылған алтаҡта, башҡа яҙыуҙарға иғтибар иттек. Быйыл Рәсәйҙә Әҙәбиәт йылы икән, шуға арналған таҡталар, ундағы шиғри юлдар ҙа иғтибарҙы йәлеп итте. Яҙыусылар менән таныштырыуҙың бик матур, бик отошло ысулы был. Был тәжрибәне Ҡаҙағстанға алып ҡайтырға кәрәк, тип һөйләштек үҙ-ара. Һәм тағы. Өфөлә ҡыҙҙар бик матур икән. Егеттәребеҙҙең күҙҙәре уйнай уларға ҡарап. Бер туҡтауһыҙ уфталалар...

Тағы. Ләлә-Тюльпан мәсетенә барҙыҡ, бик оҡшаны, шундай матур урында урынлашҡан. Астанала мәсеткә инеп сығырға ваҡыт булмағайны, шуға фитр-саҙаҡаны бында бирҙек. Ураҙа тотҡан мосолман ҡәрҙәштәрҙең ураҙаһы ҡабул булыуын теләйем. Өфөләге туғандарға сәләм юллайым, беҙ төрки халыҡтар, тамырҙарыбыҙ бер. Шулай дуҫ, туған булып йәшәйек.

**Раджаб Сафаров, Бөгөнгө Иранды өйрәнеү үҙәге директоры, ижтимағи бәйләнештәр буйынса Рәсәй-Иран советы рәйесе:** Өфө ҡалаһына тәүге тапҡыр килеүем, Мәскәү үлсәмдәре буйынса периферияларғы тип һаналған был ҡала инфраструктураһы, модернизм тенденциялары буйынса Европанан айырым ҡалаларынан һис ҡалышмай. Мине бигерәк тә бындағы климат, тирә-яҡтағы шул тиклем күп йәшеллек ғәжәпләндерҙе. Иң мөһиме, экологик проблемаларға ҙур иғтибар бүленеүе күренеп тора. Башҡортостандың ШОС һәм БРИКС саммиттары кеүек беренсе класс халыҡ-ара форумдарҙы ҡабул итә һәм үткәрә алған алдынғы инфраструктуралы булыуы хайран итте. Сөнки юғары кимәлдәге ойоштороу эштәре, күп сығымдар талап иткән бындай саралар һәр илдең көсөнән килә торған эш түгел. Шуға күрә был йәһәттән Башҡортостан Республикаһы һәм Өфө ҡалаһы менән өсөн үҙенсәлекле бер асыш булды. Рәсәйҙең периферияларғы һәр яҡлап үсешкән, алға киткән бер төбәген күреү, ысынлап та, бик һөйөндөрҙө.

Өфөләге эшлекле ултырыштар тамамланыу менән Рәсәйҙең ШОС һәм БРИКС структураларына рәйеслек бурыстары тамамлана. Был бурысты икенсе ил үҙ өҫтөнә аласаҡ, әммә Рәсәйҙең ШОС һәм БРИКС структуралары үсешенә индергән өлөшөн юғары баһалар инем. Был йыл ойошмаға ингән илдәрҙең үҙ-ара мөнәсәбәтен яйлау, киңәйтеү һәм нығытыу буйынса һиҙелерлек үҙгәрештәр, ойошмаларға ҡушылырға теләгән илдәр һаны артыуы менән әһәмиәтле булды. Шулай уҡ БРИКС илдәренең дөйөм банкы көүек реаль инфраструктуралар барлыҡҡа килде. Былар барыһы ла көнбайыш конъюнктураһы һәм донъялағы бүтән финанс структураларға бәйләнмәгән тағы бер абруйлы, башҡалара йоғонто яһай алырлыҡ үҙәк формалашыуы тураһында һөйләй.

**Хан Мөхәммәд, Пакистан журналисы:** Мин Пакистандан бында берҙәнбер журналисмын. Саммиттар башланырҙан бер нисә көн алда уҡ килдем Өфөгә. Бер таныш ғаиләлә урынлаштым. Ҡала менән, уның тирә-яғындағы тәбиғәт, хатта Өфөнән алыҫ булмаған бер ауыл менән дә танышырға өлгөрҙөм. Бырыһы ла бик оҡшай. Енеү паркында булдым. Мосолманмын, шуға ла Ләлә-Тюлпан мәсетенә инеп, намаҙ уҡыным. Күп милләтле, күп төрлө динле халыҡ йәшәй икән Башҡортостанда. Уларҙың үҙ-ара татыулығы, милли йә дини нигеҙҙә бер ниндәй низағтар ҙа сыҡмауы мине бик ныҡ һоҡландырҙы. Өфө урамдары буйлап йәйәүләп йөрөргә яратам. Ҡала ла, ундағы халыҡ та шул тиклем күңелгә инеп урынлашты. Барыһы ла яҡты йөҙлө, барыһы ла ихлас.

**Михад Абдиосмаан, Сомали федератив республикаһы, Өфө дәүләт нефть техник университеты студенты:** Мин Өфө ҡалаһына 2011 йылдың сентябрендә уҡырға килдем. Нефть һәм газ сығарыу өлкәһендә эшләйәсәк белгес булып, ҡулыма диплом алырға торам. Бында уҡыған йылдар эсендә Башҡортостан минең икенсе йортома әйләнде, рус телен яҡшы өйрәндем, башҡорт телендә лә бер-нисә иң мөһим һүҙҙәрҙе беләм. ШОС һәм БРИКС илдәре саммиттары Башҡортостан өсөн дә, Рәсәй өсөн дә донъя кимәлендә иҡтисади-сәйәси мөнәсәбәттәрҙе үҫтереү, башҡа илдәр менән хеҙмәттәшлек даирәһен киңәйтеү өсөн бик яҡшы сара. Ул сарағa Өфө бик яҡшы әҙерләнде, уның йөҙө былай ҙа йылдан-йыл матурлана. Мин бында уҡый башлаған ошо биш йыл эсендә генә лә танымаҫлыҡ булып үҙгәрҙе Өфө. Ул заман талаптарына яуап биргән, һәр кеше өсөн йәшәү уңайлыҡтары тыуҙыра алған алдынғы ҡалаларҙың береһенә әүерелде. Саммитҡа килгән ҡунаҡтар ҙа шәйләне Өфөнөң өҫтөнлөктәрен. Беларусь Республикаһы Президенты Александр Лукашенко: "Рәсәйҙең иң күркәм ҡалаһында булыу мөмкинлеге өсөн рәхмәт белдерәм. Өфөгә тәүгә килеүем. Бик матур, унайлы ҡала. Беҙҙең Беларусь иленә оҡшаған", - тине. Әҫ Ҡытай Президенты Си Цзиньпин самолеттан ҡарап килгәндә генә лә Өфөнөң урмандар менән уратып алынған йәшел, матур ҡала булыуын күреп һоҡланыуын әйтте. Үҙем белем алған, биш йыл ғүмерем үткән ошо төбәктең башҡалар тарафынан да шулай маҡталыуына шатланам.

**Сальман Хачизаде, Иран Республикаһы, журналист:** Әссәләмәғәләйкүм! Өфө ҡалаһы матур, халҡы шул тиклем ихлас, ҡунаҡсыл булып сыҡты. Беҙ һоҡланып туя алмайбыҙ! Беҙгә ҡала, башҡорт халҡы, уның мәҙәниәте һәм милли аш-һыуҙары, тарихы тураһында шул тиклем мауыҡтырғыс итеп һөйләнеләр. Өфөнөң тарихи һәм иҫтәлекле урындары буйлап сәйәхәт итеп өлгөрмәнәк тә, Милли музейҙа булып, барыһын да үҙ күҙебеҙ менән күрҙек, ишеттек. Башҡорттарҙы беҙ тарихи тамырҙарыбыҙ уртаҡ булған туғандаш халыҡ тип беләбеҙ. Улар хаҡында тағы ла күберәк белер өсөн, әлбиттә, бында күп ваҡытҡа килеү кәрәк. Форсат сығыу менән мин быны эшләйәсәкмен, тип өмөт итәм.

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**



Былары - волонтерҙар.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Өфөлә ШОС һәм БРИКС илдәренең төп майҙанының исеме яҙылған күрһәткес барлыҡҡа килде. Ул Йәштәр театры янындағы Ике фонтан майҙанында ҡуйылды. Күрһәткестәргә ҡарап Өфөнән Ҡаҙағстандың Бойондороҡһоҙ майҙанына, Ҡырғыҙстандың - Ала-Тоо, Ҡытайҙың - Тяньаньмэнь, Бразилияның - Өс власть, Мәскәүҙең Ҡыҙыл майҙанына тиклем нисә саҡрым икәнлеген белергә була.

✓Әхмәт-Зәки Вәлиди исемендәге Милли китапханала "Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы һәм БРИКС илдәре авторҙарының әҫәрҙәре башҡорт һәм татар телдәрендә" исемле күргәҙмә асылды. Экспозицияны башҡорт әҙәбиәте һәм тыуған яҡты өйрәнеү бүлеге әҙерләгән. Күргәҙмәгә Ҡытай, Һиндостан, Ҡырғыҙстан, Ҡаҙағстан, Үзбәкстан, Тажикстандың танылған шағирҙары һәм яҙыусыларының 50-гә яҡын китабы ҡуйылған.

✓Башҡортостандың Милли музейында рәсми рәүештә "Үҙәк Евразияның традиции мәҙәниәте: Ебәк юлының мираҫы" күргәҙмәһен асыу тантанаһы булды. Тәүгеләрҙән булып уны Рәсәйҙең мәҙәниәт министры Владимир Мединский һәм БРИКС һәм Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы саммиттарында ҡатнашыусылар ҡараны. Экспозицияла Үҙәк Евразия халыҡтарының мәҙәниәтен сағылдырған 400-ҙән ашыу экспонат: милли кейемдәр, биҙәүестәр, һауыт-һаба һәм көнкүреш әйберҙәре урын алған.

✓М. В. Нестеров исемендәге Башҡорт дәүләт художество музейында БРИКС һәм ШОС саммиттарында ҡатнашыусылар "XX быуаттың беренсе яртыһындағы рус сәнғәтендә Көнсығыш образы" күргәҙмәһен ҡараны. Экспозицияға 1910-1940 йылдарҙа ижад ителгән 70-кә яҡын рәсемдәр һәм график эштәр ҡуйылған.

✓Башҡортостанда Эшҡыуарлыҡҡа ярҙам үҙәге эшләй башланы. Ойошма төбәктең Бәләкәй эшҡыуарлыҡты үҫтереү һәм уға ярҙам фонды базаһында эшләй. Үҙәк финанс планлаштырыу, йүнселдәрҙең эшмәкәрлегенә патент-лицензия ярҙамы мәсьәләләре буйынса хеҙмәттәр күрһәтәсәк, хеҙмәткәрҙәр һайлауҙа ярҙам итәсәк, юридик, бухгалтер, инвестиция, мәғлүмәт йүнәлешендәге консультация бирәсәк.

✓ *"Бындай хәлгә ҡалыуығыҙға үҙегеҙ ғәйеплелер. Сөнки һеҙ үҙегеҙ тураһында онотҡанһығыҙ. Үҙегеҙҙе яратырға онотҡанһығыҙ. Өйҙә хеҙмәтсегә, ҡолға әйләнгән ҡатын, әлбиттә, иренә лә, балаларына ла ҡыҙыҡ булыуҙан туҡтай."*



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төнөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ФЕДЕРАЛЬ КИМӘЛДӘГЕ...

## юғары уҡыу йорто кәрәк Өфөбөҙгә

**Әлфир ҒАЙСИН, Р.Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты директоры:** Беҙҙең Р. Ғарипов исемендәге Башҡорт республика гимназия-интернатында әлеге мәлдә Башҡортостандың бөтә районынан һәм Рәсәйҙең алты төбәгенән килгән 687 бала уҡый. Шуға күрә, беҙ милләттәштәребеҙҙең ниндәй проблемалар менән йәшәүен дә, ниндәй ҡыуаныстар кисереүен дә яҡшы беләбеҙ. Борсолдорған мәсьәләләргә килгәндә, тәү сиратта ауыл мәктәптәрендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте предметтарын уҡытыу кимәле түбәнәйә барыуы көйөндөрә. Ул ғына ла түгел, был мәктәптәрҙә төрлө түңәрәктәр, факультатив дәрестәр юҡҡа сыҡты. Балалар буш ваҡыттарын компьютер артында үткәрә, тип әйтәбеҙ ул, ләкин уларҙы башҡа ҡыҙыҡлы шөғөлдәр менән мауыҡтырырға кәрәк бит. Был йәһәттән элек ауыл мәктәптәрендә эшләп килгән түңәрәктәр бик ҙур роль уйнай торғайны. Ә бөгөн ауыл ерендә балалар өсөн ундай түңәрәктәр юҡ икән, ата-әсәләр, балалар баҡсаһы тәрбиәселәре, мәктәп уҡытыусылары менән бер төптән булып, бер йүнәлештә эшләргә тейеш. Сөнки бер үҡ хәл-ваҡиғаға ҡарата уҡытыусының һәм ата-әсәнең мөнәсәбәте төрлө, хатта ҡапма-ҡаршы булырға мөмкин. Әгәр ҙә шундай осраҡта ата-әсә, уҡытыусының өйрәткәндәре дөрөҫ түгел, тип иҫбатлай башлаһа, уҡыусы бала кемгә ышанырға белмәй аптырап ҡалаҫаҡ. Бигерәк тә мәҙәни, әхлаҡи һәм рухи тәрбиә биргәндә ошондай ҡараштар айырмалығы маҡсатҡа өлгәшергә ҡамасаулай. Шуға күрә ата-әсәләр менән бер йүнәлештә эшләү мөһим. Беҙҙең гимназиябыҙға бик тырыш, аҡыллы, белем алырға ынтылған, һоҡланғыс балалар килә. Уларға ҡарап, бөгөнгө йәштәр араһында эскелеккә, тәмәке тартыуға ҡарата бөтөнләй икенсе мөнәсәбәт формалашыуын күреп шатланам. Хәҙер йәштәр айыҡ булыуҙы, сәләмәт тормош алып барыуҙы өҫтөн ҡуя.

Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында уҡыған уҡыусылар тураһында һөйләгәндә, быйылғы сығарылыш синыф уҡыусыларының Берҙәм дәүләт имтихандарын бик шәп тапшырыуын билдәләп үтмәй булмай. Быйыл гимназияны бөтәһе 185 бала тамамланы. Улар күрһәткән уртаса һөҙөмтәләр республикалағы БДИ буйынса уртаса һөҙөмтәләрҙән 13-15 баллға юғары. Рәсәй буйынса уртаса БДИ һөҙөмтәләренең Башҡортостан күрһәткесенән бер ни тиклем түбән булыуын иҫәпкә алғанда, беҙҙең уныштар бигерәк елле, тип һанарға мөмкин. Гимназиябыҙға уҡырға килеүсе балаларҙың потенциалы юғары, уны тулыһынса ҡулланырға мөмкинлек биреү өсөн декабрь айынан башлап айына ике-өс мәртәбә репетицион БДИ үткәрә килдек. Был репетиция-имтихандарҙың һөҙөмтәләре буйынса эшләнгән графиктан һәр уҡыусы үҙенең күрһәткестәрен, класс һөҙөмтәләрен ҡарап, иптәштәре менән сағыштырып барҙы. Үсеш бармы, булмаһа, нимә ҡамасаулауын асыҡлап, һәр уҡыусы һәм ата-әсәләр менән бергә етди һөйләшеп, сәмләндереп уҡыттыҡ. Киләһе йылға ҡарата һөҙөмтәләргә өлгәшеү өсөн тағы ла ниндәй шарттар тыуҙырырға, нимә эшләргә кәрәк булыуы тураһында педагогтар менән кәңәшләшәбеҙ.

Гимназиябыҙҙы тамамлаған балаларҙың һәр береһе абруйлы юғары уҡыу йортона уҡырға инергә теләп, Мәскәү, Санкт-Петербург, Екатеринбург, Ҡаҙан, Силәбе ҡалаларының федераль вуздарына бара. Беҙҙең егеттәр һәм ҡыҙҙар ситтә лә һынатмай, яҡшы өлгәшеп, йәмәғәт эштәрендә әүҙем ҡатнашып, республикабыҙҙың һәм башҡорт халҡының данын күтәреп йөрөгәнен беләм. Шулай ҙа республикабыҙға ла "федераль" исемен йөрөткән юғары уҡыу йорто кәрәк. Сөнки ШОС һәм БРИКС кеүек донъя кимәлендәге саралар үткән ҡаланың шул кимәлдә танылыу тапҡан вуздары ла булырға тейеш. Беҙҙең башҡорт дәүләт университеттары Рәсәйҙең башҡа ҡалаларындағы федераль университеттарҙан бер ҙә ҡалышмай, әлбиттә. Әммә "федераль" тигән исем алған юғары уҡыу йорто уны тамамлаған йәш белгестәрҙең донъя кимәлендә юғары баһаланыуына тағы бер әтәргес булыр ине.

**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА яҙып алды.**

ЯҢЫ РУБРИКА: "АЛЛО, ҺЕҘҘЕ ТЫҢЛАЙБЫҘ!"

# АРАЛАШАЙЫҠ, ГӘПЛӘШӘЙЕК...



Редакциябыҙға былай ҙа көн һайын әллә күпме уҡыусыбыҙ телефондан шылтырата. Кемдеңдер хоҡуҡ мәсьәләләре тураһындағы һорауҙарына яуап алғыһы килә, кемдер тормошонда булған ҡатмарлыҡтар, йәмғиәттәге ғәҙелһеҙлек, үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙәге аңлашылмаусылыҡтар буйынса үҙ икеләнеүе, фекере менән уртаҡлашҡыһы килә, ә кемдер гәзитебеҙҙә баҫылған мәҡәләләр буйынса маҡтау йә тәнҡит һүҙҙәрен еткерә, уларҙың күҙ унынан баҫмала киткән хаталы яҙыуҙар ҙа ситтә ҡалмай. Һәр хәлдә, үҙ уҡыусыларыбыҙ менән тура бәйләнеш тә, тура булмаған бәйләнеш тә һаҡлана, тимәксебеҙ. Был беҙгә уҡыусыларыбыҙға яҡыныраҡ булырға, уларҙың ниҙәр уйлап, ниҙәр ҡылып йәшәүе, нимә тураһында хыялланыуы тураһында һәр саҡ хәбәрҙар булырға ярҙам итә. Ошонoң һөҙөмтәһендә тыуа беҙҙең яңы рубрикаларыбыҙ.

Хәҙер, ғөмүмән, радиола ла, телевидениела ла, гәзит-журналдарҙа ла уҡыусылар, тыңлаусылар, тамашасылар менән тура бәйләнешкә инеү гәҙәти һәм көтөп алынған аралашыу сараһына әйләнде бит. Ошо юҫыҡтараҡ бер рубрика тәҡдим итәбеҙ беҙ ҙә. **"Алло, һеҙҙе тыңлайбыҙ!"** тип аталыр ул. Һәр **дүшәмбе, шишәмбе** көндәрендә иртәнге **11 сәғәттән 12 сәғәткә** тиклем **253-25-44, 252-33-03** телефондары буйынса һеҙҙең һорауҙарығыҙ тыңлайбыҙ. Юрист йә белгес аңлатмаһы кәрәк булған үтә ҡатмарлы һорауҙар яуаплы кешеләргә, тейешле органдарға ебәреләсәк, уларҙың яуаптары гәзит биттәрендә баҫыласаҡ.

Шулай итеп, һеҙҙең шылтыратыуҙарҙы көтәбеҙ, мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ. Һорауҙарығыҙ булмаһа, кәңәшләшеү, кәңәш биреү, матур фекерҙәрегеҙ менән уртаҡлашыу өсөн шылтыратығыҙ. Аралашайыҡ. Гәпләшәйек. Араларҙы тағы ла яҡынайтайыҡ. **Шылтыратыуҙарҙы Фәүзиә Миңнехәт ҡыҙы, Зөлфиә Ишбулат ҡыҙы, Ләйсән Даян ҡыҙы ҡабул итә, тыңлай.**

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

Был аҙна башында редакция телефонына бер ҡатын шылтыратты: "Минә 48 йәш, - тип һөйләп китте ул. - Район үҙәгендә йәшәйбеҙ. Өс бала үҫтерәбеҙ. Бөтөн ваҡытым, бөтә көсөм, энергиям балаларымды, иремде ҡарауға, өйөмдө, баҡсамды гөл итеп тотоуға китә. Тик иремдең хөрмәтенә генә өлгәшә алмайым. Ул эшҡыуар, күп ваҡытын өйҙән ситтә үткәрә. Тик минә йүнле һүҙе, яҡты йөҙө юҡ. Икәү-ара аңлашырға тырышыу һөҙөмтә бирмәй, киреһенсә, быңдай саҡтарҙа ул минә ҡул күтәрергә лә күп һорап тормай. Ярты ғүмерҙе бергә йәшәгән кеше менән мөнәсәбәтте ҡапыл өҙөргәме? Барлыҡҡа килгән хәлгә күҙ йомоп йәшәргәме?.."

Илле йәшкә еткән апайға кәңәш биреүе унайһыҙ тойолһа ла, шулай тинек: "Быңдай хәлгә ҡалыуығыҙға барыбер ҙә үҙегеҙ ғәйеплелер. Сөнки һеҙ үҙегеҙ тураһында онотҡанһығыҙ. Үҙегеҙҙе яратырға онотҡанһығыҙ. Өйҙә хеҙмәтсегә, ҡолға әйләнгән ҡатын, әлбиттә, иренә лә, балаларына ла ҡыҙыҡ булыуҙан туҡтай. Шуның өсөн аҙна-ун көн йәшәү рәүешегеҙҙе үҙгәртеп, үҙегеҙҙе икенсе төрлө тотоп ҡарағыҙ әле. Бер көн тик ял итегеҙ, үҙегеҙ менән булығыҙ. Күптән онотолған, ләкин яратҡан шөғөлөгөҙҙө иҫкә төшөрөгөҙ. Һуңғы тапҡыр ҡасан маникюр эшләттегеҙ? Сәсегеҙгә, битегеҙгә туҡландырыусы битлектәр һөртөгөҙ. Кейем гардеробығыҙҙы яңыртығыҙ. Психология буйынса курсҡа яҙылығыҙ, ундай мөмкинлек булмаһа, ошо йүнәлештә китаптар уҡығыҙ... Ошо яҡлы ғына саралар тормошҡа икенсе төрлө ҡарарға ярҙам итер. Бәлки, үҙ-үҙегеҙҙе яратмау, тышҡы һәм эске ҡиәфәтегеҙгә иғтибар итмәү, өйҙәге эштәрҙең күбеһен үҙ иңегеҙгә алыу күңелһеҙ хәлдәргә килтергәндер ҙә? Сит кеше күҙлегенән сығып, тормошоғоҙға анализ бирегеҙ. Тәбиғәт беҙгә, ҡатынҡыҙҙарға, тормошта ниндәй генә ауырлыҡтар, ҡаршылыҡтар осраһа ла, үҙ-үҙебеҙҙе аяҡҡа баҫтырырлыҡ ҡеүәт биргән, тик ошо көстө ҡуллана белергә, асылыбыҙҙы өйрәнергә кәрәк.

**Зөлфиә БАСИРОВА тыңланы.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓"Өфө - яратҡан ҡалам" конкурсы йомғаҡтары буйынса Башҡортостандың баш ҡалаһы тураһында яңы фотоальбом төҙөлдө. Фотоһүрәттәр конкурсын тәүге тапҡыр Өфө хакимиәте һәм "Имидж-Консультант" компанияһы ойоштороҙо. Иң яҡшы эштәрҙең авторҙарына хакимиәт башлыһының дипломдары һәм аҡсалата премиялар тапшырылды. Конкурсҡа тәҡдим ителгән фотоһүрәттәр Өфө тураһында яңы фотоальбомға индерелде.

✓Өфө районының Дмитриевка ҡасабаһында "Интер РАО" асыҡ акционерҙар йәмғиәте Затон йылылыҡ электр үҙәген төҙөй башланы. Башҡортостандың өҫтөнлөклө инвестиция проекттары исемлегенә ингән объект Өфөнө электр менән тәьмин итеүҙе яҡшыртырға һәм ҡаланың һалына башлаған биҫтәләрен йылылыҡ менән тәьмин итергә мөмкинлек бирәсәк.

✓Башҡортостанда Яҡтыгүл отелдәре ассоциацияһы барлыҡҡа киләсәк. Был хаҡта Әбйәлил районында уҙған Курорт һабантуйы сиктәрендә эшлекле осрашыуҙа белдерелде. Отельерҙар фекеренсә, яңы коммерцияға ҡарамаған ойошма райондың туристик зонаһында инфраструктураны үҫтерергә ярҙам итәсәк.

✓18 июлдә Тәтешле районының Аҡсәйет ауылында "Тыуған ауылым" республика халыҡ байрамы ойоштоpола. Унда ҡатнашыу өсөн ғаризалар kult-tat@rambler.ru, tat-ok@inbox.ru электрон почтаһына ҡабул ителә. Телефон: 8 (34778) 2-14-24, факс 8 (34778) 2-17-73. Байрамды ойоштороусылар - Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге, Тәтешле районы хакимиәте, Татарстандың "Салауат" театр-студияһы.

✓Башҡортостанда ҡайһы өлкәлә эшләүсе хеҙмәткәрҙәрҙең эш хаҡы юғары икәнлеге иҫәпләп сығарылды. Документтан күренеүенсә, апрелдә иң юғары хеҙмәт хаҡын файҙалы ҡаҙылмалар сығарыусылар алған. Уларҙың эш хаҡы 44 меңдән ашыу тәшкил иткән. Икенсе урында - финанс эшмәкәрлеге (37 меңдән ашыу). Мәғариф хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡы 19,3 меңгә еткән, ә һаулыҡ һаҡлау һәм социаль хеҙмәттәр күрһәтеү өлкәһендә эшләүселәр 23 меңдән ашыу ала.

**"Башинформ"дан.**

***✓ Лидерҙар документтар йыйылмаһына, шул иҫәптән ШОС-тың 2025 йылға тиклемге үсеш стратегияһына ҡул ҡуйҙы. Шулай уҡ Һиндостан менән Пакистанды ойошмаға ағзалыҡҡа ҡабул итеү ғәмәле башланды.***



КӨНАУАЗ

**"Инфраструктураны яңыртыу һөҙөмтәһендә Рәсәй картаһында яңы конгресс майҙансығы барлыҡҡа килде, йәғни Башҡортостандың баш ҡалаһын Рәсәйҙең яңы конгресс үҙәге тип атарға мөмкин. Булдырылған база бынан ары халыҡ-ара кимәлдәге сараларҙы ҡабул итергә мөмкинлек бирәсәк", - тине журналистар менән осрашыуҙа Рәсәй Президенты кәңәшсеһе, 2014-2015 йылдарҙа Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһында һәм 2015-2016 йылдарҙа БРИКС берекмәһендә Рәсәйҙең рәйеслеген әҙерләү һәм тәьмин итеү буйынса ойоштороу комитетының яуаплы секретары Антон Кобяков.**

# БАШҠОРТОСТАНДЫҢ БАШ ҠАЛАҺЫ -

## Рәсәйҙең яңы конгресс үҙәге




Инфраструктураны яңыртыу, тигәндән, ысынлап та, өс йыл элек ҡалабыҙға, республикабыҙға Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы һәм БРИКС саммиттарын үткәреү хоҡуғы бирелгәс, был хоҡукты ғәмәлгә ашырыуға әҙерлек сиктәрендә Өфөлә байтаҡ эштәр башҡарылды: Өфө аэропортының яңы халыҡ-ара терминалы төҙөлдө һәм сафҡа индерелде, саммиттар үтәсәк төп урындар - Конгресс-холл, Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры һәм башҡа объекттар төҙөкләндерелде, ҡыҫҡа ваҡыт эсендә алты яңы ҡунаҡхана төҙөлдө, "Башҡортостан" ҡунаҡханаһы реконструкцияланды. Һәм, Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһының генераль секретары Дмитрий Мезенцев әйткәнсә, "...Өфө донъяның сәйәси картаһында донъяуи ваҡиғаларҙың баш ҡалаһына әйләнде".

Шулай итеп, 7 июлдән саҡырылған ҡунаҡтар Башҡортостан еренә, Өфөбөҙгә килә башланы. **Иң тәүҙә Башҡортостанға эш сәфәре менән Көньяҡ Африка Республикаһы Президенты Джейкоб Зума килде.** Ул БРИКС-ҡа ингән дәүләт һәм хөкүмәт башлыҡтары осрашыуында ҡатнашты.

**Белешмә.** 2014 йылда Башҡортостан менән Көньяҡ Африка Республикаһы араһында тышҡы сауҙа әйләнеше күләме 53,4 мең доллар тәшкил иткән. Ошо сумманың 83 проценты экспорт тауарҙарына тура килә. Тауар әйләнешендәге иң юғары күрһәткестәр 2012 йылда, Башҡортостан Көньяҡ Африка Республикаһына иген оҙатҡан ваҡытта күҙәтелгән. Республика биләмәһендә Башҡортостандың "Нефаз" һәм Көньяҡ Африка Республикаһының "Bell Equipment" компанияһының "Bell" самосвалдарын эшләү буйынса берлектәге проектына старт бирелгән. Әлеге ваҡытта тәүге өлгөләрҙе сафҡа индереү башланған. Самосвалды республика карьерҙарының береһендә һынау планлаштырыла.

**8 июлдә Башҡортостанға эш сәфәре менән Ҡытай Халыҡ Республикаһы Рәйесе Си Цзиньпин килде.** Ул БРИКС-ҡа ингән дәүләт һәм хөкүмәт башлыҡтары осрашыуында һәм Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы ағзалары булған дәүләт башлыҡтары Советы ултырышында ҡатнашты.

**Белешмә.** 2014 йылда Башҡортостан менән Ҡытай араһында тышҡы сауҙа әйләнеше күләме 685,1 миллион доллар тәшкил иткән. Ошо сумманың 79 проценты экспорт тауарҙарына тура килә. Республика биләмәһендә Ҡытай капиталы ҡатнашлығында ойошторолған 18 предприятие эшләй. Башҡортостан Хөкүмәте менән Хэйлунцзян, Ляонин һәм Цзянси провинциялары хөкүмәттәре араһында хеҙмәттәшлек тураһында килешеүҙәр төҙөлгән. Башҡортостанда Ҡытай Халыҡ Республикаһы инвесторҙары ҡатнашлығында ун инвестиция проектын ғәмәлгә ашырырға әҙерләйҙәр. Республика Ҡытай партнерҙары менән ауыл хужалығы, предприятиелар, атап әйткәндә, рапс майы, шәкәр етештереү буйынса завод төҙөү өлкәһендә эшләйәсәк. Шулай уҡ металлургия заводы төҙөү планлаштырыла, унда металл һыныҡтары эшкәртеләсәк. Тау сәнәғәте ҡалдыҡтарын эшкәртеү өлкәһендә эш планлаштырыла, уларҙан алтын, көмөш алырға мөмкин.

**8 июлдә Башҡортостанға эш сәфәре менән Һиндостан Республикаһының Премьер-министры Нарендра Моди килде.** Ул БРИКС-ҡа ингән дәүләт һәм хөкүмәт башлыҡтары осрашыуында һәм күҙәтеүсе дәүләт хоҡуғында хеҙмәттәшлек иткән ил булараҡ, Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы ағзалары булған дәүләт башлыҡтары Советы ултырышында ҡатнашты.

**Белешмә.** Һиндостан Республикаһы Башҡортостандың сауҙа партнерҙары араһында һиғеҙенсе урында тора. Башҡортостандың был ил менән тышҡы сауҙа әйләнеше күләме 2014 йылда 398,3 миллион доллар тәшкил итте, уның 98 проценты экспорт тауарҙарына тура килә. Һиндостанға Башҡортостандан экспортланған тауарҙар иҫәбендә машина һәм ҡоралмалдар, барыһынан элек авиация двигателдәре һәм уның өлөштәре, шулай уҡ синтетик каучук, органик химия продукцияһы, металл изделиелар бар. Төп импорт тауарҙары - ул йылылыҡ насостары, токарь һәм туҡыу станоктары, үлсәү приборҙары, органик булмаған продукттарҙан - алюминий хлориды. Башҡортостан предприятиелары Һиндостандан шулай уҡ металл изделиелары - тирмәндәр өсөн онтау шарҙары, һығылмалы торбалар, фармацевтик продукттар, керамик әйберҙәр һатып ала. Республика территорияһында Һиндостан капиталы ҡатнашлығында башлыса күмәртә сауҙаһы өлкәһендә булдырылған 10 предприятие эшмәкәрлек йәйелдергән.

**8 июлдә Башҡортостанға эш сәфәре менән Бразилия Федератив Республикаһы Президенты Дилма Руссефф килде.** Ул БРИКС-ҡа ингән дәүләт һәм хөкүмәт башлыҡтары осрашыуында ҡатнашты.

**Белешмә.** Бразилия Башҡортостандың сауҙа партнерҙары араһында 45-се урында тора. Бразилия менән тышҡы сауҙа тауар әйләнеше күләме 2014 йылда 17,6 миллион доллар тәшкил итте, уның 97 проценты экспорт тауарҙарына тура килә. Башҡортостандан Бразилияға экспортланған тауарҙар иҫәбендә - химик сәнәғәт продукцияһы, шулай уҡ рафинирланмаған көкөрт һәм һаҡлау клапандары. Ә импорт структураһында спорт ҡоралдары, ҡара металл изделиелары, машиналар төҙөү продукцияһы бар. Нефтекама автозаводы базаһында берлектәге предприятие төҙөлгән, ул 2012 йылдан "Брава"пассажирҙар автобусы эшләп сығара.

**8 июлдә Башҡортостанға эш сәфәре менән Рәсәй Президенты Владимир Путин килде һәм** рәйеслек итеүсе ил башлығы булараҡ, БРИКС-ҡа ингән дәүләт һәм хөкүмәт башлыҡтары осрашыуында һәм Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы ағзалары булған дәүләт башлыҡтары Советы ултырышында ҡатнашты.

Шулай уҡ Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы ағзалары булған дәүләт башлыҡтары Советы ултырышында ҡатнашыу өсөн Башҡортостанға эш сәфәре менән Беларусь Республикаһы Президенты Александр Лукашенко, Тажикстан Республикаһы Президенты Эмомали Рахмон, Афғанстан Президенты Әшрәф Ғәни Әхмәдзай, Пакистан Премьер-министры Наваз Шәриф, Үзбәкстан Президенты Ислам Кәримов, Ҡаҙағстан Президенты Нурсолтан Назарбаев, Әрмән Республикаһы Президенты Серж Саргсян, Иран Президенты Хәсән Рухани, Монголия Президенты Цахиагийн Элбэгдорж, Ҡырғыҙстан Республикаһы Президенты Алмазбәк Атамбаев килде.

БРИКС илдәре лидерҙарының осрашыуында сәйәси һәм дөйөм идара итеү мәсьәләләре, тотороҡло үсеште тәьмин итеү проблемалары, берекмә сиктәрендә үҙ-ара килешеп эш итеүҙе киңәйтеү юлдары тикшерелде. БРИКС-тың яңы үсеш банкы һәм Валюта резервтары берекмәһенең эшмәкәрлек перспективалары тураһында фекер алышыу булды. Саралар программаһында БРИКС, ШОС һәм Евразия иҡтисади союздарының дәүләт башлыҡтары ҡатнашлығында кәңәшмә, БРИКС-тың Эшлекле советы вәкилдәре менән осрашыуҙар, БРИКС илдәренең профсоюз ойошмалары лидерҙары менән айырым әңгәмә үткәрелде, саммит йомғаҡтары буйынса бер нисә документ ҡабул ителде.

Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы ағзалары булған дәүләт башлыҡтары Советының көн тәртибенә ойошманы артабан үҫтереү, уның халыҡ-ара ареналағы ролен нығытыу, мөһим донъя һәм төбәк проблемалары буйынса идара итеүҙе көйләү мәсьәләләре индерелгәйне. Лидерҙар документтар йыйылмаһына, шул иҫәптән ШОС-тың 2025 йылға тиклемге үсеш стратегияһына ҡул ҡуйҙы. Шулай уҡ Һиндостан менән Пакистанды ойошмаға ағзалыҡҡа ҡабул итеү ғәмәле башланды. Саммит йомғаҡтары буйынса Өфө декларацияһына ҡул ҡуйылды. Өфөлә Владимир Путиндың БРИКС һәм ШОС саммиттарында ҡатнашыусы сит ил дәүләт башлыҡтары менән ике яҡлы осрашыуҙары үтте.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Башҡорт йырсыһы Иҙел Аралбаев "Астана Арҡау" VIII төрки музыкаһы фестивалендә ҡатнашты. "Иҙел Аралбаев ҡурайҙа уйнау менән йырҙы нисек гармониялы итеп берләштерергә мөмкин икәнлеген күрһәтте", - тип билдәләнә "Тюрк-медиа" сайтында. Ҡаҙағстандың баш ҡалаһына 16 төрки дәүләттәре, төбәктәре һәм халыҡтары вәкилдәре йыйылды.

✓Быйыл Башҡортостанда Ҡытай ҡоралмалдарында Рәсәйҙәге тәүге завод төҙөлә башлай. Һүҙ Ишембай ҡалаһындағы яңы ҡорос прокаты заводы тураһында бара. Был урындағы "Ишсталь" предприятиеһының һәм Ҡытайҙың "Цяо-Лян" ауыр сәнәғәт проектлау институты"ның проекты. Яңы предприятиела нигеҙҙә төҙөлөш тармағы өсөн арматура етештереләсәк. Хәҙер республикалағы металл һыныҡтары ла ошо заводта эшкәртеләсәк. Бынан тыш, меңгә яҡын эш урыны булдырыу планлаштырыла.

✓Башҡортостан кинематографистары Вилүрә Иҫәндәүләтова, Айсыуаҡ Йомағолов, Радик Килмәмәтов, Таңсулпан Бураҡаева, Рим Шәрәфетдинов һәм Айгөл Байрамғолова Рәсәйҙең күренекле мәҙәниәт һәм сәнғәт әһелдәре өсөн тәғәйенләнгән дәүләт стипендияларына лайыҡ булды.

✓12 июндән 28-нә тиклем Әзербайжан республикаһы баш ҡалаһы Баҡыла үткән I Европа уйындарында Рәсәй йыйылма командаһы миҙалдар һаны буйынса беренсе урын яуланы. Улар араһында Өфө рапирасылары - Аделина Заһиҙуллина, Анастасия Иванова, Тимур Арыҫланов һәм йөҙөүсе Полина Егорова ла бар. Полина Егорова был Уйындрҙа 6 тапҡыр чемпион баҫҡысына күтәрелде. Ошо көндәрҙә Өфө спортсылары, уларҙың тренерҙары - Руслан Насибуллин, Егор Попов БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министры Андрей Иванюта менән осрашып, ярышта кисергән тәьҫораттарын бәйән итте.

✓Көньяҡ Кореяның Кванджу ҡалаһында барған XXVIII Бөтә донъя йәйге универсиадала Башҡортостан спортсылары һынатмай. Ҡатын-ҡыҙҙар араһында 10000 метрға йүгереү буйынса ярышта беҙең еңел атлетыбыҙ Гөлшат Фазлетдинова көмөш миҙалға лайыҡ булған. Был уҙышта тағы бер рәсәйле Алла Кулятина алтын миҙал яулаған.

✓ *Педагогия университетында шаяртып әйтеүҙәренсә, Универсаль, Фундаменталь, Академик белем үҙәге икән ул Өфөбөҙ. Быны сит ил юғары уҡыу йорттары ла таный.*



КӨНАУАЗ

# БЕЛЕМ ЭСТӘР ӨСӨН...

## Өфөләге уҡыу йортон һайла ла ҡуй!

**Хәҙер бөтөн нәмәне күпселек осраҡта реклама һәм пиар хәл итә икәнен "Башинформ" агентлығында үткән матбуғат конференцияһы ла раҫланы: баш ҡаланың барлыҡ юғары уҡыу йорттары ректорҙары бергә йыйылып, ни өсөн әллә ҡайҙа белем эстәргә юлланмайынса ғына тап Башҡортостан вуздарына өҫтөнлөк биреү зарурлығын дәлилләне.**




- Башҡортостан вуздарының ҡеүәте бик ҙур, әммә беҙ уны ла, Өфөнөң студенттар ҡалаһы икәнен дә күрһәтә белмәйбеҙ. Рәсәй вуздары мониторингы асыҡлауынса, беҙҙең барлыҡ уҡыу йорттары һәм уларҙың филиалдары ете критерий буйынса алты-ете күрһәткес менән алдынғы урындарҙа килә. Шул уҡ ваҡытта илдең биш тикшереңеү университеты Башҡортостан вуздарынан түбәнерәк урында тора, - тип билдәләне БР Ректорҙар советы рәйесе, М. Аҡмулла исемендәге БДПУ ректоры Раил Әсәҙуллин.

Әйткәндәй, Раил Мирвай улы юғары уҡыу йорттарының БДМУ базаһында Башҡортостандың Дөйөм университеты (Сетевой университет) төҙәләүенә лә туҡталып үтте:

- Беҙҙең юғары уҡыу йорттарының үҙҙәренең мәҙәниәт йорттары, спорт майҙансыҡтары, барлыҡ студенттарҙы ла тәьмин итерлек ятаҡтары бар. Әгәр әлегә тиклем һәр вуз үҙаллы йәшәһә, хәҙер беҙ дөйөм бер вузды тәшкил итәбеҙ, йәғни һәр студент башҡа вуздарҙың хеҙмәте менән файҙалана, шулай уҡ бер уҡ дисциплина буйынса теләгән вуздың теләгән уҡытыусыһына лекцияға йөрөй аласаҡ. Баш ҡала вуздарының фәнни ҡеүәте дөйөм алғанда миллиард ярымлыҡ йыһазға эйә һәм уның менән дөйөм рәүештә файҙаланырға мөмкин буласаҡ. Икенсе яҡтан, беҙҙең юғары уҡыу йорттарын тамамлаусыларҙың 80 проценты ҡулына диплом алыу менән эшкә урынлаштырыла. Бының өсөн беҙ уҡыу процесы барышында уҡ сәнәғәт ойошмалары менән килешеү төҙөп, студенттар унда практика үтә. Был бер юлы ике мәсьәләне хәл итә: студент уҡып бөткәс, квалификацияһын үҙгәртеү өсөн ҡабаттан уҡып тормаясаҡ, икенсенән, сәнәғәтсе практика барышында уҡ кемдең кем икәнен асыҡ күрәсәк.Әлеге ваҡытта был йәһәттән республиканың Сауҙа-сәнәғәт палатаһы, Эш биреүселәр союзы, айырым эш биреүселәр менән килешеүҙәр төҙәлә. Ошо көндәрҙә үҙған ШОС һәм БРИКС дәүләттәре башлыҡтары саммиттарынан һуң яңы эш урындары барлыҡҡа киләсәк, уларға яңы "аҡыл"дар талап ителәсәк. Ә кем республиканан ситкә китә, улар күпселек осраҡта кире әйләнеп ҡайтмай, ҡайтҡан осраҡта ла эш урыны табыуы еңел булмаясаҡ. "Беҙҙең маҡсат - тыуған Башҡортостаныбыҙға хеҙмәт итерлек белгестәр әҙерләү..."

Шулай уҡ йыйылыусылар һорауҙарға ла яуап бирҙе. Мәҫәлән, күптәрҙе вуздарҙағы бюджет урындарының ҡыҫҡарыуы борсоуға һала. Әммә ректорҙар белдереүенсә, быйыл, киреһенсә, магистратураны ла индереп, бюджет урындары тағы ла 740 урынға артҡан һәм дөйөм һан 10780-гә еткән. Түләүле урындар һәм бюджет урындарын һәр вуз үҙе билдәләй, нигеҙҙә, ул 50:50 нисбәтендә. Ә инде түләүле белем алыуға килгәндә, был эш РФ Хөкүмәтенең ҡарарына ярашлы башҡарыла һәм ул инфляцияға ҡарап индексациялана. Быйыл индексация 11,2 процент тәшкил итә, шул уҡ ваҡытта һәр төбәк, һәр вуз үҙенең дә коэффициентын билдәләүе мөмкин.

Раил Әсәҙуллин күптән түгел Рәсәй Юғары уҡыу йорттары ректорҙары съезы үтеүен һәм унда төбәктәрҙә студенттарҙың һаны икеләтә кәмеүе тураһында билдәләүҙәрен, быға Мәскәү, Санкт-Петербург кеүек ҙур ҡалаларҙың абитуриенттарҙы үҙҙәренә тартып алыуы сәбәп булыуын да белдерҙе. Әлбиттә, илдең баш ҡалаһында белем алыу абруйлы, әммә, сығыш яһаусылар билдәләүенсә, уларҙың ҡайһы берҙәре Өфө вуздарынан ҡайтышыраҡ та икән. Педагогия университетында шаяртып әйтеүҙәренсә, Универсаль, Фундаменталь, Академик белем үҙәге икән ул Өфөбөҙ. Быны сит ил юғары уҡыу йорттары ла таный. Мәҫәлән, Башҡорт дәүләт медицина университетында алған белем кимәле Германияның шундай уҡ вуздарыныҡына тиң. Шуға күрә, Башҡортостан вуздарында күрше-тирә төбәктәрҙән генә түгел, хатта БДБ, сит илдәрҙән килеп белем алырға теләүселәр ҙә йылдан-йыл арта бара. Нефть-техник университетында сит ил студенттары дөйөм һандың 7,8 процентын тәшкил итһә, медуниверситетта - 5, педуниверситетта 2 процент. Бынан тыш, ШОС һәм БРИКС дәүләттәре башлыҡтарының саммиты Өфөлә үтеү һөҙөмтәһендә юғары уҡыу йорттарына бер нисә ил үҙ проекттары менән сыҡҡан да инде. Ә Башҡорт дәүләт медицина университетында быйылдан алып 30 кешелек төркөм БДУ-ла ҡытай телен өйрәнәсәк, шулай уҡ Бразилияла эшләү өсөн 30 кешелек махсус төркөм дә асыла. Вуз ректорҙары белдереүенсә, әлеге ваҡытта ата-әсәләр балаларын һаман да иҡтисадсы һәм юрист итеп күрергә теләй. Әммә 10-15 йылдан һуң, бөтөнләй икенсе профессиялар барлыҡҡа киләсәк һәм бөгөн уҡ ошо яңы һөнәрҙәр буйынса белгестәр әҙерләргә кәрәк. Һәм бала мәктәптә тамамларға ике ай ҡалғас түгел, ә мәктәпкә килгәндә уҡ үҙенең алдағы һөнәрен белергә тейеш.

"Кемдәндер ишеткәнгә ҡарағанда, үҙ күҙҙәрең менән юғары уҡыу йорттарына килеп ҡарау - иң яҡшыһы. Шуға күрә вуздарҙың үҙенә, уларҙың сайттарына инеп, уларҙың ниндәй ҡеүәткә эйә булыуы менән танышырға мөмкин. Хатта документтар тапшырғанда ла белгестәр һеҙгә тулы мәғлүмәт бирәсәк", - тине һәр вуз етәксеһе.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ӘЙТӘГҮР!

# МАҠСАТҠА ӨЛГӘШЕРГӘ!

**Документтарын юғары уҡыу йорттарына тапшырырға теләп йүгереп йөрөгән абитуриенттар һәм уларҙың ата-әсәләре быйыл ниндәй вуздарға, һөнәргә өҫтөнлөк биреүен белергә теләп, уларҙың бер нисәһенә мөрәжәғәт иттек.**

**Айгүзәл ӘМИНЕВА, Өфө районы Шамонин ауылы:** Мин рус теле һәм математика предметтарынан тыш, тағы ла дүрт предмет буйынса Берҙәм дәүләт имтиханы тапшырҙым: физика, информатика, йәмғиәтте өйрәнеү һәм химия. Бөтә предметтарҙан да уңыштарым ҡәнәғәтләнерлек. Минә Берҙәм дәүләт имтихандарына әҙерлек барышында репетиторҙарға йөрөү бик ярҙам итте. Мәктәбемдәге педагогтар барыһы ла юғары белемле һәм яҡшылар иҫәбендә булһалар ҙа, репетиторҙар кеүек, һәр балаға аныҡ белемде бирә еткерә алмауы ҡыҙғаныс.

Мин мотлаҡ техник йүнәлештәге һөнәр үҙләштерергә теләйем. Хәҙерге инновацион технологиялар заманында машиналар эшләү һәм техник хеҙмәт күрһәтеү өлкәһендәге хеҙмәткәрҙәргә ҡытлыҡ кисерәләр, тип иҫәпләйем. Әлеге көндә юристар, психологтар, филологтар күп булған кеүек, тағы бер биш-алты йылдан техник һөнәрле кешеләр һаны эш урындарына ҡарағанда күпкә артыҡ булып китеүе бар. Бындай осраҡта ла үҙ эшеңдән оҫтаһы булһаң, эшһеҙ тороп ҡалыу ҡурҡынысы янамай. Тормошта үҙ урыныңды табыу өсөн артабан уҡып, икенсе һөнәр үҙләштерергә лә мөмкин. Күп йәштәштәрем уҡыуын Мәскәү, Санкт-Петербург, Ҡазан, Силәбе ҡалаларында дауам итергә ашыға. Минә ҡалһа, бөтә ерҙә лә бер үк белем бирәләр. Һәр кемдең үҙенән тора, тырышып уҡыһаң, Башҡортостандағы юғары уҡыу йортон тамамлаһаң да, Мәскәүҙә белем алғандарҙан ҡалышмаҫҡа була. Иң мөһиме, алдыңа ҡуйған маҡсаттарға мотлаҡ өлгәшергә, халҡыңа файҙа килтерергә ынтылыу кәрәк.

**Рөстәм РӘХИМҒОЛОВ, Ейәнсура районы:** Был заманда егет кешегә юғары белемле булыу бик мөһим. Сөнки буласаҡ ғаилә башлығы етерлек аҡса табырға, балаларына өлгө булырға тейеш. Хәҙер юғары белем алмай тороп, юғары эш хаҡы түләнгән эшкә урынлашыу мөмкин түгел. Мин документтарымды Башҡорт дәүләт университетының география факультетына тапшырырға уйлайым, киләсәктә геологоразведка менән бәйле эштә, тау сәнәғәте компанияһында эшләргә була. Йәштәштәремә бер кәңәшем бар: уҡырға инер алдынан, был һөнәрҙе үҙләштергәс, ҡайҙа эшкә урынлашыу тураһында ла уйлаһындар ине. Сөнки йыш ҡына тик яҡшы билдәләргә генә өлгәшеп, һөнәр үҙләштереп сыҡҡан йәш белгестәр үҙ һөнәре буйынса эш тәҡдим иткән урында эшләргә теләмәй һәм икенсе һөнәр буйынса эш эҙләргә мәжбүр була. Ете ҡат үлсә, бер ҡат киҫ, тигән мәҡәлгә ярашлы, төп һөнәреңде һайлағанда бик етди булырға кәрәк.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Йүткереү

❖ Хәҙер бала-саға йылғанан сыҡмай, йүтәл дә эләктерә. Дауалау өсөн 10 баш һуғанды, 1 баш һарымһаҡты ваҡлап турап, йомшартып бешкәнсе һөттә ҡайнатырға (һөт һуған, һарымһаҡ капларлыҡ ҡына булһын). Шуға аҙ ғына бөтнөк һуты һәм бал ҡушып, көнө буйы эсеп бөтөрөргә кәрәк.

## Һуттар эс

❖ Эс йомшартыу өсөн тоҙло кәбеҫтә һутын эсеү эсәк флораһын яҡшырта.

❖ Аппетит булһын өсөн балаларға кишер һуты, ололарға әремдеке файҙалы - ашҡаҙанды ныҡыта, ашҡаҙан һуты бүленеп сығыуын көсәйтә.

❖ Бөйөр сиренән ҡайын һыуы файҙалы - холестерин күләмен яйлай, ҡандағы һейҙек кислотаһын сығара, бөйөр юлдарын таҙарта.

❖ Петрушка һуты бөйөр эшмәкәрлеген яҡшырта.

❖ Энәлек һуты йөрәк эшмәкәрлеген әүҙемләштерә, ҡан әйләнешенә ыңғай тәьҫир итә.

## Ҡарабойҙай хикмәттәре

❖ Йүткергәндә 2 стакан ҡайнар һыуға 1 ҡалаҡ киптерелгән ҡарабойҙай сәскәһен төнәтергә, һөҙөргә һәм көнөнә 3-4 мәртәбә яртышар стакан эсергә. Был төнәтмә бронхыларҙағы ҡуйы лайланы ла бөтөрә.

❖ Ҡан баҫымы күтәрелгәндә, склероз сиренә юлыҡҡанда ҡарабойҙайҙың япраҡтарынан, сәскәләренән сәй бешереп эсергә кәрәк. 1 стакан ҡайнар һыуға 2 балғалаҡ үлән һалып, 1 минут ҡайнатырға, 15-20 минут урап төнәтергә, һөҙөргә, эсергә.

❖ Аҙ ҡанлылыҡтан йәҙаланғанда ҡарабойҙай һабағының өҫкө өлөшөн сәй кеүек бешереп эсәһең. 2 стакан ҡайнаған һыуға 1 ҡалаҡ киптерелгән сәскә һәм япраҡтарын һалып 45 минут төнәтергә, һөҙөргә, эсергә.

❖ Кипкән ҡарабойҙай япраҡтарын төйөп өҫтөнә һипһәң, эренле яралар ҙа тиҙ уңала.

❖ Ҡарабойҙайҙан әҙерләнгән ризыҡтарҙы ашаған кеше артыҡ ауырлыҡтан да ҡотола.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ЗАРЛЫ ҠОШ

**Кәкүк - ҡош сүрәтендәге кеше, тигән ышаныу уның менән бәйле бөтөн тыйыуҙарҙы ла булдырған да инде. Шуның өсөн дә уны һәләк итергә ярамай. Мәҫәлән, "Кәкүк" тип аталған легенда һөйләүенсә, борон заманда башҡорт ырыуына дошмандар һөжүм иткән. Кәкүк исемле батыр егеттәрҙе йыйып, дошманға ҡаршы яуға киткән, өйҙә уны Ҡарағаш исемле һөйгән ҡыҙы көтөп ҡалған. Был яуҙан бер кем дә иҫән ҡайтмаған.**

Ҡарағаш Кәкүктең үлеменә ышанмаған. Ата-әсәһе уны кейәүгә бирергә йыйынғас, ул ҡасырға хәл итә. Әммә ҡыҙҙы тотоп, зинданға бикләйҙәр. "Ҡош булып, һөйгәнеңә осһаң ине!" - тип теләй ҡыҙ. Уның теләге шунда уҡ тормошҡа аша, Ҡарағаш ҡошҡа әйләнеп, зиндандың тәҙрәһе аша осоп сыға. Ағастан ағасҡа, тауҙан тауға осоп, ул һөйгәнен саҡыра: "Кә-күк! Кә-күк!"

Шул ваҡыттан алып ул донъя буйлап һөйгәнен саҡырып йөрөй. Йомортҡа һалһа ла, уны баҫып сығарырға түҙемлеге етмәй, тағы ла һөйгәнен эҙләп сыға. Гел "кә-күк" тип ҡысҡырып йөрөгәнә өсөн, кешеләр был ҡошто кәкүк тип атаған.

Легенданың тағы бер вариантында Кәкүк һыу аҫты батшаһының улы була, тиелә. Ул ер батшаһының ҡыҙына өйләнгән була. Күпмеләр ваҡыттан һуң, ул ата-әсәһен күрергә тип һыу аҫтына төшөп китә һәм кире сыҡмай. Йәш ҡатыны һағышланып, яр буйында уны көтә. Бер ваҡыт сәс тарап ултырғанда: "Әгәр ҙә ул ҡайтмаһа, миңә йәшәү юҡ, ул саҡта ҡошҡа әйләнһәм ине", - тип теләк теләй. Уйы шул тиклем тиҙ тормошҡа аша, йәш ҡатын хатта бер толомон ғына үреп өлгөрә. Бына шуның өсөн дә кәкүктең бер ҡанаты аҫҡа һалынып төшөп тора. Кәкүк ҡоштоң ғүмере һағышта, зарҙа һәм ирен эҙләүҙә үтә, шуға уны һағышлы, зарлы ҡош тиҙәр. Ул әле лә "Кәкүк", тип, ирен саҡыра.

Легенданың тәүге варианты Күмертау районында яҙып алынған, икенсеһенең сығанағы күрһәтелмәгән. Шулай ҙа йөкмәткеһе буйынса ул Белорет һәм Бөрйән башҡорттары араһында киң таралған мифтарға оҡшаған.

Ҡатын-ҡыҙҙың кәкүккә әйләнеүе сюжеты башҡорттарҙың әкиәт фольклорында ла йыш осрай. "Йылан" әкиәтендә Зәйнәп исемле ҡыҙ һыу аҫты батшаһы улы - йылан-егеткә кейәүгә сыға. Уларҙың ҡыҙы һәм улы тыуа. Бер ваҡыт Зәйнәп балалары менән әсәһенә ҡунаҡҡа килә. Зәйнәптең әсәһе хәйлә менән кейәүен һыуҙан сығарып, уны үлтерә. Быны белгәндән һуң, Зәйнәп ҡыҙын - һандуғасҡа, улын - сыйырсыҡҡа, үҙен кәкүккә әйләндерә.

Ғәйшә исемле үгәй ҡыҙын хан улы кәләшлеккә һоратҡан өсөн үгәй әсә ҡыҙҙы кәкүккә әйләндерә, тиелә "Кәкүк" әкиәтендә. Уның сабый улы ҡала, баланы ҡарашырға ҡатындың үҙ ҡыҙы китә. Тик ул илаған сабыйҙы тынысландыра алмай. Шул саҡта ул бер ҡатындың кәңәше буйынса, баланы тау башына алып менә, Ғәйшә ҡош тунын ташлап, баланы имеҙә. Был хәл бер нисә тапҡыр ҡабатлана. Быны белеп ҡалған ир Ғәйшә улын имеҙеп ултырған саҡта уны тотоп ала һәм башҡаса ебәрмәй. Хәйбулла районында йәшәүселәр бөгөн дә: "Кәкүк - кеше балаһы", тиҙәр. Бөрйән һәм Белорет районадарында "Кәкүк-ҡатын зарлы булғанға, кәкүк-ҡош та зарлы", тип әйтәләр.

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ҠАҘЫЛЫ ҠЫМЫҘҘЫ...

## Баймаҡҡа барып тәмлә!

**Ошо көндәрҙә Әлшәй районы үҙәге Раевка ҡасабаһында Ҡымыҙсылар һәм Йылҡысылар республика бәйгеләре уҙҙы. Быйыл ҡымыҙсылар был бәйгегә унынсы тапҡыр йыйылһа, йылҡысылар ярышы икенсе тапҡыр ғына ойошторола. Ойоштороусылары - БР Ауыл хужалығы министрлығы, Әлшәй район хакимиәте. Бағыусылар - төрлө ойошма-предприятиелар. Мәҫәлән, иң төп бүләкте - тоҡом айғырын "Өфө" дәүләт ат һарайы" дәүләт учреждениеһы биргән.**




Әлшәй район һабантуйы уҙғарыла торған яланға ҡымыҙсылар - 30, йылҡы көтөүселәре 17 районадн килгәйне. Ҡымыҙ оҫталары үҙҙәре етештергән ҡымыҙҙың сифаты, ҡымыҙ һауытының биҙәлеше, ярлыҡтағы яҙыуҙарҙың дөрөҫ яҙылышы, хеҙмәт ҡоралдары үҙенсәлеге, ҡымыҙсылыҡ өлкәһенә ҡараған һорауҙарға яуап биреп көс һынашһа, йылҡысылар - атты туғарып, кире егеү йылдамлығында ла, үҙҙәре ишкән сыбыртҡыны шартлатыу таҫыллығында ла, хатта көтөүсе муҡсаһында булырға тейешле иң кәрәкле ҡорамалдарҙы, кәрәк-яраҡты дөрөҫ билдәләү буйынса ла ярышты. Беҙ, үҙ сиратыбыҙҙа, һаулыҡҡа шифалы, йәнгә - таныҡ "аҡ" алтыныбыҙҙы, кем әйтмешләй, республиканың иң шәп оҫталары етештергән ҡымыҙҙы тәмләп ҡарау, ҡымыҙсылар менән яҡындан танышыу мөмкинлеген ҡулдан ысҡындырманыҡ. Бәйгегә бик етди әҙерләнеп килгән, иң төп бүләккә лайыҡ булған Баймаҡ районы Ишмырҙа ауылы шәхси эшҡыуары Әклимә Булат ҡыҙы Әфләтунова менән ҡымыҙ "йәрминкәһе" барған урында иркенләп һөйләшеп булманы. Апайҙың ҡымыҙын тәмләп ҡарарға теләүселәр балға йыйылған һағыҙаҡ һымаҡ ябырылғайны. Ҡымыҙы тураһында апай үҙе лә бик матур итеп һөйләй, етмәһә. Ул ҡымыҙына, үҙе әйтмешләй, боронғоса итеп, ҡаҙы майы, еләк-емеш һала икән. Ҡаҙылы ҡымыҙҙы эсеп ҡарарға тура килмәне, ә бына еләкләһен тәмләп ҡараҡас, уның үҙенсәлекле эсемлек икәненә инанылдыҡ. Автобустарға тейәлешеп, Әлшәй районының алдынғы ҡымыҙсыһы - Яңауыл ауылында уңышлы эш алып барған Руслан Ахуновтың ҡымыҙ әҙерләү фермаһын ҡарағандан һуң, Әклимә апай менән иркенләп әңгәмә ҡороп алдыҡ.

- Ауылыбыҙҙа бөтәһе 254 йорт иҫәпләнә, - тип һөйләп китте Әклимә апай. - Меңдән ашыу кеше йәшәй. Күптәр йылҡысылыҡ менән шөғөлләнә. Районыбыҙ йылҡысылыҡ өсөн ҡулайлы урында урынлашҡан: яландарыбыҙ ҙа, ҡылғанлы тау һырттарыбыҙ ҙа, урман-тауҙарыбыҙ ҙа бар. Быйыл бесән дә һәйбәт уңды.

Ҡайһы бер ауырлыҡтар ҙа бар инде, уның булмай. Мал артынан күҙ яҙлыҡтырмау, тәрбиәләү, йүнен күреү кәрәк. Әҙ генә күҙ яҙлыҡтырһаң, бәләгә тарыуыңды көт тә тор. Беҙ оло юл буйында йәшәйбеҙ. Бына шул беҙгә ныҡ ҡамасаулай. Юлға сыҡҡан малды йә ҙур машиналар һуҡтырып китә, йә йылҡылар үҙҙәре еңел машиналарға бәрелә. Беҙгә лә, водителдәргә лә унайһыҙлыҡ тыуҙыралар.

Яңыраҡ айғырыбыҙ ҡазаланып ҡуйҙы. Хәҙер колхоз-совхоздар бөтөп, ветврачтар кәмегәс, айғырҙар күбәйҙе. Һөҙөмтәлә, улар үҙ-ара һуғыша. Шундай бер айғыр беҙҙең айғыр менән тибешеп, беҙҙекенең бауырын йыртa типкән. Айғырҙар ҙа кеше һымаҡ - үҙ ғаиләләрен һаҡлайҙар. Өҫ көн генә була - айғырыбыҙ һуйып алдыҡ.

Тағы бер бәлә: ҡараҡтар һөжүм итә, йыл һайын бер-ике тай юғалып тора. Тотолғандары юҡ әле.

Халыҡ беҙҙең ҡымыҙҙы ярата. Йәйгеһен ҡымыҙ һатыуҙан ярайһы ғына килем дә алабыҙ. Үҙемсә һанап ҡарағаным да бар - айына 25-30 мең һум тирәһе йыйыла. Шуныһына ла ризабыҙ. Минең үҙемдең төп эшем дә бар бит. Төп эшем булмаһа, ҡыйынға ла тура килер ине. Мин хеҙмәт дәресе уҡытыусыһы булып, мәктәптә эшләнем. 2012 йылда ҡыҫҡартыуға эләккәйнем, магазин асып ебәрҙем. Ә йылҡысылыкты миҙгел эше тип кенә ҡарайым. Ирем Тәлғәт Нурислам улы ла ат йәнле кеше. "Ҡара эште" ул башҡара инде, аттарҙы тәрбиәләй, ашата, бейәләрҙе һауынға алып килә.

Ҡымыҙ конкурстарынан ҡалғаныбыҙ юҡ. 2012 йылда Бөрйәндә үткән ҡымыҙсылар конкурсында 2-се урын алғайныҡ. Был юлы еңеүсе булдыҡ. Айғыр бүләк итеүҙәре күктән көткән бәхет һымаҡ булды. Конкурс шарты буйынса, XI республика Ҡымыҙсылар һәм Йылҡысылар конкурсы икенсе йыл беҙҙә, ҡунаҡсыл Баймаҡ ерендә уҙасаҡ. Әйткәндәй, районыбыҙ хакимиәтенә оло рәхмәт - беҙҙең юл сығымдарыбыҙҙы улар ҡапланы.

Шулай итеп, йылҡы көтөүселәре араһында урындар түбәндәгесә билдәләнде: Федоровка районынан Салауат Насировҡа - 4-се, Әбйәлил районынан Раян Ҡәҙеровҡа - 3-сө, Стәрлетамаҡ районынан Айҙар Ғәбдәсовҡа - 2-се, Әлшәй районынан Наил Ғәлиәкбәровҡа 1-се урын бирелде. Ҡымыҙсылар конкурсында Стәрлебаштан Альберт Ибраһимов - өсөнсө, Әлшәй ҡымыҙсыһы Рәфис Әминев - икенсе урын яуланы. Беренсе урын яулаусы менән танышҡыҙыҡ инде - ул Баймаҡтан Әклимә Әфләтунова булды.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# ӘЛМИСАҠТАН...



➔ 1586 йыл - Башҡорттар төҙөгән "Имән ҡала" емертелеп, уның урынына Өфө ҡалаһына нигеҙ һалына. Ҡала төҙөлөп бөткәс, уның ерҙәре дүрт административ берәмек - Нуғай, Себер, Ҡазан һәм Өсән даруғаларына (юлдарына) бүленә.

➔ 1586 йыл - Әстерхан рус ғәскәре воеводаһының Посол приказына (илселектәр менән етәкселек итеүсе дәүләт учреждениеһы) хатында Нуғай ханы Урустың Һамар, Ағиҙел, Ҡариҙел һәм Яйыҡ йылғалары буйында ҡалалар төҙәләшенә ҡаршылыҡ күрһәтеүе тураһында хәбәр ителә.

➔ 1598 йыл - Себер ханлығының еңелеүенән һуң Көнсығыш Башҡортостан Рәсәй составына инә.

➔ XVII быуат баштары - Башҡорттар поляк һәм швед баҫҡынсыларына ҡаршы һуғышҡа саҡырыла. 1608 йылда улар Тушино лагерында Лжедмитрий Икенсене тар-мар итеүҙә ҡатнаша, 1611 - 1612 йылдарҙа Минин һәм Пожарский етәкселегендәге ополчение составында поляктарҙы Мәскәүҙән ҡыуыуҙа ҡатнаша.

➔ 1613 йылдың 21 феврале - Тәхеттә - Михаил Федорович Романов - Романовтар династияһы башлана. Батшаны инаугурациялау тантанаһында башҡорт халҡынан да вәкилдәр ҡатнаша.

➔ 1617 йыл - Уралда баҡыр мәгдәне ятҡылығы табыла.

➔ 1628 - 1631 йылдар - Уралда (Ница йылғаһы буйында ) тәүге завод төҙәлә.

*✓ Был ике ҡала бик ҙур түгел һәм бында сауҙагәрҙәр һирәк була. ...Был ике ҡала ла Иҙелгә ҡушылған йылға буйында урынлашҡан". Иҙелгә ҡушылған йылға Ағиҙел булырға тейеш һәм ике ҡаланың береһе, моғайын, Өфө ҡалаһылыр.*



ТӨП СЫҒАНАҠ

**Билдәле булыуынса, Башҡортостан, башҡорттар һәм Өфө тураһында мәғлүмәт Урта быуатҡа ҡараған төрлө тарихи-географик хеҙмәттәрҙә, карталарҙа, шул заман сәйәхәтселәренең һәм миссионерҙарының яҙмаларында осрай. Көнбайыш Европа илдәрендә эшләнгән карталар, унда Өфө ҡалаһының нисек һүрәтләнеүе тураһында "Киске Өфө" гәзите биттәрендә һөйләгәйнек инде.**

# ЙЫЛҒА БУЙЫНДАҒЫ ҠАЛАЛАР

## Уларҙың икеһенең береһе Өфө булыр

Башҡорт иле, Өфө ҡалаһы Урта быуат көнсығыш карталарында ла сағылдырылған. Шуларҙың береһе - 1154 йылғы Иҙриси картаһы.

Әбү Абдаллаһ Мөхәммәт ибн Мөхәммәт ибн-Абдаллаһ ибн Иҙрис әл-Хәммәҙи әл-Хәсәни - бөйөк ғәрәп географы, сәйәхәтсеһе, картографы һәм тарихсыһы. Ул 1100 йылда Марокко иленең Сеута ҡалаһында тыуа. Әл-Иҙриси мосолман Испанияһының мәҙәни үҙәге Кордовала белем ала. Ул күп сәйәхәт ҡыла: Урта диңгеҙ буйҙарында, Кесе Азияла, Францияла, Англияла, Пиреней ярымутрауы илдәрендә була. 1130 - 1154 йылдарҙа Палермо ҡалаһында Сицилия короле Рожер II һарайында йәшәй. Королдең ҡушыуы буйынса әл-Иҙриси "Өлкәләр буйынса сәйәхәт итеү тураһында хыялланыусының мауығыуҙары" ("Нузхэт әлмуштаҡ фихтирэк әлафаҡ") исемле ҙур географик хеҙмәт ижад итә. Был энциклопедик әҫәрҙә автор быға тиклем билдәле булған бөтөн тиерлек географик мәғлүмәттәрҙе туплауҙы маҡсат итеп ҡуя. Был хеҙмәтендә Иҙриси IX - X быуат авторҙарын (Ибн-Хуакал, Джейхэни, Ибн-Хордадбэх, әл-Мәсүди һәм башҡаларҙы) файҙалана һәм уны 1154 йылда тамамлай.

Китабында Иҙриси Башҡортостан ере, уның яҡынтирәһен һүрәтләй. Ул башҡорт илендә ҡалалар булыуы тураһында былай тип хәбәр итә: "Эске башҡорттар (басджиттар) ҡалаларынан Мастр (Маср) һәм Кастрҙы (Каср) әйтәйек. Был ике ҡала бик ҙур түгел һәм бында сауҙагәрҙәр һирәк була. ...Был ике ҡала ла Иҙелгә ҡушылған йылға буйында урынлашҡан". Иҙелгә ҡушылған йылға Ағиҙел булырға тейеш һәм ике ҡаланың береһе, моғайын, Өфө ҡалаһылыр. Ни өсөн Мастр, Кастр исемдәре? Башҡорт илендә ҡалалар булыуы тураһында мәғлүмәт Иҙрисигә бер нисә информатор аша килгән һәм шул сәбәпле ҡалаларҙың исеме үҙгәргән формала, боҙолоп килеп етеүе ихтимал.

"Өлкәләр буйынса сәйәхәт итеү тураһында хыялланыусының мауығыуҙары" әҫәренә ҡушымта итеп Иҙриси ике карта эшләй. Шуларҙың береһе - Түңәрәк донъя картаһы. Икенсеһе 70 биттән торған бөтә донъяны һүрәтләгән карта. Был картала 2500-ҙән ашыу атама күрһәтелгән. Шул иҫәптән Башҡортостандағы географик объекттар ҙа һүрәтләнә. Башҡортостан ере VI һәм VII климаттар (киңлек зонаһы) еренә индерелгән Иҙел (Волга), Ағиҙел, Кама, Ағиҙелдең ҡушылмалары Ҡариҙел һәм Әй йылғалары сағылдырылған. Ағиҙел буйында - Масра, Касра, Кама йылғаһы янында Каракыя ҡалаһы күрһәтелгән.

**Айбулат ПСӘНЧИН, география фәндәре докторы.**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**XII быуатта Көнсығыш илдәрендә Башҡортостан иле киң билдәле булған, хатта башҡорттарҙың ҡалалары булғанлығы тураһында ла мәғлүмәт килеп еткән. Ошо ҡалаларҙың береһе, һис шикһеҙ, Өфө ҡалаһылыр. Тарихи, географик, картографик һәм археологик сығанаҡтар Өфө ҡалаһының боронлоғон билдәле булыуын күрһәтә.**



➔ 1633 йыл - Кама йылғаһы буйында тағы бер баҡыр мәғдәне яҭҡылыуы асыла һәм ул эшкәртелә башлай.

➔ 1636 йыл - Тобол дьягы С. Есипов төҙөгән йылъяҙмала тәүләп Урал тауҙары тәбиғәтенең ҡайны бер үҙенсәлектәре һүрәтләнә. Был Урал тураһында һөйләүсе ХУП быуаттағы иң ҡыҙыҡлы урыҫ яҙмаларының береһе.

➔ 1645 йыл - Минзәлә башҡорттары баш күтәрә.

➔ 1647 йылдың 7 авгусы - Волга буйы башҡорттарынан яҫаҡҡа һуҫар тиреһе йыйыу маҡсатында Ҡаҙандан Федор Климшин етәкселегендә судно ҡуҙғала. Ул Һарытауға тиклем килеп етә.

➔ 1648 йыл - Көнгөр ҡалаһына нигеҙ һалына башлай, Көнгөр өйәҙе барлыҡҡа килә.

➔ XVII быуаттың 2-се яртыһы - Урал-Волга төрки әҙәбиәтенең бөйөк шағиры Мәүли Ҡолой йәшәгән йылдар.

➔ 1662-1664 йылдар - Ағалы-кустылы старшиналар Ҡонҡас менән Дауанай, Ишмөхәмәт һәм Һары Мәргән батырҙар етәкселегендәге беренсе дөйөм башҡорт восстаниеһы

➔ 1662 йылдың 7 июле - Нуғайҙарҙың Һамарға һөжүме. Уҡсылар ғәскәре уларҙы Ырғыҙ башҡорттары араһынан ҡыуалай.

➔ 1663 йыл - Бөрө ҡалаһына нигеҙ һалына.

➔ 1667 йыл - Тоболда воевода П.И Годуновтың туранан-тура етәкселегендә Себерҙең һыҙмаһы эшләнә, унда Урал тауҙары Обь ҡултығынан алып Башҡортостанға тиклем бөтөн һыҙымында күрһәтелә һәм ул "Тура үре Ташы"тип атала.

➔ XVII быуат уртаһы - ХУШ быуат баштары - 1704-1711 йылдарҙағы башҡорт восстаниелары етәкселәренең береһе Алдар батырҙың атаһы Күсем Түләкәев йәшәгән йылдар.

➔ XVII быуаттың 70-се йылдары - 1740 йыл - Алдар Иҫәнгилдиндың ғүмер йылдары. Ҡырым һәм Азов һуғыштарында ҙур ҡаһарманлыҡ күрһәтә. 1704-1711 йылдарҙа башҡорт восстаниеларына етәкселек итә. 1729=1731 йылдарҙа ҡаҙаҡтарҙа Рәсәй дәүләте илсеһе булып тора. 1735-1740 йылдарҙағы восстаниела башҡорттарҙы яҡлап сыҡҡаны өсөн ҡулға алына һәм 1740 йылдың 16 майында Минзәләлә аҫып үлтерелә.

➔ 1670-1671 йылдар - Башҡорттар Степан Разин етәкселегендәге Крәҫтиәндәр һуғышында ҡатнаша.

➔ 1670 йылдың 21 майы - Степан Разиндың башҡорттар һәм ҡалмыҡтарҙан торған отряды Һамар нығытмаһына һөжүм яһай. Крепость янындағы нығытмаларҙы емереп, отряд Һамар йылғаһының һул ярында нығытма янында туҡтала. 26-27 августа өҫтәлмә көстәр килеп еткәс, отряд Һамарҙы алыуҙа ҡатнаша.

**Дәүләт МӘҺӘҘИЕВ төҙөгән. (Дауамы бар).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Йомғаҡлау

Алдынғы совет агрономия фәне һәм алдынғы колхоз-совхозддарҙың бай тәжрибәһе йоғонтоһонда ауыл хужалығы, күпселек башҡорт халҡының төп шөғөлө, һиҙелерлек үҙгәрештәр кисерҙе.

Әгәр революцияға тиклем башҡорттарҙа ауыл хужалығында ябай техника ҡулланылһа, һуғышҡа тиклемге биш йыллыҡтарҙа социалистик реконструкция кисерә.

Хөкүмәт ҡарары менән ерҙәр колхоздарға мәңгелек ҡулланыуға бирелгән. Башҡортостанда яңы колхоздар 1920-1922 йылдарҙа ойошторола. Ә 1929 йылдан коллектив хужалыҡ хәрәкәте тотошлай коллективлаштырыуғаса үҫә. Ҙур ерҙәре булған эре социалистик хужалыҡтар ойошторолоуы ҡатмарлы ауыл хужалығы машиналарын ҡулланыу һәм өлөшләтә ер эшкәртеүҙең үлән сәсеү баҫыусылығы системаһын алып барыу мөмкинлеген киңәйтә.

Башҡорттарҙың ауыл хужалығын үҙгәртеп ҡороуҙа машина-трактор станциялары ҙур роль уйнай.

Революцияға тиклем ауыл хужалығы тар игенселек йүнәлешендә була. Төньяҡ-көнбайыш башҡорттары ғына бик бәләкәй майҙандарҙа киндер һәм етен дә сәсә.

Әлеге ваҡытта Башҡортостанда баҫыу һәм мал аҙығы сәсеүҙәре уңышлы индерелә һәм үҙләштерелә. Шулай уҡ ерҙе дөрөҫ эшкәртеү һәм ашлау системаһы ла үҙләштерелә. Орлоҡсолоҡ киңәйтелә һәм агротехника үҫтерелә.

Һуғарыу системалары төҙөү һәм урман һыҙаттары булдырылыуы ялан районларында баҫыуҙарҙы ҡыуан елдәрҙән һаҡлай.

Күреүебеҙсә, Башҡортостан тәбиғәте төрлө. Урынына ҡарап, рельеф, тупраҡ ҡатламы, климат һәм бигерәк тә микроклимат шарттары үҙгәрә. Шуға күрә бер үк система ҡулланғанда ла һөҙөмтә төрлө булыуы мөмкин.

Баҡсасылыҡ коллектив башҡорт хужалыҡтарында икенсе роль уйнай. Ғәҙәттә, йәмәғәт баҡсаларына бер нисә тиҫтә гектар ер бүленә, унда картуф, кәбеҫтә, ҡыяр, һуған һәм башҡа йәшелсә ултырталар. Урыны менән сөгөлдәр һәм баҡса культуралары сәселә. Шәхси хужалыҡтарҙа, киреһенсә, баҡсасылыҡ киң үҫеш алған.

Әгәр революцияға тиклем башҡорттар һәр ерҙә лә хатта картуф та сәсмәһә, хәҙерге ваҡытта баҡсаһыҙ һәм картуф ултыртмаған бер генә колхозсы ла юҡ. Алда телгә алынған осорҙа башҡорттарҙың йорто эргәһендә мал аҙбарынан башҡа бер нәмә лә булмай. Шәхси хужалыҡтарҙа күпләп мал тотоу кәрәклеге хәҙер юҡ, шуға ла был майҙандар баҡса урынына ҡулланыла. Йәшелсә араһынан картуфҡа өҫтөнлөк бирелә. Был мал ихаталарының бай тупрағы баҡсасылыҡ өсөн бигерәк ярап ҡалған.

Таулы районларҙа ҡатмарлы климат шарттарында башҡорттар баҡсаға тик картуф ҡына сәсә, тиергә лә мөмкин. Башҡортостандың башҡа районларында иһә улар картуфтан башҡа ҡыяр, кәбеҫтә, һуған, кишер, мал сөгөлдөрө һәм ҡыҙыл сөгөлдөр ултырта. Шәкәр сөгөлдөрө үҫтереүселәр ҙә бар.

Борон башҡорттар бөтөнләй шөғөлләнмәгән баҡсасылыҡ шулай киң таралыу алған. Бигерәк тә төньяҡ-көнбайыш Башҡортостанда, Урал арьяғында колхоз хужалыҡтарында баҡсасылыҡ килемле тармаҡтарҙың береһе.

*✓ Үҙебеҙҙә өлгәшә алмаған бейеклектәргә улар ситтә өлгәшә, башҡорт милләтенең данын күтәрә. Беҙгә йәштәрҙе ситкә сығарып ебәреүҙән ҡурҡырға ярамай, ә уларҙың республикабыҙға эшкә ҡайтыуы өсөн шарттар тыуҙырыу кәрәк.*



# БАРЫҺЫ ЛА
## әммә ололар

**Милләт киләсәге - йәштәр ҡулында, тигән хәҡиҡәткә күптән төшөндөк төшөнөүгә, әммә йәштәр үҙҙәре ул киләсәкте, иңдәренә ниндәй оло бурыс йөкмәргә тейешлектәрен күҙ алдына килтерәме икән? Уларға ошоно аңғартыу өсөн ниндәйҙер саралар күреләме, етерлек ярҙам күрһәтеләме, милләтебеҙҙең бөгөнгөһө һәм киләсәгенә ҡарата уларҙың үҙҙәренең фекере ниндәй? Ошо һәм башҡа һорауҙар буйынса бөгөн беҙҙә йәштәр үҙҙәре фекер алыша - "Аманат" үсмерҙәр журналының баш мөхәррир урынбаҫары Мансур ҠАҘАҠАЕВ, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты эргәһендәге Йәштәр советы ағзаһы Таңсулпан РӘСҮЛ, Ижтимағи-сәйәси һәм хоҡуҡи тикшеренеүҙәр институтының ғаилә һәм демография лабораторияһы ғилми хеҙмәткәре Наилә ШӘМСЕТДИНОВА.**

**▸ Беҙҙең илдә һәр кем үҙе теләгән эш менән шөғөлләнә ала - йәштәр өсөн бындай азатлыҡ яҡшымы, әллә уның насар яҡтары ла бармы?**

**Мансур:** "Они сделали нас свободными, точнее, мы никому не нужны", тип йырлай Юрий Шевчук. Ысынлап та, беҙ, йәштәр, бөгөн бер кемгә лә кәрәкмәйбеҙ һымаҡ. Әммә бер кемгә лә кәрәкмәйбеҙ, тип илап, сәсебеҙҙе йолҡоп ултыра алмайбыҙ. Беҙ үҙебеҙгә кәрәкбеҙ. Сөнки тормош принцибы шулай: кеше үҙен кешегә һанамаһа, үҙен үҙе яратмаһа, башҡалар ҙа уға түбәнһетеп ҡарай. Хәҙерге заман азатлығының яҡшы яғы шунда: һәр кем үҙендә булған потенциалды тормошҡа ашыра, һәләттәрен үҫтерә ала. Кемдеңдер уға ярҙам итеү-итмәүе - икенсе мәсьәлә. Әгәр ул үҙ потенциалын ололар тәжрибәһе ярҙамы менән тормошҡа ашырһа, уға күпкә еңелерәк буласаҡ һәм ул юғарыраҡ маҡсаттарға өлгәшәсәк. Ҡайһы берәүҙәр үҙенең нимәгә һәләтле булыуын тейешенсә баһалап та етмәҫкә мөмкин, шул сәбәптән артабанғы үҫеш юлы тотҡарланып ҡалыуы ла бар. Бизнес өлкәһендә лә шул уҡ хәл. Мәҫәлән, йәш эшҡыуар Заһир Ишкинин башҡортса яҙыулы футболкалар һатыу менән шөғөлләнеп, аҡса эшләй. Әгәр уның тырышлығын, шул юҫыҡта эшләргә һәм артабан үҫергә теләген берәй Алишер Усманов кеүек олигарх шәйләп ҡалып, бизнес донъяһының ҡайһы бер серҙәрен асырға ярҙам итеп, етмәһә, ун йылдан кире ҡайтарырһың, тигән шарт ҡуйып, күпмелер инвестиция ла һалһа, бәлки, беҙ Заһир Ишкинин тураһында "Форбс"тың исемлегенә ингән кеше булараҡ һүҙ йөрөтөр инек. Ҡыҙғаныҫҡа күрә, беҙ үҙ йүнебеҙҙе үҙебеҙ күрәбеҙ, ҡайҙандыр ярҙам килеүенә иҫәп тотоп булмай. Был хәлебеҙҙе яҡшы йә насар тип баһаламайым - ысынбарлыҡ шулай.

**Наилә:** Кешенең йәне теләгәнен эшләргә мөмкинлектәре бар бөгөн. Шулай ҙа йәмғиәттә кешеләрҙең азатлығы ниндәйҙер сиктәргә индерелә, социаль лифттар барлыҡҡа килә. Кеше нимә менән шөғөлләнергә теләй, ниндәй динде һайлай, ҡайҙа барырға теләй - ул ирекле, ләкин һәр йәмғиәттә кешене ҡиммәттәр сигенә индерәләр. Йәштәрҙе лә шул ҡиммәттәр сигендә тәрбиәләйҙәр.

**Таңсулпан:** Бындай азатлыҡтың йәштәр өсөн тик ыңғай яҡтарын ғына күрәм. Сөнки барыһы ла йәштәрҙең үҙ ҡулында. Әгәр ҙә улар ялҡау булмаһа, илебеҙҙә ниндәй дәүләт ҡоролошо булғанда ла, барыһын да үҙ ҡулына алып эшләй ала. Ә беҙ сирек быуат үтеп китһә лә демократик илдә йәшәүебеҙгә һаман өйрәнә алмайбыҙ. Мәҫәлән, ошонда ултырғандарҙың кемеһе Башҡортостан Республикаһының Конституцияһын уҡып ҡарағаны бар? Кемдер тотоп та ҡарамаған, кемдер аңламаған - тимәк, беҙ мөмкинлектәребеҙҙе ҡуллана белмәйбеҙ...

**Мансур:** Мөмкинлектәребеҙҙе ҡуллана белмәйбеҙ, тигәндәй, бына минең дә теоретик яҡтан мөмкинлектәрем бик күп. Эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнә башларға, рәссам булырға миңә берәү ҙә ҡамасауламай. Әммә бының өсөн минең матди нигеҙем юҡ. Кредит алырға булыр ине, бурысҡа батҡым килмәй. Теләктәрем менән юҡлыҡ берләшеп, мине нуль балансына ултырта. Рәссам булам тиһәң, нисек һәм нимә төшөрөүең мөһим түгел, дөрөҫ пиар ойоштороп та уны сәнғәт әҫәре кимәленә күтәрергә мөмкин. Әммә минең был эште атҡарырға теләгем юҡ. Ниндәйҙер мөмкинлектәрен тормошҡа ашырыу өсөн кешенең теләге булырға тейеш. Ә ул теләкте беҙҙә ата-әсә тәрбиәләй, тик беҙҙең быуын йәштәренә ундай тәрбиәне биреп өлгөрмәгәндәр. Сөнки сирек быуат эсендә генә йәмғиәт киҫкен рәүештә үҙгәреп китә алмай, тормоштоң бер формацияһынан икенсеһенә күсеп яраҡлашып йәшәү өсөн кәмендә ярты быуат тотороҡло тормошта йәшәргә кәрәк. Шул ваҡытта ғына билдәле бер үҫеш векторы барлыҡҡа килә ала.

**Наилә:** Мансур менән килешәм, йәш кешенең үҙ мөмкинлектәрен тулыһынса ҡуллана алыуы уның үҙенән генә тормай, бында мөхит һәм йәмғиәттә өҫтөнлөк алған ҡиммәттәр бик етди роль уйнай. Уҡыу йортонда бирелгән теоретик белемде ҡайһы саҡта тормошта ҡулланып та булмай. Донъяла үҙгәрештәр шул тиклем тиҙ бара, былтыр яҙылған ғилми хеҙмәт быйыл актуаллеген юғалта. Шундай ашығыс темптан артта ҡалмаҫ өсөн йәштәргә төрлө өлкәләрҙәге тәжрибәне өйрәнергә, төрлө курстарға йөрөргә кәрәк. Өфөлә бындай тренингтар күп үткәрелә, араларында түләүһеҙҙәре лә бар. Бер ниндәй башланғыс капитал һалмайынса, үҙ эшеңде нисек башлап ебәрергә мөмкин булыуы тураһында ла курстар ойошторола. Бындай осрашыуҙарҙа һәр кемгә әҙер эш программаһы тәҡдим итә алмаһалар ҙа, дәлилдәр килтереп, үҙ көсөңә ышанырға өйрәтәләр. Ул курстарға йөрөргә теләмәһәң, интернет аша ла үҙеңә кәрәкле мәғлүмәт табырға мөмкин, теләгең генә булһын. Дөйөм әйткәндә, ололар йәштәрҙе тәнҡитләп, әрләргә әҙер торһа ла, хәҙерге йәштәр араһында бөтәһенә лә өлгө булырлыҡ матур тормош көткән, эсмәгән һәм тәмәке тартмаған, үҙ эштәре өсөн яуап бирергә әҙер булғандар бик күп. Йәштәр сәләмәт тормош яҡлы икән, был социаль сәләмәтлек тигәнде аңлата. Тимәк, йәмғиәтебеҙҙә дөрөҫ фекерләгән, дөрөҫ аҙымдар яһаған, яҡшы эштәр башҡарған кешеләр һаны арта.

**▸ Кешенең шәхес булып формалашыуына төрлө факторҙар тәьҫир итә. Йәштәргә дөрөҫ йүнәлеш биреү урындарын нисек билдәләргә һуң?**

**Мансур:** Ана һөтө менән инмәгәнде, тана һөтө менән инмәҫ, тиҙәр. Яҡшы менән яман төшөнсәләрен тәү башлап ата-әсәһе өйрәтмәһә, артабан ул кешенең был төшөнсәләр тураһында уйланыуы икеле. Әлбиттә, Хоҙай Тәғәләнең ихтыяры менән ул ҡулына китап алыр, мәктәптә һәм юғары уҡыу йортонда уҡыған осорҙа төрлө түңәрәктәргә, өҫтәмә дәрестәргә йөрөгәндә философик төшөнсәләр тураһында уйланыр, дөрөҫ юлдан китер, тигән өмөт бар. Ләкин бөтә йәштәр ҙә китап уҡымай, хәҙер бөтөнләй интернет селтәре аша ғына мәғлүмәт алыуға күстек. Бына шул интернет донъяһы аша тормошҡа үҙ ҡарашын формалаштыра башларҙан алда йәш кеше яҡшы, насар кеүек төшөнсәләр буйынса дөйөм фекер туплаған булырға тейеш. Шул саҡта ғына ул интернеттағы төрлө яҡҡа тартҡылаған мәғлүмәттәрҙе анализлап, шәхсән үҙе өсөн кәрәклеһен һайлап ала аласаҡ. Мәҫәлән, минең ҡарамаҡҡа яҡшы тойолған нәмә кемгәлер яман булып күренеүе ихтимал. Минең уйым менән тап килгән бер фекер икенсе кеше өсөн бөтөнләй ят, ҡабул итмәҫлек булыуы бар.

**Наилә:** Ғаиләлә алған тәрбиә, һис шикһеҙ, кешенең шәхес булараҡ формалашыуына ҙур йоғонто яһай. Унан тыш, айырым кешенең аңы формалашыуға ул йәшәгән мөхиттәге төрлө социаль төркөмдәр тәьҫир итә. Был референт төркөмгә дуҫтар, туғандар, коллегалар, төрлө йәмәғәт ойошмалары инергә мөмкин. Беҙ ғаиләлә ата-әсәй өйрәткәндәрҙе, ҡараштарҙы шул референт төркөмдәргә ҡарап сағыштырабыҙ. Өйҙә балаға, урлашма, алдашма, ғәҙел һәм дөрөҫлөк яҡлы бул, тип өйрәтһәләр ҙә, уны уратып алған мөхиттә бығa ҡапма-ҡаршы мөнәсәбәт булыуы бар. Йәш кеше ата-әсәһенән айырылып ситкә уҡырға китеп, үҙ аллы тормош көтә башлағас, ниндәй мөхиттә йәшәргә теләүен аңлы рәүештә үҙе һайлап алырға бурыслы. Матур тормош ҡороп, уңышлы һәм эшлекле булырға, юғары үрләргә иҫәп тотҡан йәш кеше мотлаҡ шул уҡ маҡсаттар менән янып йәшәүсе кешеләрҙән торған референт төркөмдө һайларға тейеш. Уңыштарың һинең тирәләге кешеләрҙең уртаса арифметик уңышы, тип юҡҡа ғына әйтелмәй.

**▸ Йәш быуын замандан артта ҡалмайынса, үҙен аҡыл, тәрбиә, белем яғынан үҫтерһә, камиллаштырһа, сәләмәт йәшәү рәүеше алып барһа, киләсәк ышанысты ҡулдарҙа, тип иҫәпләй алабыҙ. Башҡорт йәштәре был йәһәттән ниндәй уңыштарға өлгәшә?**

**Таңсулпан:** Хәҙерге заманда башҡорттар ҙа дөйөм тулҡынға эйәреп, уртаҡ "ҡиммәттәр" артынан ҡыуып йәшәй. Беҙ, ҡулыбыҙҙан телефондар һәм гаджеттар төшөрмәгән, күберәк аҡса табыуҙы маҡсат иткән, тормош ығы-зығыһында ҡайнап йәшәүсе быуын, үҙебеҙҙең милли асылыбыҙҙы онота барабыҙ. Һис шикһеҙ, үҫешәбеҙ, сәләмәт һәм айыҡ тормош алып барырға, юғары белем алып, яҡшы урында эшләргә ынтылышыбыҙ ҙур, һөҙөмтәләребеҙ ҙә юғары. Айырым ғаиләләрҙә рухи тәрбиәгә лә баҫым яһала, әммә балалар һәм йәштәр милли үҙаңын юғалта бара...

**Мансур:** Йәштәрҙең фекерләү образы, менталитеты үҙгәрә. Улар бөгөнгө көн шарттарына яраҡлаша. Егерме йыл элек йәмғиәт уларҙың һәр аҙымын деградация тип ҡабул итеп, баҫып ҡуйыр ине. Мәҫәлән, комсомол сафында сағында тәүге миллионын эшләгән Ходорковскийҙы баҫҡандар бит. Ә уның тарихы шулай: комсомол төҙөлөшөндә эшләп йөрөгәндә юғары көсөргәнешле электр бағаналары үткән юл буйында ағастарҙы ҡырҡалар. Ағастарҙы йыйып алырға кәрәк тә, әммә бының өсөн өҫтәмә эшсе ҡулдар һәм техника табыуы ауыр мәсьәлә. Ходорковский был мәсьәләне еңел генә хәл итеп тә ҡуя: яҡынтирәләге ауылдар буйлап йөрөп, халыҡҡа: "Осһоҙға ғына ағас һатам, тик үҙегеҙ барып алырға тейешһегеҙ", - тип әйтеп сыға. Ауыл халҡы бығa аҡса түләй ҙә, ағасты үҙе барып алып та ҡайта. Бөгөн булһа, бындай мутлыҡҡа артыҡ әһәмиәт бирмәҫтәр, йәш кешенең башы эшләгән бит, тип кенә ҡуйырҙар ине, ә ул заманда, әлбиттә, Ходорковскийҙың башынан һыйпамағандар. Һәр осорҙоң шундай шәхестәре була, тик уларҙы мөхит ҡабул итәме-юҡмы, быныһы икенсе мәсьәлә. Бөтәһе үк булмаһа ла, башҡорт йәштәре лә ошо юҫыҡта уйлана башланы, заманға яраҡлашып, үҙенә һәм милләтенә файҙа килтереү юлдарын эҙләүселәр, шөкөр, бар.

**Наилә:** Үткән быуаттың 90-сы йылдарында күп кенә күрһәткестәр буйынса Башҡортостан Республикаһы Рәсәй кимәлендә беренсе рәттәрҙә торһа, хәҙер беҙ ғүмер оҙайлығы, кеше потенциалы буйынса башҡа төбәктәрҙән артта ҡалабыҙ. Мәскәү, Санкт-Петербург, Свердловск өлкәләре, Татарстан Республикаһы был йәһәттән алға сыға. Башҡортостанда тейешле мөмкинлектәр булмағанға күрә, йәш белгестәр ситкә китә. Әйтергә кәрәк, республикала социаль тигеҙһеҙлек тә күҙгә күренеп арта. Дөйөм алғанда, был артыҡ һиҙелмәгән дә кеүек, әммә байҙар һәм фәҡирҙәр араһында айырма ҙурая бара.

**Мансур:** Минеңсә, йәштәребеҙҙең ситкә уҡырға, эшләргә китеүе ыңғай күренеш. Үҙебеҙҙә өлгәшә алмаған бейеклектәргә улар ситтә өлгәшә, башҡорт милләтенең данын күтәрә. Республикала мөмкинлек килеп тыуһа, ул һәр ваҡыт кире ҡайта ала. Ситкә сығып китмәһә, уның киң белем даирәһе, сәйәси ҡарашы, зиһен кимәле күтәрелмәҫ ине. Беҙгә йәштәрҙе ситкә сығарып ебәреүҙән ҡурҡырға ярамай, ә уларҙың республикабыҙға яңынан эшкә ҡайтыуы өсөн шарттар тыуҙырыу кәрәк. Ә бөгөн ундай шарттар юҡ. Шуға ла ҡайтырға теләмәйҙәр.

**▸ Республикала хөкүмәт, дәүләт структуралары һәм йәштәр араһында матур бәйләнеш урынлаштырылыуы, йәштәрҙең төрлө йәмәғәт эштәренә йәлеп ителеүе тураһында беләбеҙ. Тик беҙҙең башҡорт йәштәре ойошмаларының, әллә инициатива етмәүҙән, әллә башҡа сәбәптән, был юҫыҡта әллә ни әүҙемлектәре һиҙелмәй...**

**Таңсулпан:** Башҡорт йәштәре ойошмаларының бик үк әүҙем эшләмәүе лә сәбәпселер бығa. Һуңғы йылдарҙа эш һүнеберәк ҡалғайны бит. Бына әле эшебеҙҙе йәнләндереү, шулай уҡ дәүләт структуралары менән бәйләнеш булдырыу буйынса ла ҡайһы бер башланғыстар барлыҡҡа килде. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты эргәһендә Йәштәр советы булдырыуыбыҙ - шуның тәүге аҙымы. Советҡа ингән йәштәр бик әүҙем генә эшкә тотондо, күптән түгел

Ырымбурға, Урал аръяғы райондарына барып, төрлө осрашыуҙар ойоштороп ҡайтты. Һөйәнтүҙ фажиғәһен иҫкә алыу көнөндә Асҡын районының Солтанбәк ауылына барып, олоһон да, йәшен дә йыйып, хәтер кисәһе ойошторҙолар. Тиҙҙән, 17-18 июлдә, Ҡырмыҫҡалы районының Шаймөрат ауылы эргәһендә Башҡорт йәштәре ҡоролтайы үткәрергә йыйынабыҙ. Уның сиктәрендә милләттәштәрҙе уйнатып-көлдөрөү менән генә сикләнмәйәсәкбеҙ, йәштәрҙе борсоған мөһим мәсьәләләр буйынса фекер алышыу, кәңәшләшеү йәһәтенән түңәрәк ҡорҙар ойошторорға ла ниәтләнәбеҙ.

**Наилә:** Үҙ эшмәкәрлегемдән сығып, йәштәргә проекттарын тормошҡа ашырыу өсөн мөмкинлектәр бик күп булыуын әйтә алам. Өфө ҡала округы хакимиәте, республика хөкүмәте төрлө майҙансыҡ, сессиялар, форсайт, түңәрәк ҡорҙар үткәргәндә бөтә халыҡтың конструктив тәҡдимдәрен ҡабул итергә әҙер. Яңыраҡ үткәрелгән "Халыҡ стратегияһы"нда ҡатнашып, мин дә үҙемдең проекттарымды, идеяларымды тәҡдим иттем. Шундай майҙансыҡтарҙа халыҡ мәнфәғәтенә эшләгән

Бер-берендә тартыу, милләттәшең булған өсөн генә ярҙам ҡулы һуҙыу - фекерләү йүнәлешенән килә. Беҙҙә, нишләптер, берәү карьера баҫҡысы буйлап өҫкә үрләй башлаһа, уны яратмай башлайҙар. Электән килә ул был холоҡ, заманында колхоз рәйесен, управляющийҙарҙы, совхоз директорҙарын шулай күрә алмағандар, ул урлап байыны, тип һөйләй торғайнылар. Бына шундай юғарыраҡ урында эшләүселәргә ҡарата бер ваҡытта ла: "Һин ҡалай һәйбәт кеше! Мин дә тырышайым да, һинең эргәңдә эшләйем әле", - тимәгәндәрҙер. Хәҙер ҙә кемдер шәхси эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнә, үҙенең бизнесын асырға ниәтләп, эш башлай икән, уларға ҡарата

булды. Шунда үҙебеҙҙекеләр батырҙарҙы башҡортса ҡеүәтләп ҡыҫҡырып, уларҙың көс-ҡеүәтенә һоҡланыу белдереп ултырһа, милләттәштәрем мине күтәрмәләп килгән бит, тип, донъя чемпиондарының күңеле нисек үҫер ине! Эргәлә ултырған башҡа милләт вәкилдәре лә, был башҡорттар ҡалай берҙәмдәр, тип һоҡланыр ине.

**Таңсулпан:** Шулай тиһәң дә, минеңсә, Өфөләге башҡорт йәштәре араһында берҙәмлек бар. Әллә миңә генә уңыш йылмайҙымы, һәр хәлдә, бында гел генә аҡыллы кәңәштәре, йылы һүҙҙәре менән ярҙам итергә әҙер булған кешеләрҙе осраттым. Ҡаҙағстандың Төркөстан ҡалаһына уҡырға барғас, баш-

үҙен уратып алған бөтәндәргә ҡарап тормош тәжрибәһе туплай, идеялары формалаша. Беҙ 25 йәшен тултырған кешегә, әйҙә, һин битараф булма, әҙерәк милләтең киләсәге тураһында уйлан, тип әйтеп, уның фекерләү йүнәлешен үҙгәртә алмайбыҙ. Тәрбиә эштәрен бала саҡтан башларға кәрәк, артабан үҫмерҙең ниндәй мөхиткә барып эләгеүен, кемдәр менән аралашыуын күҙәтеү ҙә мөһим. Ә башҡорттар араһында ярҙамсыллыҡ мәсьәләһенә килгәндә, йәштәргә тәү сиратта ололар яҡшы өлгө күрһәтергә тейеш. Йәштәрҙең аҡсалата ярҙам итергә мөмкинлеге самалы, ә бына ҙур вазифаларҙа эшләгән милләттәштәр, телəге булһа, үҙ башҡорто балаһына

унда әлеең һыҙғанып эшләрлек оло йәштәгеләр ҙә бар. Бында мин Канаданы миҫал итеп килтерер инем, был илдең күпселек халҡы ҡала ерендә йәшәһә лә, бөтә донъяға, шул иҫәптән Рәсәйгә лә иген һатып ята. Беҙҙә иһә, үҫтергән игенде алыусы булмағас, ерҙәр эшкәртелмәй. Кемдең бушлай эшләп, аҙаҡ үҫтергәнен һата алмай серетеп һалып ҡуйғыһы килһен? Үҙебеҙҙең фермерсылар ҙа конкурентлыҡҡа түҙә алмай, Израилдең сүллегендә үҫкән картуф беҙҙекенә ҡарағанда арзаныраҡ табаһа. Бәлки, һуңғы сәйәси ваҡиғаларҙан һуң илдең аҙыҡ-түлек хәүефһеҙлеген тәьмин итеү тураһында уйланып, ауыл хужалығы өлкәһендәге хәлдәр ыңғай сиселеш алыр әле...

**Таңсулпан:** Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстандың юл буйлап ултырған ауылдары бөтөнләй ауыр хәлдә булыуын күргән кеше булараҡ, мин үҙебеҙҙең хәлдә бик ыңғай баһалар инем. Уларҙа ауыл йорттары ла беҙҙәге кеүек төҙөк түгел, буялмаған ҡойма һәм ҡапҡалар. Ҡайһы бер ауылдарында өс-дүрт кенә емерек йорт тороп ҡалған. Май сүлмәге тышынан билдәле, тигән кеүек, Ҡаҙағстан ауылдарында халыҡ үтә ярлы. Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендә лә





# ҠУЛЫБЫҘҘАН КИЛӘ,
## тәжрибәһенә лә мохтажбыҙ

проекттарҙы ҡуш ҡуллап күтәреп алырға әҙер генә торалар.

**Мансур:** Беҙҙең бер насар ғәҙәтебеҙ бар: бер нәмәгә барып төртөләбеҙ ҙә, ҡарышып, ары китмәй ҙә ҡуябыҙ. Бер уй, маҡсат башыбыҙға ингән икән, уға илтер юл тыҡрыҡҡа алып барып төкөһә йә алдында таш стена торһа ла, башты өҫкә күтәреп ҡарап, бәй, хәҙер баҫҡыс алып килеп ҡуям да, был стена аша сығып китәм бит, тип уйлай белмәйбеҙ. Алдына ҡуйған маҡсаттарға өлгәшеү өсөн мөмкинлектәр күп, ләкин уға табан барған юлда ҡайһы саҡта үҙеңдең ҡараштарыңа төҙәтмә индереп, кәрәк урында теләктәреңде кәметеп, кәрәкһә, майлап та ебәрергә тура килә. Хәл-әхүәлдәргә ҡарап, яраҡлаша белеү яҡшы. Әйткәндәй, һуңғы йылдарҙа арабыҙҙа шундай йәштәр күбәйә башланы ул.

**▸ Йәһүдтәр кеүек бер-берендә тартырға кәрәк, тигән кәңәш тә ишетәбеҙ йыш ҡына. Башҡорт йәштәрендә ошондай бер-берендә тартыу, ярҙамлашыу, үҙ итеү кеүек сифаттар бармы?**

**Мансур:** Дөйөм башҡорт йәштәре тураһында һүҙ йөрөткәндә, бындай сифат юҡ дәрәжәһендәләр. Бер-береһен күптән белгән, дуҫлыҡтары һыналған кешеләр араһында ғына бер-береһенә ярҙам ҡулы һуҙыу, ауыр саҡта ла, еңелендә лә бергә булыу ғәҙәти күренеш.

ла шундай уҡ мөнәсәбәткә тап булабыҙ. Бына яңыраҡ бер таныштарым ҡымыҙ һатыу эшенә тотондо. Эшен яйға һалып алғансы, уға ваҡ-төйәк сығымдарын ҡапларлыҡ аҡса эшләп алыу кәрәк бит инде. Шуны уйлап, исмаһам, бер 150 һумыңды тоттор ҙа, бер һауыт ҡымыҙын алып кит. Ә беҙҙең егеттәр мотлаҡ: "О, сәләм! Ҡымыҙ һатып торанмы? Аҡсам юҡ, ҡайҙа, миңә бушлай ҡойоп бир берәй шешә. Йәлкеме әллә?.." - тиәсәк. Улар был милләттәшенең ҡайҙалыр барып, үҙе шул ҡымыҙҙы һатып алып, тейәп алып килеп, эҫеһенә-һыуығына ҡарамай, ошо майҙанда көнөҙөнө баҫып тороуы тураһында уйлап та бирмәйәсәк. Ҡымыҙ һата башлап, аҙ генә күтәрелгәйне, эреләнде лә китте, элекке таныштарын да танымай, тип әрләйәсәк әле уны. Милләттәштәргә бер-береһенә ҡарата ошондай мөнәсәбәттә булыу ярамай. Йәһүдтәр кеүек берҙәм булыу - ул әллә ниндәй бөйөк уртаҡ идея өсөн берләшеүҙән башланмай, был үҙеңә бик үк таныш булмаған милләттәшеңә көсөңдән килгәнсе ярҙам итеүҙән башлана. Тағы бер ябай ғына миҫал. Яҙ айҙарында баш ҡалала донъя кимәлендә билдәле боксерҙар Хәбир Сөләймәнов, Венер Ғәлиев ҡатнашлығында турнирҙар уҙғарылды. Әммә был турнирҙарҙы тамашасылар араһында милләттәштәр бармаҡ менән генә һанарлыҡ

ҡа милләттәрҙең дә холоҡ-фиғелен күҙәтә йөрөлдө. Шунда мин, беҙҙең башҡорттар заманға яраҡлашып, үҫешкән булыуға ҡарамаҫтан, миллилеген ныҡ һаҡлап ҡала алған, тигән фекергә килдем. Төрки халыҡтар даирәһендә беҙ кейемебеҙ, этика ҡағиҙәләрен белеүебеҙ менән ҡәрҙәш милләттәрҙән күпкә алға киткәнбеҙ. Кемдер берәү әйтмешләй, беҙҙә Америка индивидуализмы һәм Европа прагматизмы көслө.

Ә бына бер-беребеҙҙе күтәрмәләү сифатының бәсһеҙләнә төшөүенә йәмғиәтебеҙҙең ярлы һәм байҙарға бүленеүенән дә торалыр, тип уйлайым. Хәлле кешеләр ярлыраҡтар менән бергә ҡатышып йәшәргә теләмәй, уның етешһеҙлектә көн күреүенә иғтибар ҙа итмәй. Ярлыларҙың иһә, бер-береһенә бик ярҙам итеһе килгән осраҡта ла, мөмкинлеге юҡ.

**Наилә:** Элекке ваҡыттарҙы, бөтә күрше-күлән үҙ-ара бер туғандар кеүек аралашып йәшәүен һағынып иҫкә алырға ғына ҡала. Хәҙер ҡоймалар шул тиклем бейек, күршеңең хәлен белергә лә ҡыймайһың, ундай теләк тә юҡ. Яңы тормош шарттарына яраҡлашыу, "һәр кем үҙе өсөн" девизын алға һөрөп йәшәргә өйрәнеү барышында килеп тыуған хәл был. Йәштәр араһында ла битарафлыҡ көслө. Күптәргә милләт, рухи байлыҡ, тыуған ер төшөнсәләре бар ни, юҡ ни. Кеше

изге ниәттән ярҙам итеп ебәрә ала.

**▸ Ауыл ерендә йәштәр ҡайтмай, бөгөн бөтәһе лә ҡалала ҡалырға тырыша. Ауылда йәшәү "мода"нан сыҡҡангамы, әллә был хәлде башҡа берәй сәбәп менән аңлатырға мөмкинме?**

**Наилә:** Ижтимағи-сәйәси һәм хоҡуҡи тикшеренеүҙәр институтында миграцион ағымдарҙы тикшерәбеҙ, алынған күрһәткестәргә ярашлы һүҙ йөрөткәндә, ысынлап та, ауыл халҡының һаны йылдан-йыл кәмей. Әгәр ҙә ауыл берәй ҡала эргәһендә урынлашмаған икән, унда йәштәр ҡалмай. Был быуындар араһындағы күсәгилешлекте юғалтыуға килтерә, географик урынлашыу тәртибе боҙола. Икенсе күҙлектән ҡарағанда, прогресс талап иткән ҡорбан булараҡ та ҡабул итергә була быны. Ауыл кешеһенең дә сифатлы медицина ярҙамына, белем алыуға, торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға, эш хаҡы түләнгән урында эшләргә тулы хоҡуғы бар. Ләкин илебеҙҙә әлеге ваҡытта дөйөм ауыл хужалығы көрсөк кисерә, йәштәр ауыл ерендә ҡалғандан ғына ауылдарҙың хәле яҡшырып, яңынан йәнләнеп китер, тип уйлау дөрөҫ түгел. Был дәүләт кимәлендә хәл ителә торған мәсьәлә, ауыл хужалығы хатта иң алдынғы илдәрҙә лә иҡтисадтың дотацион өлкәһе булыуын иҫәпкә алмай булмай.

**Мансур:** Ауыл хужалығының көрсөккә килеп терәлеүе ауыл ерендә йәштәр булмауҙан түгел,

ауыл өйҙәре бик матур күренмәй, әммә Башҡортостандың сиген үтеү менән шундай сынъяһау, төҙөк йорттар, бөхтә ихаталар осрай башлай. Хәҙер ауыл хужалығын үҫтереү, йәштәрҙе йәлеп итеү йәһәтенән дәүләт программалары байтаҡ. Үҙем Бөрйән районынан, беҙҙә, мәҫәлән, ер алырға теләүсе йәштәр сиратта күп тора. Улар районда ер алып, уны һатырға теләп сиратҡа яҙылмаған, үҙҙәре йорт һалып, төпләнеү ниәтен ҡуйған. Тимәк, ауылдарҙа йәштәр ҡалмай, ауылдар бөтәүгә йөҙ тотҡан, тигән фекер бик үк дөрөҫ түгел.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡорт халҡының, бер олоно, бер кесене тыңла, тигән бик фәһемле әйтеме бар. Йәштәр менән әңгәмәбеҙҙең маҡсаты тап ошо хәҡиҡәткә таяныу, милләтебеҙҙең киләсәге, йәштәрҙең рухи тәрбиәһе, йәмғиәтебеҙҙә киҫкен торған борсоулы мәсьәләләргә ҡарата алмашҡа килер быуындың уй-фекерҙәрен белеү ине. Улар ҙа йәштәштәренең рухи тәрбиәһе, башҡорт милләтенең һәм республикабыҙҙың киләсәге өсөн борсола. Быуындар араһындағы рухи бәйләнеш ололар һәм йәштәр бер-береһенең һүҙен бүлмәй тыңларға, ишетергә һәм һанларға өйрәнгәс кенә барлыҡҡа килеүен иҫәпкә алғанда, милләттәштәребеҙҙе борсоған һорауҙарға яуаптар ҙа ошо шарт үтәлгән осраҡта табылыр, моғайын.**

Сәриә ҒАРИПОВА
әңгәмә ҡорҙо.

***✓ Тиҙ генә бер ҙур таш аҫтына боҫтом да быныӊ үтеп киткәнен күҙәтеп ятам. Яҡыная төшкәс, һалдат кейемендәге был кешенеӊ атлауы таныш һымаҡ тойолдо. Ул да булмай, ниҙер һиҙеп, йөрәгем дөп тә дөп килеп тибә башланы.***




## 3. ҠАҪҠАЛАҠ

Ғәффә апайҙың хикәйәтен тыңлап бөтөүгә, Әмир ҡустының мунсаһы ла әҙер ине. Беҙ йыуынып сыҡҡанда ҡараңғы төшмәгәйне әле.

- Шул тиклем ерҙән килгәс, бер ыңғай иптәшенде Нәфисә апайыңдарға алып барып, уның да хәбәрен тыңлатып килмәйһеңме? - тине апаһы Мансурға беҙҙе ҡымыҙ менән һыйлай-һыйлай һәм миңә ҡарап, өҫтәп ҡуйҙы:

- Беҙҙә Нәфисәләр икәү. Береһен "Шаталаҡ", икенсеһен "Ҡаҫҡалаҡ" тип йөрөтәләр. Бына шул ҡушаматы ҡайҙан килеп сыҡҡаны хаҡында һөйләтегеҙ. Һүҙгә әүәҫ ул.

Беҙҙең ыңғайға Әмир ҡусты ла кейенә башланы.

- Түбән оста йәшәй ул. Ат менән генә илтеп ҡуяйым үҙегеҙҙе, - тине.

Санаға ултырышып, ҡапҡанан сығыу менән Мансур:

- Аттарыңды нисә башҡа еткерҙең әле? - тип һорап ҡуйҙы.

- Ун алтыға. Бейәләрем иҫәнһау ҡолонлап бирһә, алдағы йыл егерме биш самаһы булыр тип торам, - тине Әмир атының дилбәгәһен ҡаҡҡылап.

- Был ҡустыма ат ене ҡағылған. Атаһы Стәрлелә фатир хәстәрләһә лә, шунда китмәй, күпләп ат аҫырайым тип, ауылда ҡалды. Аптырағас, Абдраҙаҡ ағай менән еңгә үҙҙәре Стәрлегә күсенде. Ә был лесхоздың ташландыҡ келәтен йүнәтеп, ат һарайы итеп эшләп алды. Бер уйлаһаң, маладисһың инде, ҡустым - тырышып донъя ла көтәһең, өләсәйеңде лә ҡарайһың, - тип, Мансур Әмирҙең арҡаһына ҡағылып алды.

Беҙ бейек кенә ҡойма менән уратылған йорт алдында төшөп ҡалдыҡ. Ихатаға инеү менән келәт эргәһенә өйөлөп ҡуйылған умарталарға иғтибар иттем.

- Зариф ағай ҡорт менән булаша. Солоҡтары ла бар шикелле, - тине Мансур минең һораулы ҡарашымды күреп.

Ишек ҡағып, "Мөмкинме?" тип өндәшеүебеҙгә эстән:

- Әйҙәгеҙ-әйҙә, инегеҙ, - тигән тауыш ишетелде.

Хужалар бәләкәй яҡтағы һикелә киске аш ашап ултыралар ине. Ай-вайыбыҙға ҡарамай, беҙҙе лә табынға ултырттылар. Хәл-әхүәл һорашып, ваҡ-төйәк тураһында һөйләшеп, байтаҡ ҡына һыйланып ултырҙыҡ. Аңлауымса, инде һикһәнен тултырған Нәфисә инәй өлкән улы Зариф һәм килене Хөмәйрә менән йәшәй. Шулай уҡ утыҙға етеп килгән ейәне Шамил да яндарында. Донъялары етеш: мал аҫырап, умарта тотоп, һәүетемсә генә йәшәп яталар икән.

Үҙем ҡортсолоҡ менән шөғөлләнгәс, әңгәмәне шул яҡҡа борорға тырыштым. Зариф умарталарын бөтөнләй онотоп тигәндәй, башлыса солоҡтары хаҡында һүҙ алып барҙы. Ул солоҡсолоҡтоң әкренләп юҡҡа сыға барыуына әсенеп:

- Ҡартайыбыраҡ кителде. Уларҙы ишәйтергә дәрт бар ҙа бит, дарман яғы самалы. Ни малайҙың ҡортҡа әүәҫлеге юҡ. Өлкән ҡыҙым шул яҡҡа йылдам булды. Ҡана, үҙем, тип төтәнләк, күнәк аҫып ағасҡа ла үрмәләй, ҡурҡып-нитеп тормай балын да "һә" тигәнсе ҡырҡып ала торғайны. Биләрит яғына кейәүгә сығып китте шул, - тип ҡуйҙы.

Оло яҡҡа сығып ултырғас, Мансур Нәфисә инәйгә ҡарап:

- Апай, бына иптәшкә үҙеңдең ҡушаматың хаҡында һөйләп ишеттер әле. Матур итеп гәзиткә баҫтырыр үҙенде, - тине.

Инәй фотоға төшөргә әҙерләнгән кеше һымаҡ, өҫ-башын һыпырғылап, яулығын рәтләберәк ҡуйҙы ла:

- Әлләсе, гәзиткә үк баҫтырыу килешерме икән... Әллә нимәһе юҡ, шул беҙҙең тормош инде, - тине һәм тамағын ҡырып алып, һүҙ башланы.

- Һөйләйем, әтеүсә... Беҙ, һуғыш осоро балалары, тиҙ өлгөрҙөк. Ҡулға һәнәк-көрәкте лә, балта-бысҡыһын да бик иртә тоттоҡ. Ғишыҡ тигәне лә иртә килде. Ун дүртем тулыр-тулмаҫ минән өс йәшкә оло Ғәлинур тигән егет артымдан йөрөй башланы. Клубҡа сыҡһаҡ, өйгә тиклем оҙатып ҡуя, сыҡмаһаҡ, ҡапҡа төбөнә килеп саҡырып сығара ла, һөйләшеп торған булабыҙ шунда. Элек беҙҙең йөрөү шулай була торғайны инде. Егетем төҫкә-башҡа бик булмаһа ла күңелемә ныҡ яҡын ине. Әкренләп килерен һағынып көтөп ала башланым. Клубтафәлән башҡа ҡыҙҙарға һүҙ ҡушһа, көнләшеп тә ҡуя инем, хатта. Күрәһең, уға үҙем дә ныҡлап ғашиҡ булғанмындыр инде.

Бер заман Шаталаҡ Нәфисә лә Ғәлинурға ғашиҡ булып, минән уны һалдырып алырға йөрөй икән, тигән хәбәр ишеттерҙеләр. Эй ҡыйын булып китте шунда. Мендәремә ҡапланып иланым да иланым. Үҙем бер туҡтауһыҙ: "Ғәлинурымды Шаталаҡҡа барыбер бирмәйем", - тип шыбырҙайым. Нисек уны үҙемә бәйләп тоторға уйлағанмындыр инде, кем беләләр.

Мин шулай янып-көйөп йөрөгәндә Ғәлинурҙың йәше тулып, һуғышҡа алып киттеләр. Оҙатҡанда "Көт" тигәс, һүҙһеҙ генә күкрәгенә башымды һалып илаған булдым. Шаталаҡтың да янıбыҙҙа уралғанын күреп, асыуым килгәйне. Хатта барып йәбешеп, сәстәрен йолҡоп ташларҙай булғайным.

Ғәлинур китеп бер йыл үтеүгә, һуғыш баҫылды. Инде ҡайтып та килер тип осоп-ҡанатланып йөрөгәнемдә "Беҙҙе японлар менән һуғышҡа алып киттеләр", тигән хәбәре килде. Уныһы тамамланғас та ҡайтарманылар әле үҙен. Корея тигән илдә хеҙмәт иттерергә ҡалдырғандар. Ана ҡайта, бына ҡайта, тип көткәс, был хәбәрҙе ишетеүе ҡыйын булды, үҙемде ҡайҙа ҡуйырға белмәй, байтаҡ йөрөнөм.

Ир-ат һуғыштан ҡайтҡас, тормош көтөүе еңеләйеп ҡалыр, тип көтһәк тә, тәүге йылдарҙа нужа ҡаласын күп ашарға тура килде әле беҙҙең кеүек йәш ҡыҙҙарға. Һорап та тормай ФЗО-ға уҡырға, йә булмаһа Биләрит яҡтарына урман ҡырҡырға ебәрә торғайнылар ул заман йәш-елкенсәкте. Бына шуларға бармаҫ өсөн күптәр ун алты-ун ете йәштән кейәүгә сыға һалды, кәләш алды.

Беҙ, буйҙаҡ ҡалған биш ҡыҙ, урман ҡырҡырға китеүселәр исемлегенә инеп, Биләрит яҡтарына ебәрелдек. Ғәрәфи бабай аты менән алып китте беҙҙе. Тау-урман эсенән, һарҡыу ерҙәрендә арбаға ултырып, үргә менгәндә йәйәү атлап, биш көн тигәндә Әүжәнгә барып еттек.

Ғәрәфи бабай беҙҙе Иван Митрофанович тигән кешенең ҡулына тапшырып ҡайтып китте. Айыуҙай таҙа кәүҙәле был мастерға эйәреп, шул көндө үк ҡара урман эсенә инеп киттек. Урман ҡырҡыусылар йәшәгән ер башлыса ҡыуыштарҙан ғына торған үҙе бер ауыл ине. Шундағы үҫмер малай-шалай ярҙамында беҙ ҙә иркен генә ҡыуыш ҡороп индек.

Урман ҡырҡыу эшенең нисек ауыр икәнен уны татып ҡараусылар ғына беләләр. Иҫкә төшһә, һаман сәс төптәре сымырҙап китә. Ир-ат бик сыҙап бармағанды беҙ, йәш ҡыҙҙар, нисек сыҙағанбыҙҙыр инде. Көн оҙоно эшләп, арманһыҙ булып, кисен саҡ-саҡ ҡыуышҡа ҡайтып йығыла торғайныҡ.

Бер ай самаһы шулай эшләгәс, Ғәрәфи бабай тағы ике ҡыҙыбыҙҙы, Әклимә менән Миңлеямалды, килтереп китте. Ҡыҙҙар килеп төшкәс тә: "Ғәлинурың ҡайтып төштө бит", - тип, минән һөйөнсө ала һалды. Быны ишеткәс тә йөрәгем урынынан ҡупты. Шунда уҡ осоп ҡайтып, егетемдең муйынына һырылаһым килде. Һағыныуым да баштан ашҡан булған, күрәһең, сыҙар әмәлем юҡ хатта. Бер аҙҙан былай ҙа ашҡынып типкән йөрәкте ярһытып, көнләшеү хисе күңелде биләп алды. Әсәһе үлем өҫтөндә ятҡас, Шаталаҡ Нәфисәне беҙҙең менән ебәрмәгәйнеләр. Ул минең юҡлыҡтан файҙаланып, Ғәлинурҙы тиҙ генә ҡулына төшөрөп алыр, тигән уй мейемде быраулар ға тотонмаһынмы!

Шулай бер-ике көн шаңҡыған балыҡтай йөрөнөм дә, ҡыҙҙарға: "Мин ҡасып ҡайтып китәм", - тип хәбәр һалдым. Улары: "Ҡуй, үҙеңде төрмәгә илтеп ябасаҡтар бит", - тигән булып, мине ниәтемдән кире ҡайтарырға тырыша. "Япһалар ябырҙар инде, башҡаса сыҙар әмәлем ҡалманы", - тип, ныҡлы ҡарарға килеүемде әйттем. Ҡыҙҙар быға әйттең ни ҙә, әйтмәнең ни типтер инде, шым ғына мине юлға әҙерләй башланы. Үҙ ауыҙҙарынан өҙөп, йәшереп кенә сөхәри киптерҙеләр, шырпы-фәләнен йүнәттеләр. Зарифа Иван Митрофановичтың бәләкәй балтаһын сәлдереп килтереп, артмағыма тығып ҡуйҙы. Һәр береһе үҙенең кәңәшен дә бирергә тырышты.

Ауылдаш ҡыҙҙарым менән ҡосаҡлашып хушлашып, таң атыр-атмаҫ элек юлға сыҡтым. Әүжәнде урап уҙып, үҙебеҙҙең яҡҡа илтеүсе ат юлына төшөп алғас, эскә йылы инеп китте. Әхирәттәремдең: "Кейекфәләндән түгел, кешенән ҡурҡ", - тип әйткәндәрен иҫтә тотоп, инеп боҫорға әҙер генә булып юл ситенән атлайым. Атлы ла, йәйәүле лә бәндәләр осраштырғыланы. Уларҙы күреп ҡалыу менән ағас араһына инеп йәшеренә һалам да үтеп киткәс кенә сығам. Был яҡтарҙа ҡасҡындар күп икән тигәндәрен ишеткеләгәйнем, шуларға ғына тап булмаһам ярар ине, тип, юл буйы Хоҙайҙан ҡурсалауын һорап киләм. Йәш саҡ - йүләр саҡ булғандыр инде, иҫемә төшһә, әле лә йөрәгем өшөп китә. Ул ваҡытта аңымды хистәр биләп, ҡурҡыу-фәләнгә урын ҡалдырмағандыр, күрәһең.

Юлымда шишмәләр осраштырғылап торҙо. Шулар янында туҡтап, сөхәри кимерәм дә, һыуһынымды ҡандырып, ары атлайым. Ағас ҡырҡып ятҡанда мәрйә ҡыҙҙарынан усаҡта бәшмәк ҡыҙҙырырға өйрәнеп алғайныҡ. Кисен инде юлдан алыҫҡараҡ китәм дә сыбыҡҡа теҙеп утта бәшмәк көйҙөрөп ашайым. Емеш-еләге лә осраштырғылап торҙо. Ҡыҫҡаһы, бик туҡ булмаһам да, аслыҡтан этләнмәнем.

Ҡараңғыла ҡурҡып, шөбһәләнеп ятмаҫ өсөн яҡтыла уҡ "әүен баҙарына" китергә тырыштым. Ҡояш байыр-байымаҫтан берәй киң ботаҡлы ғына ағас төбөнә бишмәтемде йәйеп, балтамды ҡул осонараҡ һалам да, күҙҙәремде йомоп, белгән доғаларымды уҡый башлайым. Көнө буйы юлда арып килгән кеше ни - шунда уҡ йоҡлап та китәм. Уянып, күҙҙәремде асҡанда тағы яҡтырған була.

Шулай, сама менән ярты юлды уҙғас, ҡаршыма килгән бер бәндәне шәйләп ҡалдым. Тиҙ генә бер ҙур таш аҫтына боҫтом да быныӊ үтеп киткәнен күҙәтеп ятам. Яҡыная төшкәс, һалдат кейемендәге был кешенең атлауы, нисектер, таныш һымаҡ тойолдо. Ул да булмай, ниҙер һиҙеп, йөрәгем дөп тә дөп килеп тибә башланы. Танып ҡалып, янıма етер-етмәҫ ҡаршыһына йүгереп сыҡтым да ҡосағына ташландым. "Ғәлинур... Ғәлинур..." тип шыбырҙап, туҡтауһыҙ илайым да илайым. Ә ул йыуатып арҡамдан һыйпай.

- Ҡайҙан килеп сыҡтың былай, һинең ҡиәфәтеңә ингән ен ҡыҙы икән, тип башта ҡотом осто, - ти ул ҡосағына ҡыҫып, яратып.

- Һине һағыныуыма түҙә алмай, күрәйем, тип ҡасып ҡайтып барам, - тим.

- Мин дә һине күрергә тип китеп барам, - ти Ғәлинур.

Бына шулай уйламаған ерҙә осраштыҡ Ғәлинурым менән. Ул көндө беҙҙән дә бәхетле кеше булмағандыр донъяла. Яҡындағы шишмә буйында ултырып, егетемдең күстәнәстәре менән һыйлана-һыйлана, туҡтауһыҙ серләштек тә серләштек ул көндө.

Аҙыраҡ анды-тунды йыйғас, Ғәлинурға:

- Былай ҡайтып инһәм, баштан һыйпамаҫтар. Берәй нимә уйларға кәрәк, - тинем.

- Уйланылған инде. Бынан йыраҡ булмаған ауылда еҙнәм силсәүит булып эшләй. Шунда барабыҙ ҙа яҙылышабыҙ, - тип яуапланы ул.

Шул ауылға барып яҙылыштыҡ. Бер бабайҙан никах уҡытып, ҡауышып та ҡуйҙыҡ. Ғәлинурҙың еҙнәһенә бесән эшләшеп ятып, ике аҙна тирәһе үткәс кенә ауылға ҡайтып индек. Башта килеп, мине һорашып, эҙләп йөрөгән булһалар ҙа, аҙаҡ ни, ир ҡатыны булғас, өндәшмәнеләр. Әммә шунан һуң "Ҡаҫҡалаҡ Нәфисә" тигән ҡушамат йәбешеп ҡалды.

Инәй һуңғы һүҙҙәрен әйткәндә, йылмая биреп ҡуйҙы. Уның хикәйәте тамамланғас, беҙҙе ҡайтанан табынға ултыртып, сәй менән һыйланылар.

Ҡунаҡсыл хужалар менән хушлашып, урамға сыҡҡанда, күктә йондоҙҙар емелдәшә ине. Бер аҙ һүҙһеҙ атлағас, Мансур:

- Дә-ә, һәр кеше яҙмышы үҙе бер роман яҙырлыҡ тип дөрөҫ әйтәләр ул. Уйлап ҡараһаң, ошо ҙур булмаған ауылда ғына тиҫтәләгән китап яҙырҙай мауыҡтырғыс яҙмышлы әллә күпме кеше йәшәйҙер әле, - тине тәҙрәләренән ут балҡытып ултырған өйҙәрҙе күрһәтеп.

- Шулай, - тип ризалашып, мин дә башымды ҡаҡтым...

**(Аҙағы. Башы 26-27-се һандарҙа).**

ЗАУЫҠ

# ТЫУМАҒАН КӨНӨМ,

## йәки тыумаған баланың әйткәне

**Поэма**

Зөһрә ҠОТЛОГИЛДИНА



Бөгөн минең үлгән көнөм,
Минең тыумаған көнөм.
Ҡарында уҡ юҡ иттеләр,
Сыҡманы хатта өнөм.

Әсәй, тиеп әйтә алманым,
Ҡабул итмәне йәнең.
Мин тыумаған көн - һинең дә
Әсәй булмаған көнөң.

Атай, тиеп әйтә алманым,
Баш тартты минән йәнең.
Мин тыумаған көн - һинең дә
Атай булмаған көнөң.

Минең йөрәк тибешемде
Туҡтатты һуң кемегеҙ?
Мин булмаған донъяғыҙҙа
Нисек үтә көнөгөҙ?

Минең тыумаған көнөмдә
Тынып ҡалды өйөгөҙ.
Һеҙ иҫләйһегеҙме, ә мин
Һеҙҙе һағынам, белегеҙ.

Был минең тыумаған көнөм,
Йәнем осто күктәргә.
Ата-әсәле булыуы
Тәтемәй шул күптәргә.

Минең тыумаған көнөмдө
Иҫләр микән берегеҙ?
Тыумаһам да, мөхәббәттән
Яралғанды белегеҙ.

Мин үткәндә инде хәҙер,
Һеҙ йәшәйһегеҙ бөгөн.
Тыумаған йәнем ҡалдыра
Һеҙгә ғүмерлек йөгөн.

* * *

Бишектә ятҡан сабыйҙы
Күреп әрнемәнеңме?
Үҙеңде һәм һөйгәнеңде
Аҙаҡ әрләмәнеңме?

Яңы тәпәй баҫҡан бала
Ҡыуанысын күргәндә,
Ата-әсә менән сабый
Етәкләшеп килгәндә,

Һөйөләүҙән, бәхетенән
Рәхәтләнеп көлгәндә,
Үҙе йәшәгән донъяны
Өйрәнгәндә, белгәндә,

Иҫкә алманыңмы мине,
Тыумаған сабыйыңды?
Мин йәмләр инем бит һеҙҙең
Болоҡһоу сағығыҙҙы.

Гөлләмә тотоп, балалар
Мәктәпкә барғанында,
Моңһоуланып һин уларҙы
Оҙатып ҡалғаныңды.

Сәхнәләрҙә йырлап-бейеп
Йөрөгәнен күргәндә,
Башҡа әсәйҙәр ҡыҙының
Сәсен тарап үргәндә,

Иҫкә алманыңмы мине,
Тыумаған ҡыҙ балаңды?
...Яндарыңда юҡмын хәҙер
Дауаларға яраңды.

Һөйөү утында янған ҡыҙ
Әсәһенә сер һүтһә,
Атай фатихаһын алып,
Никах түйҙары үтһә,

Өләсәй булған ҡатыңдан
Көнләштеңме әҙерәк?
Балаң балаһын күреүҙән
Ни бар һуң ҡәҙерлерәк?

* * *

Мин бит беләм: төндәр буйы
Һинең илағаныңды.
Сабый күтәргән әсәнән
Күҙеңде алмағаңды.

Туйҙар үткәндә кәләшкә
Моңһоу ҡарағаныңды.
Ауырлы ҡатын осраһа,
Бәхет юрағаныңды.

Ейәнсәрен етәкләгән
Өләсәй күргәнеңдә,
Йылдар аша күктән күрәм:
Әсе йәш күҙҙәреңдә.

Ҡолағыңда гел яңғырай
Сыр-сыу бала тауышы.
Ә йәнеңдә - гүр тынлығы,
Яңғыҙлығың һағышы.

Һинең шундай мәлдәреңдә
Нисек ярҙам итәйем?
Елдәр булып, сәстәреңдән
Тик бер һыйпап үтәйем.

Ҡояш булып, күҙ йәшеңде
Һөртәйем, киптерәйем.
Хыялыңдағы ҡыҙ булып,
Төштәреңә керәйем.

* * *

Йәнем һаман тынғы тапмай,
Йөрөй ҙә йөрөй күктә.
Һинең менән осрашырға
Ҡалмаған инде күп тә.

Мин һине әллә ҡасандан
Кисерҙем инде, әсәй.
Һин үҙеңде ғазаплайһың
Ҡылған хатаңдан йәшләй.

Мин барыбер берәй ваҡыт
Төшәрмөндәр ул ергә.
Һыйынырмын мине көткән
Мөхәббәтле йәрҙәргә.

Һөйөп, һөйөләп тыуырмын
Һин йәшәгән ерҙәргә.
Бишектә көлөп ятырмын,
Тик инде ... бүтәндәргә.

Кескәй ҡулдарымдан тотоп,
Улар баҫтырыр ергә.
Атай-әсәйгә тотоноп,
Атлап китермен бергә.

Тыумай ҡалған йәнем ҡай саҡ
Төштәргә килеп инер.
Ҡурҡып, илап уянғаныңдың
Сәбәбен һуң кем белер?

* * *

Сабый аңламай, тимәгеҙ,
Сабый хәтере төпһөҙ.
Ололарға ҡарағандай
Беҙгә ҡарағыҙ тик һеҙ.

Тоя белгән һиҙер унда
Йыһандарҙың аҡылын.
Балаһында күрә әсә
Йәшәүенең асылын.

Беҙ - һеҙҙең ғүмерегеҙҙең
Мәғәнәһе, дауамы.
Һынауҙарҙан һығылғанда
Һыҙланыуҙан дауаһы.

Беҙ тыуабыҙ был донъяға
Һөйөү йәндәре менән.
Йәшәй-йәшәй күңел тула
Ерҙең ғәмдәре менән.

Бала ғына тип әйтмәгеҙ,
Барыһын да аңлайбыҙ.
Әсә ҡарынында уҡ беҙ
Ишетәбеҙ, тыңлайбыҙ.

Һөйләшегеҙ беҙҙең менән
Әле тыумаған саҡта.
Көйләгеҙ беҙгә моңло йыр
Шау-шыуҙар тынған саҡта.

Юрағыҙ бәхетле ғүмер,
Имен-аман киләсәк.
Ата-әсәнең теләге
Ысынға тап киләсәк.

* * *

Мин дә бер саҡ, ерҙә тыуып,
Үҙем әсәй булырмын.
Балам - минән,
Мин - баламдан
Ғүмерлеккә уңырмын.

Мине тапмаған әсәйҙе
Хәтерем оноттормаҫ.
Ул да йәшәр, исемдәрен
Ҡыҙ балама ҡуштырғас.

Изге сылбыр өҙөлмәһен -
Бала, Әсәй, Өләсәй.
Тыумаған сабый ҡалмаһын,
Әйтһен һәр бала: "Әсәй!"

Тыуған көндәр гөрләп үтһен,
Тыумаған көн булмаһын.
Һәр сабыйға ер ҙә, күк тә
Тик бәхеттәр юллаһын.

Ерҙә кешенең бурысы -
Үҙ нәҫелен ҡалдырыу.
Ырыу ағасын ҡоротоу -
Ғүмереңде яндырыу.

...Күк ҡабағы асылдымы -
Яҡтырып китте донъя.
Яр һалып килдем был ергә,
Тирә-яҡ тулды моңға.

...Тик белдем мин шул минутта
Бер ғүмер күккә ашты.
Мине тапмаған әсәйҙең
Йәне миңә тоташты.

Ерҙән һуңғы һулышында
Ул әсә булып үтте.
Тапмаған ҡыҙ балаһына
Үҙ йәнен биреп китте...

Рәхмәт, йән биреүсе Әсәй!
Рәхмәт, тыуҙырған Әсәй!
Ғүмер сылбыры ялғанды:
Бала, Әсәй, Өләсәй!

ЭТИКЕТ

# ҠЫЛЫҠТАРЫҢА - ТӨҘӘТМӘ,

## йәғни күршеләр менән нисек аралашырға?

**Ауылда йәшәүселәр бер-береһен яҡшы белә һәм ундағы күршеләр үҙ-ара мөнәсәбәттәрен бер яйға һалып, йылдар дауамында шул ҡағиҙәләрҙе үҙгәртмәйенсә көн итә. Шәхси йорттарҙа барған хәл-ваҡиғалар күршеләргә ҡамасау тыуҙырмай һәм уларҙы бимазаламай. Ә ҡаланың күп фатирлы йорттарында күрше йәшәүселәргә иһә был йәһәттән һаҡлыҡ менән эш итергә тура килә, сөнки йоҡа ғына стена күршеләр тыныслығын боҙорға мөмкин. Шуға күрә ҡайһы бер этикет нормалары тураһында онотмау бер йортта һәм подъезда йәшәүселәр менән матур мөнәсәбәт һаҡларға ярҙам итәсәк.**

Күршеләр этикеты бер маҡсатты күҙ уңында тота - тирә-яҡтағыларға ҡамасауламаҫҡа. Был шуны аңлата: балалар күршеләрҙең тәҙрәһе алдында шауламаҫҡа, үҙегеҙ булмағанда фатир эсендәге этегеҙ бер туҡтауһыҙ оломаҫҡа, радио, телевизор йәки башҡа музыка ҡоралы артыҡ яңғырамаҫҡа тейеш. Ошо һәм башҡа ошондай тәү ҡарашҡа ваҡ, әммә мөһим аспекттарҙы күҙ уңында тотоп йәшәгәндә, күршеләр менән бер ҡасан да низағ булмаясаҡ.

Әгәр ҙә балағыҙ музыка ҡоралында уйнарға өйрәнә икән, стенағыҙға келәм элеп ҡуйыу тауышты күпкә кәметәсәк. Закон буйынса 23.00 сәғәткә тиклем фатирҙарҙа ремонт эштәре, музыка уйнатыу һәм башҡа төрлө тауыш сығанаҡтары барлыҡҡа килтергән эштәр һәм шөғөлдәр менән булырға рөхсәт ителә. Ләкин шулай булыуға ҡарамаҫтан, күршеләрегеҙҙе буласаҡ ремонт һәм байрам тантанаһы тураһында алдан иҫкәртеүегеҙ үҙ-ара татыулыҡты һаҡлап ҡалырға ярҙам итәсәк.

Ҡайһы бер күршеләр бигерәк әрһеҙ булыусан. Улар ураған һайын нимәлер һорап килә, төрлө үтенес менән мөрәжәғәт итә. Әлбиттә, ҡайһы бер осраҡта күршенең хәленә инеп, уның ниндәйҙер мөһим үтенесен кире ҡағыу дөрөҫ булмаҫ. Ләкин бындай һорауүтенестәр көн һайын тиерлек ҡабатлана башлаһа, мөмкин булған сикте үтһә, күрше менән дуҫлыҡты бер аҙ һыуытырға ла була. Бөтә нәмәлә лә, шулай уҡ күршеләрсә мөнәсәбәттә лә, саманы белеү мотлаҡ.

Күршегеҙгә ниндәйҙер йомош менән инергә тура килһә, түргә саҡырмаһалар, иң яҡшыһы - ишек төбөнән ары үтмәҫкә. Әгәр ҙә күршегеҙ менән урамда осраҡлы рәүештә осрашһағыҙ, уның сумкаһында нимә ятыуын ҡарарға ынтылырға, ниндәй әйберҙе күпмегә һатып алыуы тураһындағы мәғлүмәтте һорарға тырышмағыҙ - был әҙәпһеҙлек. Әгәр ҙә кәрәк һаһаһа, ул барыһын да үҙе һөйләп бирер. Шулай уҡ теге йәки был күршегеҙҙең күпме эш хаҡы алыуы, балаларының мәктәптәге хәлдәре, уларҙың өйөндәге хәл-ваҡиғаларҙы башҡа күршеләр менән тикшермәгеҙ, ғәйбәт һөйләп йөрөү бер кемгә лә биҙәмәй.

Күршеләргә килеүселәрҙе ишеккә ҡыҫып ҡарап тороу бөтөнләй мәҙәниәтһеҙлек.

Әгәр ҙә беренсе ҡаттан өҫтә йәшәйһегеҙ икән, иҙәнгә нығ итеп баҫып йөрөү, балаларға иҙәнгә (йәки күршеләр яғындағы стенаға) туп һуғырға рөхсәт итеү, диван йәки башҡа мебелде дөбөр-шатыр шылдырыу һәм башҡалар аҫтағы күршеләрегеҙҙең тормошон "тамуҡ" итәсәк. Ошо хаҡта һәр саҡ иҫегеҙҙә тотоуығыҙ үҙ-ара яҡшы мөнәсәбәттәр һаҡларға булышлыҡ итер.

Фатирығыҙҙағы бер бүлмәне ҡуртымға алып йәшәүселәр ҙә тыныс тормошҡа хоҡуҡлы. Бүлмә өсөн түләгән осорҙа, бүлмә - уның биләмәһе, шуға күрә уға ишек шаҡымайынса инергә, уның шәхси тормошо менән артыҡ ҡыҙыҡһынырға ярамай.

Шул уҡ ваҡытта фатирҙа тороусының да бурыстары бар. Мәҫәлән, уның будильнигының тауышы бөтәһен дә уятырлыҡ булмаҫҡа, өй хужалары алдында ярымялаңғас йөрөмәҫкә, әйберҙәрен фатир буйлап ташламаҫҡа тейеш. Һорауһыҙ фатир хужаларының әйберенә тейеү, уларҙың аҙыҡ-түлеген ашау, ванналағы әйберҙәр менән ҡулланыу бөтөнләй ярамаған ҡылыҡ. Был ҡағиҙәләр тураһында барыһы ла белгән кеүек, ләкин йәшәү барышында төрлө ҡытыршылыҡтар тыуырға мөмкин. Шуға күрә фатирға индергәндә бөтә нескәлектәрҙе лә һөйләшеп-аңлашып эш итеү фарыҙ.

ИНТЕРНЕТТАН



# СОЦИАЛЬ СЕЛТӘРҘӘР...

## модаламы?

■ Йәшәү рәүеше сәләмәтлеккә туранан-тура йоғонто яһай. Шуға ла яҡшы ғәҙәттәрҙе юлдаш итеп алһағыҙ, оҙаҡ йәшәйәсәкһегеҙ, тип ышандыра табиптар. Иң тәүҙә физик әүҙемлек кимәлен баһалағыҙ. Спорт тәндең матурлығы, сыҙамлыҡты арттырыуы өсөн генә яуап бирмәй, күнегеүҙәр бәхет гормоны - эндорфиндар синтезена булышлыҡ итә, һөҙөмтәлә кәйеф күтәрелә һәм психик көсөргәнеш юҡҡа сыға. Әүҙем йәшәү тормошо тигәндә спортзалды ғына күҙ уңында тотмағыҙ, бында бейеү менән шөғөлләнеү, сәйәхәттәр, йәйәү, велосипедта йөрөү ҙа инә. Дөрөҫ туҡланыу ҙа мөһим. Сама менән көн дауамында күпме калория ҡулланыуығыҙҙы асыҡлағыҙ һәм артығын ашамағыҙ. Диеталар, ярлы меню эске ағзаларҙың етерлек кимәлдә витаминдар алмауына килтерә. Йәш булып ҡалыу өсөн яҡшы кәйеф һәм ыңғай тойғолар кәрәк. Тормошҡа зарланыусан кешеләр менән аралашмағыҙ, һәр көн йөклар алдынан көндөң матур мәлдәрен хәтергә төшөрөп алығыҙ. Психологтар билдәләүенсә, ниндәйҙер ғәҙәтте формалаштырыу өсөн 21 көн етә.

■ Спорт менән шөғөлләнгәндә күп итеп һыу эсергә кәрәк тигән фекер хата, ти белгестәр. Әгәр ҙә организмдан тир менән сыҡҡан шыйыҡлыҡ эскән һыуға ҡарағанда күберәк икән, ҡанда натрий кимәле түбәнәйә башлай, был тәндәге электролиттарҙың балансын боҙа. Хәлһеҙлек, баш ауыртыуы, йөрәк болғаныуы, иҫте юйыу, тән тартышыуы - былар барыһы ла ошо сирҙең симптомдары. Шул уҡ ваҡытта, артыҡ һыу эсеү ҙә организм өсөн зыянлы. Күнегеүҙәр алдынан һәм аҙағынан һыу эсеү ҙә етә, ти табиптар.

■ Һуңғы осорҙа Америка сауҙа селтәрҙәрендә тәбиғи һөт, сыр, ҡатыҡ күберәк һатыла. Майһыҙландырылған һөт, маргарин, туңдырылған йогуртҡа һорау бөтөнләй юҡ тиерлек, сөнки был һөт продукттарында шәкәр ҙә күп. FoodNavigator-USA тарафынан йыйылған мәғлүмәттәр күрһәтеүенсә, аҙаҡҡы 52 аҙна эсендә май һатыу - 18, майлы һөт - 9, ҡатыҡ - 7, сыр 8 процентҡа күтәрелгән. Һуңғы өс йыл эсендә аҡһым, кальций, лактозаһыҙ һөт менән байыҡтырылған һөт тә күберәк ҡулланыла. 1970 йыл менән сағыштырғанда, АҠШ-та сыр ҡулланыу ҙа өс тапҡырға артҡан.

■ Ғалимдар фекеренсә, анар емеше йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен булдырмай. Йыраҡ ғалимдар уның тағы бер ыңғай яғын асыҡлаған: ул ДНК-ның ҡартайыу процесын яйлата. Тикшеренеүҙәр 60 кешенән торған төркөмдә үтә. Улар ай дауамында анар экстракты капсулаларын ҡабул итә. Һөҙөмтәлә, баш мейеһе, мускулдар, бауыр, бөйөр эшмәкәрлеге, тире ҡартайыуы менән маркерҙың яраһы уҡ түбәнәйеүе асыҡланған. Белгестәр был күҙәнәктәрҙә ДНК-ның әселәнеүе кәмеүе менән аңлата. Бынан тыш, А, С, Е, витаминдары, тимер һәм ирекле радикалдар эшен нейтраллештереүсе антиоксиданттарға бай.

■ Американың Йәмәғәт сәләмәтлеге ассоциацияһы мәғлүмәттәренә ярашлы, мәктәп йәшендәге балаларҙың яҡынса 11,5 проценты көнөнә өс сәғәт тирәһе ваҡытын социаль селтәрҙә аралашып үткәрә. Ғалимдар туплаған статистик мәғлүмәттәр күрһәтеүенсә, был үҫмерҙәр насар ғәҙәттәргә тиҙерәк бирелә. Улар араһында стресс, депрессия, йоҡоһоҙлоҡ менән яфаланыусылар, суицид осраҡтары күберәк осрай. Ғәҙәттә, улар насарыраҡ өлгәшә, ата-әсәләре менән йыш конфликтҡа инә.

ТӘБИҒӘТ МӨҒЖИЗӘЛӘРЕ

# ҠАТЫ ИКӘН ЙЫЛАН ҠАРҒЫШТАРЫ



Беҙҙең ауылда йәшәгән Зөһрә еңгәй йылан арбай торғайны. Минә биш йәштәр булғандыр ул саҡта. Ауылдан алыҫ түгел Ҡыҙылһыйыр тигән ерҙә атайҙар бесән эшләй. Мин уларға эйәреп йөрөйөм инде. Бер мәлдә егеп барған атыбыҙҙың мороно шешеп сыҡты. Бесән ҡайғыһы бөттө, йәһәтләп ауылға ҡайтып киттек. Ул ваҡытта ауылда боронғоно белгән уҡымышлы бабайҙар күп була торғайны. Шуларға күрһәттек. Атыбыҙ көскә тын алып, саҡ ҡайтып етте ауылға. Хәле бөтөнләй мөшкөлләнеп бара. Садиҡ тигән бабай, бының имен, һүҙегеҙ үтһә, белһә, Зөһрә килен генә белер, тине. Зөһрә еңгәйҙең әле йәп-йәш мәле. Тимәк, шул саҡта уҡ ул-былды белгән, көсө булған инде. Барҙыҡ еңгәгә. Ул бәләкәс кенә бер китабын алып уҡып, аттың моронона өф итеп кенә өрҙе. Атыбыҙ ҡаты итеп тын алып ебәрҙе. Баҡтиһән, урмандағы йыланды арбаған икән ул. Ә атыбыҙҙың моронон йылан саҡҡан булған. Өс-дүрт рәт өшкөргәйне, атыбыҙ ҡәҙимге тын ала башланы, шеше лә һимде. "Бесәнлеккә кире киткәндә ҡарап барығыҙ, юлығыҙҙа атығыҙҙы саҡҡан ҙур ҡара йылан эсе ярылып үлеп ятыр", тине был. Беҙ ул көндө барманыҡ бесәнлеккә, аттың яраһын эсе ҡатыҡ менән йыуып, ул-был итеп, иртәгәһен иртәнсәк ҡуҙғалдыҡ. Бесәнлеккә етеп барһаҡ, оло юлда ҙур бер ҡара йылан эсе ярылып үлеп ята. Оҙонлоғо бер метрҙай бар тегенең. Зөһрә еңгәй арбай башлағас, түҙмәй, шулай юлға сыҡҡан инде. Бына шундай көскә эйә ине ул еңгәй.

Зөһрә еңгәйҙең улы Азатты ла йылан арбау серен белә, тиҙәр. Бер мәлде минең ҡустым Хәҙис менән балыҡҡа барғанында йыланды арбап ҡына үлтергән. Ошоларҙы һөйләне Салауат ағай.

Арбау, тигәндән, ололар һөйләүенсә, һәр йыландың үҙ арбауы бар, имеш. Бер төрөнөкө икенсеһенә бармай, ти. Был турала Килдеғол ауылында йәшәүсе Хәшиә инәй Вәлиева бәйәнләгәйне.

- Бер кешене йылан саҡҡан, ти. Тик ниндәй йылан саҡҡанын күрмәй ҡалған. Арбап ҡарайҙар, тик арбау үтмәй икән быға. Теге кешенең хәле мөшкөлләнеп, эсе күбә бара, күбә бара, ти. Арбап ултырған кеше бына күреп, төймәндә ыҫҡындыр, тигән. Шунан ҡапыл ҡорһаҡ күҙгә күренеп шиңә башлаған. Баҡтиһән, ғиләһе "төймә" тигән һүҙҙә булған. Саҡҡан йылан төймәбаш йылан булған, - тип һүҙен йомғаҡланы инәй.

Оло инәйҙәрҙән йылан аяғы хаҡында ла һораштым.

- Аҡ төҫтәге аяғын күрһәтһә, кеше ныҡ байып китә, әгәр төҫтәгеһе - ауырыуға, ҡазаға, ҡыҙылы - үлемгә, һарыһы - һары һағышҡа, ҡайғыға, тип аңлатты улар. Хатта йәшеле, күге лә була, имеш. Йылан аяғын күрһәтһә, тиҙ генә аяҡ кейемеңде сисеп, үҙеңдең дә яланғас тәпәйеңде күрһәтергә кәрәк икән.

Районыбыҙҙың Яңы Мөсәт ауылында йәшәгән Гүзәл апай Ҡырлыбаеваның һөйләгәндәре лә үрҙәгеләргә дәлил:

- Ишек алдыбыҙҙа ҙур йылан күреп ҡалдыҡ. Оләсәй теймәскә ҡушһа ла, атай мылтыҡ алды ла атты тегене. Йылан әлләнисәгә сарсылып китте. Шул йылды малдарыбыҙ вис кенә ҡырылып бөттө, - ти ул.

Йәнә йыландың кешене арбап, эсенә инеүе хаҡында ла имеш-мимештәр бихисап халыҡ араһында. Имеш, йәш килен аласығында гел тертләгән дә йөрөгән, ти. Уға гел генә кемдер бар һәм үҙен күҙәтеп йөрөй һымаҡ тойолған. Бер ваҡыт ныҡ итеп йоҡо баҫып, аласығында йоҡлап китә был. Төштә күрә. Һыуыҡ ҡына һыу эсәм икән, тип күрә төшөндә. Баҡһаң, йылан быны арбап, йоҡлаған сағында эсенә ингән икән. Мулла саҡыртып, арбатып сығарғандар, имеш. Йылан йотҡан кешегә эсе ҡатыҡ, ҡорот һыуы эсерәләр, тип тә бәйән итте инәйҙәр.

Был хәл өс йыл элек була. Лилиә апай ҡапыл аяҡтан яҙа. Дауахаларға ла мөрәжәғәт итеп ҡарай, ләкин аяҡҡа баҫа алмай. Ахыры, бер күрәҙәсегә бара. Ул, нигеҙегеҙҙәге йыланды үлтергәнһегеҙ бит, ти. Ысынлап та, ире ишек алдында йөрөгән йыланды үлтергән була. Күрәҙәсе хатта йыландың һыу ашаһындағы тауҙан килеп, уларҙың ихатаһына ҡабын һалыуын да әйтеп бирә. Ул ҡапты Лилиә апай күргән булған. Күрәҙәсе ҡаптағы мөгөҙҙәрҙе алып ташларға кәңәш биргән. Шунан һуң ғына Лилиә апай терелеп, аяҡҡа баҫа.

Ир енесле йыландарҙың ҡатын-ҡыҙға эйәләшеүе хаҡында ла хикәйәттәр йөрөй халыҡ араһында. Беҙҙең көндәрҙә лә шуға оҡшаш хәлдәр булғылай икән. Бер инәйҙең бабайы үлеп киткәс, бының өйөнә йылан эйәләшеп ала. Йоҡларға булһа, ҡаралтыһы араһынан килеп сыҡһынмы, итеген кейәйем тиһә, шуның эсендә ятышынмы... Инәйҙең тамам тәкәте ҡорой. Аптырағас, муллаға бара. Мулла инәйгә ҡом өшкөрөп бирә лә шуны өй тирәләй һибеп сығырға кәңәш итә. Шунан һуң ғына теге йылан эҙен һыуыта.

Иҫләй, һораша китһәң, йыландар тураһында әллә күпме яҙырға булыр ине. Әлегә ошо урында нөктә ҡуям.

...Ә йылан ҡарғыштары ҡаты икән шулай ҙа. Тәбиғәттең әле беҙ аңлап та, асып та етмәгән серҙәре бихисап шул.

**Таңһылыу БАҺАУЕТДИНОВА.**
**Бөрйән районы.**
**(Аҙағы. Башы 26-27-се һандарҙа).**

КИТАБЕННАС




# АҢЫҢДЫ УЯТ,

## йәки "Бәйғәмбәр" китабы тураһында

### Игенсе "Беҙгә хеҙмәт тураһында аңлат", тигән...

"Һеҙ Ерҙән айырылмаҫ өсөн, уның йәне булыр өсөн хеҙмәт итәһегеҙ, - тигән Бәйғәмбәр. - Ялҡауланып эштән ҡасыу - ул мәңгелеккә аҡҡан тормош ағышынан төшөп ҡалыуға бәрәбәр. Хеҙмәт иткән саҡта һеҙ көй сығарған музыка ҡоралы кеүекһегеҙ. Башҡалар көй сығарғанда шым тороу килешәме ни? Һеҙгә: "Хеҙмәт - ул ҡарғыш, ә физик хеҙмәт - бәхетһеҙлек", - тип әйтәләрҙер. Мин икенсе төрлө әйтәм: "Хеҙмәт иткәндә һеҙ ерҙең иң мөкәддәс хыялын тормошҡа ашыраһығыҙ. Хеҙмәт аша ғына йәшәү тәмен тояһығыҙ, тереклектең серҙәрен асаһығыҙ. Ауыр саҡтарҙа тыуыуҙы маңлайығыҙға яҙылған ҡаза күреп, хеҙмәткә ләғнәт уҡыһағыҙ ҙа, тик тир түгеп кенә унда яҙылғандарҙы йыуып төшөрә алырһығыҙ".

Һеҙгә: "Тормош - ул ҡараңғылыҡ", - тигәндәрҙер. Арып-талсыҡҡан ваҡытта һеҙҙән алда арығандарҙың был һүҙҙәрен йыш ҡабатлайһығыҙҙыр. Эйе, ысынлап та, ынтылыш булмағанда ул - ҡараңғылыҡ. Әммә хеҙмәт юҡта һәр ынтылыш һуҡыр була. Һөйөү менән һуғарылмаған хеҙмәттең һөҙөмтәһе булмай. Хеҙмәт - ул күреп була торған һөйөү".

### Юлаусылар йортоноң хужаһы Бәйғәмбәрҙән аш-һыу тураһында аңлатыуын һораған...

"Әгәр ҙә ерҙең һуты менән йәшәй алһағыҙ, йә булмаһа, үҫемлек кеүек, яҡтылыҡтан көс алып йәшәһәгеҙ, яҡшыраҡ булыр ине, - тигән Ул. - Ләкин һеҙ ашар өсөн үлтерәһегеҙ, таңһығығыҙҙы ҡандырыр өсөн яңы тыуған баланы әсә һөтөнән мәхрүм итәһегеҙ икән, һис юғы, ул изге ғәмәл һаналһын. Аш өҫтәлегеҙ, тәхет кеүек, изге булһын, тәбиғәттән алған һый-хөрмәт изге ғәмәлегеҙ өсөн ҡорбан ителһен.

Хайуандарҙың йәнен ҡыйған саҡта эстән генә: "Һине юҡҡа сығарған көс мине лә юҡҡа сығарасаҡ, мине лә һинең кеүек ашарҙар йә башҡа төрлө ҡулланырҙар. Сөнки һине минең ҡулға биргән Ҡанун мине лә үҙемдән көслөрәктең ҡулына тоттораса. Һинең ҡаның да, минең ҡаным да ожмах ағасына һут бирә", - тип әйтегеҙ".

**Исмәғәзәм ИСМӘҒИЛЕВ әҙерләне.**
**(Дауамы. Башы 26-сы һанда).**

✓ *Һуғыштан һуңғы осорҙа ауылдарҙа тол ҡалған, яңғыҙ ҡатындар күп ине. Совхозда эшләп йөрөһәләр ҙә, ураҙа тоторҙар ине. Быйылғы кеүек эҫе, йәйге селләләрҙә бесән эшләгән ваҡытта ла ураҙаларын өҙмәне улар.*



*ХӘТЕРКИТАП*

**Минең бала, үҫмер сағым ауылда өләсәйем менән үтте. Иҫ китмәле гүзәл тәбиғәтле, урман-яландарға ла, йылға-шишмәләргә лә, ҡая-тауҙарға ла бай Йылайыр яҡтарында, Һаҡмар йылғаһына Йылайыр йылғаһы ҡушылған урында, йырҙарҙа данлап йырланған бейек Таштуры, Суҡыташ, Шамайыл ҡаяларының итәгендә генә урынлашҡан Иҫке Яҡуп минең тыуған ауылым.**



# УРАҘАЛЫ ӨЛӘСӘЙЕМДЕ ҺАҒЫНАМ...

Өләсәйем менән үткән күңелле бала сағымды мин һәр саҡ киНәнеп, һоҡланып, һағынып иҫкә алам. Уның тураһында хозурланып, ләззәтләнеп һөйләйем. Иң-иң бәхетле мәлдәрем һөйөклө өләсәйем янында үтте. Изге Рамаҙан айҙары, ураҙа мәле минең иҫтәлек һандығымда айырыуса урын биләй. Өләсәйем Иҫкужина (Әбләева) Вәлимә Ғәлимйән ҡыҙы 15 йәшендә генә Аралбай ауылынан Иҫке Яҡуп ауылына килен булып төшә. Өләсәйемдең атаһы Ғәлимйән мулла халыҡ табибы булараҡ та тирә-йүндә танылған кеше була. Золом елдәре олатайымды ла урап үтмәй, ул ун йылға иркенән мәхрүм ителә, Мәскәү каналдарын төҙөүҙә ҡатнаша. Хәләл ефете Әхмәдулла ҡартатайым һуғышта ятып ҡалғас, өләсәйем ғүмере буйы яңғыҙы йәшәне. Ғөмүмән, һуғыштан һуңғы осорҙа ауылдарҙа тол ҡалған, яңғыҙ ҡатындар күп ине. Совет осоро булыуға ҡарамаҫтан, совхозда эшләп йөрөһәләр ҙә, ураҙа тоторҙар ине. Быйылғы кеүек эҫе, йәйге селләләрҙә бесән эшләгән ваҡытта ла ураҙаларын өҙмәне улар. Кисен эш тамамланғас, өйҙәренә ҡайтырға ла хәлдәре ҡалмай ине. Беҙ, бала-саға, өләсәйемде, Фариза, Йомабикә инәйҙәрҙе ҡаршы алырға барабыҙ ҙа, Алат тауын артылғанда уларҙы арттарынан этеп мендерә торғайныҡ. Өйгә ҡайтҡас та әле уларҙы ҡоштортто ашатыу, һыйыр һауыу, ҡаймаҡ айыртыу, башҡа күҙгә күренмәгән эштәр көтә. Ҡайһы берәүҙәр өләсәйемә, нинә был хәтлем эҫелә үҙ-үҙеңде интектерәп, ураҙа тотоп, бесән сабып йөрөйһөң, тиһә, ул үпкәләй торғайны. Ул бер ваҡытта ла ураҙаны ҡалдырманы.

Минең күңелемдә ғүмерлек бер мөғжизә булып уйылып ҡалғаны тағы шул: ураҙа мәлендә улар, ике-өс әхирәт - Ишмулла олатай Дилмөхәмәтовтың әсәһе Фәйрүзә инәй, Йомабикә инәй йыйылып, иртәнге сәхәр сәйен бергә эсерҙәр ине. Сәхәр ваҡытында мине лә уяталар ине. Урындыҡта (һике) ашъяулыҡ йәйелә, табындың бер ситендә ҡайын күмере менән ҡайнатылған самауыр шыжлап ултыра, ә ашъяулыҡ өҫтөндә ниндәй генә тәмтомдар юҡ: бал, ҡоймаҡ, ҡаймаҡ, бауырһаҡ, емешләк, йөҙөм, өрөк һ.б. Урамда әле бер әҙәм әйәһе лә күренмәй, ә тирә-йүн үҙе бер серле әкиәтте хәтерләтә ине. Мәшһүр Таштуры таҡшына уралып, һалҡын, апаҡ томан күтәрелә, йәмйәшел, йомшаҡ бәпкә үләндәрҙә ем-ем итеп, күҙҙе ҡамаштырып таңғы ысыҡ ялтырай. Борҡоп ултырған еҙ самауырҙан сыҡҡан илаһи хуш еҫ тә, хозур йәйҙең алһыу таңдарына һоҡланып һайраған ҡоштарҙың моңло тауышы ла һине әллә ҡайҙарға, ниндәйҙер бер икенсе донъяға, бәхетлеләр йәшәгән ожмах иленә илткән төҫлө тойола. Шул минуттарҙа һин ирекһеҙҙән Аллаһы Тәғәләнең әҙәм затына тәғәйенләгән сихри бер мәлен кисергәндәйһең...

Ә кисен иһә өләсәйемдәр йәрпесәкләп тегелгән иң матур күлдәктәрен кейеп, баштарына төҫлө, матур, сағыу ал сәскәләргә биҙәлгән яулыҡтарын яҙып тороп ябынып, ауыҙ асырға йыйылыша. Ул ваҡытта ауылда ураҙа осоронда һәр кис кемдер ауыҙ асырға ҡунаҡ саҡырыр ине. Шул изге мәжлестән өләсәйебеҙҙең тиҙерәк ҡайтыуын түҙемһеҙлек менән көтөп алабыҙ. Сөнки өләсәй ҡульяулығына төрөп, беҙгә лә аят күстәнәстәре алып ҡайтыр ине. Беҙҙең өсөн ана шул күстәнәстәрҙән дә тәмлерәк ризыҡ юҡ төҫлө ине...

Әлеге көндә лә беҙҙең яҡтарҙа, Аллаға шөкөр, рамаҙан айҙарында ауыҙ асыу мәжлестәренә йөрөйҙәр. Мин үҙем дә йыл да ошо изге айҙа ауылға ҡайтып, ауылдаштарымды йыйып, ураҙаға арнап, мәжлес ойошторорға тырышам, иншалла. Ләкин хәҙер кешеләрҙең бер-береһенә иртәнге сәхәргә йөрөүе онотолдо. Ғөмүмән, хәҙер ауылдарҙа йәшәүселәр көндән-көн бер-береһенән алыҫлаша бара һымаҡ. Күбеһе хатта туғандары менән дә кеҫә телефоны аша ғына һөйләшеү хәл белешеү менән сикләнә. Ниндәйҙер проблемаларҙы хәл итеү, үҙ-ара мөнәсәбәттәрендә көйләү, туғанлыҡ, дуҫлыҡ хистәрендә яңыртыу бары тик күҙгә-күҙ ҡарашып һөйләшкәндә, кәнәшләшкәндә генә мөмкин икәнен онота хәҙер күптәр.

Хөрмәтле мосолман ҡәрҙәштәремә шуны әйткем килә: изге рамаҙан айында ла, башҡа ваҡытта ла берберебеҙгә сәй эсергә, сәхәрҙәргә, ифтарҙарға йөрөйөк. Үҙебеҙсә, саф башҡортса итеп яулыҡтарҙы яҙып тороп ябынып та ҡуйһағыҙ, ифрат та күркәм булыр ине. Сөнки яулыҡты яҙып ябынған ошо мәлдә ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙға ниндәйҙер бер гүзәллек, зирәклек һипелгән кеүек тойола. Яулыҡлы мосолман ҡатын-ҡыҙҙары күркәмлеге, итәғәтлеге, тыйнаҡлығы, тәрбиәлелеге менән айырылып торғандай. Башҡа халыҡтарҙа яулыҡтарҙы беҙҙең кеүек матур итеп, яҙып ябынып йөрөүҙәр бик күренмәй. Ана шул башыңа ябынған яулығыңдың ни тиклем матур, сәскәле, сағыу, йәки, киреһенсә, буҙ, төҫһөҙ, ҡарауһыҙ булыуынан һинең характерың, кәйефең, фиғел-күренешең, уй-тойғоларың һәм изгелеккә, йомартлыҡҡа, сафлыҡҡа, хозурлыҡҡа, камиллыҡҡа ынтылыуың тураһында белеп була, тип уйлайым. Бер-беребеҙгә ихтирамлы, иғтибарлы булып, боронғо йолаларыбыҙҙы һаҡлап, киләсәккә ынтылып, киләсәккә ҙур өмөттәр бағлап йәшәйек, милләттәштәр!

**Мәрйәм ЗӘКИРЙӘНОВА.**

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# НАМАҘ ТУРАҺЫНДА ХӘҘИСТӘР

"Эй, Ғәли, - тигән Бәйғәмбәр (с.ғ.с), - өс нәмәне: ваҡыты килеп еткән намаҙыңды, әҙерлек хәлендә еткерелгән мәрхүмеңде ерләүҙе, кешеһе тура килгәндә тол ҡатыңды кейәүгә бирәп ҡалыуҙы кисектерә күрмә".

"Намаҙ ваҡытының башланыуы - Аллаһ ризалығына бер сәбәп, намаҙҙың һуңы - Аллаһы Тәғәләнең ярлыҡауына өмөт".

"Бер нәмәне лә имамдан элек эшләмәгеҙ. Ул "Аллаһу Әкбәр!" тигәс кенә, һеҙ ҙә "Аллаһу Әкбәр!" тиегеҙ".

"Эй, кешеләр! Мин - һеҙҙең имамығыҙ. Рөкүгтә, сәждәлә, ҡыямда минән уҙып китмәгеҙ".

"Имамды үҙенә эйәреү өсөн имам иткәндәр. Ул "Аллаһу Әкбәр!" тиһә, һеҙ ҙә "Аллаһу Әкбәр!" тиегеҙ, ул Ҡөрьән уҡығанда өндәшмәй тороғоҙ".

"Намаҙ - ул Ҡөрьән уҡыу һәм Аллаһты хәтергә төшөрөү. Намаҙ уҡығанда уйығыҙҙа ла намаҙ ғына булһын".

"Намаҙ уҡығанда битегеҙҙе яулыҡ менән ҡапламағыҙ, өҫ кейемегеҙҙе иңегеҙгә һалып ҡына намаҙға баҫмағыҙ".

Бер ваҡыт сәхәбәләрҙән Әбү Хәмид Әс-Сәғиҙиҙең ҡатыны килеп: "Эй, Аллаһ илсеһе! Намаҙҙы мин һеҙҙең менән бергә уҡырға яратам", - ти. "Минең менән намаҙ уҡыуҙың һинә бик тә оҡшауын мин беләм, әммә үҙеңдең йоҡо бүлмәңдә уҡыған намаҙың һинә ҡунаҡ бүлмәһендә уҡылған намаҙҙан, ҡунаҡ бүлмәһендә уҡығаның үҙ өйөңдә уҡыған намаҙҙан, үҙ өйөңдә уҡыған намаҙ мәхәллә мәсетенә килеп уҡылғандан яҡшыраҡ", - ти Бәйғәмбәр (с.ғ.с) .

Бәйғәмбәребеҙ һүҙҙәренән һуң был ҡатын өйөнөң иң төпкөл бер ерендәге мөйөштә һайлап ала ла намаҙҙы ғүмер буйы шунда уҡый.

Беҙҙә лә бит намаҙ ваҡыттарында фәҡәт ҡатын-ҡыҙҙар шаулашып ултырыусан, хөтбә һөйләнгән саҡтарҙа ла тауышланып йөрөүселәр етерлек.

"Хәлфә ағай ҙа хаталана, уны һуктырыусы ғына юҡ", тигәндәй, йәмәғәтте йыйып, мәсеттә ултырыу тәртибе хаҡында аңлатҡан кешене генә күргән юҡ.

"Әгәр ҙә кешеләрҙең мәсеттә ни ҡыланып йөрөгәнен Бәйғәмбәребеҙ үҙе күреп торһа, элекке кеүек, әле лә ул ҡатын-ҡыҙҙарҙы мәсеткә йөрөүҙән тыйыр ине", - тигән Ғәйшә рази Алла ғәнһә.

Элеккеләр әйткән: "Кешеләр тәсбих, тәкбир әйтеү, Ҡөрьән уҡыу менән бергә теләһә нимә һөйләшеп йөрөү өсөн мәсеткә килә ҡалһа, ул ниндәй намаҙ була?" - тигән.

Әткәндәй... Кешеләр күп ерҙә намаҙ уҡырға тура килгәндә алдыңдан үтеп-һүтеп йөрөргә мәжбүр булғандар гонаһлы, ә һин үҙең уларға гонаһ эшләүгә сәбәпсе булмаҫ өсөн намаҙ уҡыусы үҙ алдына сутра ҡуя. Сутра терһәк бейеклегендәге бер нәмә - ултырғыс, дөйә эйәре, бармаҡ йыуанлығындағы бер ағас йәки башҡа нәмәләр булырға мөмкин.

Йәмәғәт менән намаҙ уҡығанда үҙ алдына һәр кем сутра ҡуйып тормай, имам алдындағы - имам ҡулындағы таяҡ бөтәһе өсөн дә етә.

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# НИ ӨСӨН ҺЕҘ АУЫРЫУ ҺӘМ ЯРЛЫ?

## Эгоизмдың бәҫе

### Уҡымышлы эгоизм зарурлығы

Мин үҙ-үҙемә артыҡ ышанған булып күренгем килмәй, бары тик фактарҙы ғына билдәләйем. Кешеләрҙең күпселеге тирә-яҡта барған хәл-ваҡиғаларға мөнәсәбәтен белдереп кенә йәшәй, ә уларҙы үҙҙәре тыуҙырыуы хаҡында уйлап та бирмәй. Улар үҙҙәрен Йыһан дингеҙендәге тулҡындар тарафынан теге йәки был яҡҡа ырғытылған карап тип күрә һәм был көс менән идара итеп булмай, тип уйлай.

Күпселек кешенең сәләмәтлеге яҡшы түгел; 90 проценты һимереүҙән, энергия етмәүҙән, төрлө ауырыуҙарҙан яфалана, тип раҫларға мөмкин.

Кешелектең күпселек өлөшөн тартып-һуҙып та бай тип әйтеп булмай. Был АҠШ, Европаның, Азияның үҫешкән илдәре менән сағыштырғанда объектив булмаясаҡ. Әлбиттә, алға китеш тә бар: был илдәрҙә ярлы тип иҫәпләнгән күпселектең йәшәү өсөн кәрәк булған торлағы, аҙыҡ-түлеге, кейем-һалымы ғына түгел, һыуы, электр уты, телефон бәйләнеше, йылылыҡ селтәре, кондиционеры һәм телевизоры бар. Әммә "өсөнсө донъя" стандарттары буйынса бик бай күренһәләр ҙә, уларҙы банкротлыҡтан бары тик ауырыу сәбәпле алған отпуск йәки производстволағы ике аҙналыҡ эш туҡтауы ғына айыра. Бер ваҡытта ла шәхси бурыс шәхси тупланмалар шулай түбән булғанда былдай ҙур булғаны юҡ ине әле; был кешеләрҙең бөтөн нәмәһе бар кеүек тойғо ҡала, ләкин улар бик ярлы.

Был фекер беҙҙә №3 тип яҙылған ишеккә килтерә: ахмаҡлыҡ. Күпселектең ғүмерен алйотлоҡта һәм ауырып үткәреүе уларҙың интеллектуал булмауын күрһәтә. Мин кешеләрҙең шулай йәшәүенән һис кенә лә ҡыуаныс кисермәйем. Эйе, күптәрҙең хәл-торош ҡорбаны булып тыуыуы менән килешәм, әммә ғүмер буйы шулай булып ҡалырға тимәгән бит. Мин дә ахмаҡ, ауырыу һәм ярлы булып тыуҙым һәм был минең өсөн берҙән-бер ысынбарлыҡ ине. Һөҙөмтәлә уларҙың барыһынан да юғары күтәрелдем. Мин һәр кемдең быға һәләтле икәненә ышанам һәм шуға күрә был хаҡта яҙам да инде - кеше тыуғанда уҡ уңышлы булыу хоҡуғына эйә булырға өйрәнергә тейеш.

Бик йыш кешеләрҙә алйот тип атайым. Дөрөҫөн әйткәндә, был бары тик маркетинг алымы ғына. Киң матбуғат саралары уны элеп алып, ҡыҙыу бәхәс ойоштора, тәнҡиткә дусар итә, һөҙөмтәлә оранып тап шуға мохтаж булған миллиондарса кешегә барып етә.

Күпселек барыбер ҙә алйот түгел; улар бары тик үҙҙәренең нимәгә һәләтле икәнлеген генә аңламай. Мин дә быны оҙаҡ йылдар аңламағайным. Теләгем барыһының да сәләмәтлек, муллыҡ, интеллектуаль ҡыҙыҡһыныу булған тормош түмән татып ҡарауы, һәр көндө ҡыуанып, дәрт һәм ҡәнәғәтлек менән ҡаршы алыуы ине.

Әммә былар тормошҡа ашһын өсөн аңығыҙҙа, инаныуығыҙҙа, тормошҡа ҡарашығыҙҙа етди үҙгәрештәр булырға тейеш.

**Рэнди ГЕЙДЖ.**



## 13 ИЮЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.15 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
14.30 "Без свидетелей". Сериал (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.10, 04.05 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Найти мужа в большом городе". Сериал. 1-я и 2-я серии (12+).
23.35 "Водолей". Криминальный сериал 18+
01.15, 03.05 "Плохие девчонки". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Вести".
10.00 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Марьина роща". Детективный сериал. "Марьина роща", "Новое назначение" (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Чужое гнездо". 11-13-я серии. Мелодраматический сериал (12+).
23.50 "Славянский базар-2015".
01.45 "Цыган". Драматический сериал. 3-я серия.
03.25 "Узбекистан. Жемчужина песков".
04.20 "Комната смеха".

### БСТ
**07.00 Гимн Республики Башкортостан.**
**07.05 "Сәләм" (12+).**
**10.00 Новости недели (на башк. яз.).**
**10.30 "Фанташ" (0+).**
**10.45 "Книга сказок" (0+).**
**11.00 "Надо знать" (6+).**
**11.15 "Замандаш" (6+).**
**11.30 Новости недели.**
**12.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**12.30 "Автограф" (12+).**
**13.00 "Бәхетнәмә" (0+).**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.45 "Ермоловы". Сериал (16+).**
**14.45 "Бауырһаҡ" (0+).**
**15.00 "Ғәләмәт донья" (0+).**
**15.15 "Преград.net" (0+).**
**15.30 "Гора новостей" (0+).**
**15.45 "Сируси". Сериал (12+).**
**16.30, 21.30 Новости.**
**16.45 "Адреналин" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Большой чемодан" (6+).**
**19.00 "Телецентр".**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 Новости спорта.**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**22.00 "Следопыт" (12+).**
**23.00 "Пылающая равнина". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15 "Райса + Файзи" (12+).**

## 14 ИЮЛЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Найти мужа в большом городе". Сериал (16+).
14.30 "Без свидетелей". Сериал (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.10 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Найти мужа в большом городе". 3-я и 4-я, заключительная, серии (16+).
23.30 "Водолей". Криминальный сериал (18+).
01.20, 03.05 "Австралия". Худ. фильм (12+).
03.00 Новости.
04.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
10.00 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Марьина роща". Сериал. "Покушение", "Дом пионеров" (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Чужое гнездо". 14-я-16-я серии. Мелодраматический сериал (12+).
23.50 Торжественная церемония закрытия XXIV Международного фестиваля "Славянский базар в Витебске".
01.05 "Цыган". 4-я, заключительная, серия. Драматический сериал.
02.55 "Мы родом из мультиков". Док. фильм (12+).
04.00 "Комната смеха". Юмористическая программа.

### БСТ
**07.00 Гимн Республики Башкортостан (16+).**
**07.05 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Миллион лет до нашей эры" (0+).**
**10.30 "Зеркальце" (0+).**
**10.45 "Перекличка" (0+).**
**11.00 "Надо знать" (6+).**
**11.15 "Замандаш" (6+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (0+).**
**11.45 "Врачи" (12+).**
**12.30 "Башҡорттар" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.) (0+)**
**13.45 "Ермоловы". Сериал (16+).**
**14.45 "Шәп арба" (0+).**
**15.00 "Семәр" (0+).**
**15.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**15.30 "Гора новостей" (0+).**
**15.45 "Сируси". Сериал (12+).**
**16.45 "Дорога к храму" (12+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Большой чемодан" (6+).**
**19.00 "Близнецы". Сериал (16+).**
**20.00 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 Новости. Тема дня.**
**21.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+).**
**23.00 "Знать бы, что я гений". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15 "Три аршина земли" (12+).**

## 15 ИЮЛЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05:00 "Доброе утро"
09:00 Новости
09:15 "Контрольная закупка"
09:45 "Жить здорово!" 12+
10:55 "Модный приговор"
12:00 Новости с субтитрами
12:20 "Найти мужа в большом городе". Заключительные серии 16+
14:30 "Без свидетелей". 48-я серия 16+
15:00 Новости с субтитрами
15:10 "Мужское / Женское" 16+
17:00 "Наедине со всеми". Программа Юлии Меньшовой 16+
18:00 Вечерние новости с субтитрами
18:45 "Давай поженимся!" 16+
19:50 "Пусть говорят" с Андреем Малаховым
21:00 "Время"
21:35 "Ветреная женщина". Многосерийный фильм. 1-2 серии 16+
23:15 "Городские пижоны". "Водолей". Заключительная серия 18+
00:10 "Городские пижоны". "Дэвид Боуи" 16+
01:20 "В тылу врага" Детектив 16+
03:00 Новости
03:05 "В тылу врага". Окончание 16+
03:20 "Модный приговор"
04:20 "Контрольная закупка"

### РОССИЯ 1
05:00, 09:15 "Утро России"
09:00 Вести
10:00 О самом главном
11:00 Вести
11:35 "Вести-Башкортостан"
11:55 Тайны следствия-12. Реликт
12:55 Особый случай
14:00 Вести
14:30 "Вести-Башкортостан"
14:50 Вести. Дежурная часть
15:00 Марьина роща. Свидетельница
16:00 Марьина роща. Коллекция
17:00 Вести
17:10 "Вести-Башкортостан"
17:30 Вести
18:15 Прямой эфир
19:35 "Вести-Башкортостан"
20:00 Вести в 20:00
20:50 Спокойной ночи, малыши!
21:00 Чужое гнездо (17 серия)
21:55 Чужое гнездо (18 серия)
22:50 Чужое гнездо (19 серия)
23:50 Биохимия предательства
01:20 Возвращение Будулая. Х/ф. Серии 1 и 2
03:40 Комната смеха
04:45 Вести. Дежурная часть

### БСТ
**07:00 Гимн Республики Башкортостан**
**07:05 "Сәләм". 12+**
**10:00 "Миллион лет до нашей эры" 0+**
**10:30 "Книга сказок". Сказка 0+**
**10:45 "Борсак". Веселая физкультура 0+**
**11:00 Надо знать 6+**
**11:15 Замандаш. 6+**
**11:30 Новости /на рус.яз./**
**11:45 Врачи 12+**
**12:30 Тәмле 12+**
**13:00 Бәхетнамә 0+**
**13:30 Новости /на баш.яз./**
**13:45 Телесериал "Ермоловы" 16+**
**14:45 "Бауырһаҡ". 0+**
**15:00 "Йырлы кәрәҙ". 0+**
**15:15 "Физра. Спортблог спецкора" 0+**
**15:30 "Гора новостей". 0+**
**15:45 Телесериал "Сируси" 12+**
**16:30 Новости /на рус.яз./**
**16:45 "Здоровое решение". 6+**
**17:15 Орнамент 0+**
**17:30 Новости культуры /на рус.яз./**
**17:45 "Большой чемодан". 6+**
**18:30 Новости /на баш.яз./**
**19:00 Телесериал "Близнецы" 16+**
**20:00 Полезные новости 12+**
**20:15 "Сәңгелдәк". 0+**
**20:30 Новости. Тема дня /на баш.яз./**
**21:00 Автограф 12+**
**21:30 Новости /на рус.яз./**
**22:00 Историческая среда 12+**
**22:30 Новости /на баш.яз./**
**23:00 Ночной кинозал. Художественный фильм "Список контактов " (16+) По окончании: Новости /на баш.яз./**
**01:15 М.Карим. "Салават". Спектакль Национального молодежного театра им. М. Карима 12+**
**03:20 Мелодии души. Концерт 12+**
**04:10 Телесериал "Близнецы" (12+) По окончании: Новости. Тема дня /на баш.яз./**
**05:30 Телесериал "Сируси". 12+**
**06:30 Новости /на рус.яз./**

## 16 ИЮЛЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами) (16+).
12.20, 21.30 "Ветреная женщина". 1-4-я серии (16+).
14.30 "Без свидетелей" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.10 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Выживут только любовники". Фэнтези (16+).
01.25, 03.05 "Омен-4" (18+).
03.00 Новости.
03.25 "Модный приговор".
04.25 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном".
11.00, 14.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
12.55 "Особый случай" (12+).
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Марьина роща". "Сын", "Ревность". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Чужое гнездо". 20-я и 22-я серии 12+.
23.50 "Атомная драма Владимира Барковского". Док. фильм (12+).
00.50 "Ураза-Байрам. Радость обновления". Док. фильм (12+).
01.25 "Возвращение Будулая".3-4-я серии. Драматический сериал (12+).
03.40 "Комната смеха".
04.45 "Вести. Дежурная часть".

### БСТ
**07.00 Гимн Республики Башкортостан (16+).**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Миллион лет до нашей эры" (0+).**
**10.30 "Дети-герои" (0+).**
**10.45 "Цирк в 13 метров" (0+).**
**11.00 "Надо знать" (6+).**
**11.15 "Замандаш" (6+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (0+).**
**11.45 "Врачи" (12+).**
**12.30 "Үткән ғүмер" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (12+).**
**13.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.45 "Ермоловы" (16+).**
**14.45 "Фанташ" (0+).**
**15.00 "Ғәләмәт донья" (0+).**
**15.15 "Семәр" (0+).**
**15.30 "Гора новостей" (0+).**
**15.45 "Сируси" (12+).**
**16.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**17.30 Новости культуры.**
**18.00 "Большой чемодан" (6+).**
**19.00 "Близнецы" (16+).**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 Новости. Тема дня.**
**21.00 "Наука 102" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+).**
**23.00 "ФК "Уфа" - наша команда!" (6+).**
**23.30 "Падающие небеса" 916+).**
**23.00 Новости. Тема дня (на башк. яз.).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.) (12+).**

## 17 ИЮЛЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.15 "Жить здорово!" (12+).
10.20 "Модный приговор".
11.15 "Ураза-Байрам". Трансляция из Уфимской соборной мечети.
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Ветреная женщина" (16+).
14.30 "Без свидетелей" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.10 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Три аккорда". Музыкальное шоу (16+).
23.10 "Городские пижоны". "Брижит Бардо". Док. фильм (16+).
00.15 "11.6". Триллер (16+).
02.10 "Вторжение". Мелодрама (16+).
04.20 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.10, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "О самом главном".
10.00 "Тайны следствия" (16+).
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 Праздник Ураза-Байрам. Прямая трансляция из Московской Соборной мечети.
12.55 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Марьина роща". "Карточки", "Диверсант" (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Юморина" (12+).
22.55 "Любовь приходит не одна". Мелодрама (16+).
00.50 "Живой звук". Конкурс караоке.
02.50 "Возвращение Будулая". 5-я, заключительная, серия. Драматический сериал (12+).
03.55 "Горячая десятка" (12+).
05.00 "Комната смеха".

### БСТ
**07.00 Гимн Республики Башкортостан (16+).**
**07.05, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "С праздником Ураза-байрам!" (12+).**
**08.00 "Ураза-байрам". Прямая трансляция из Уфимской Соборной мечети "Ляля-Тюльпан"**
**09.00, 18.00 "Йома" (0+).**
**09.30 "Колонкай" (0+).**
**10.15 "Кружевное облако" (0+).**
**10.45 "Надо знать" (6+).**
**11.00 "Историческая среда" (6+).**
**11.30 "Большой чемодан" (6+).**
**12.15, 16.45 "Весело живем" (12+).**
**12.30, 21.30 Новости.**
**12.45 "Полюс времени" (12+).**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**14.30 "Мулла" (12+).**
**17.00 "Ураза-байрам". Прямая трансляция из Уфимской соборной мечети "Ляля-Тюльпан". Повтор.**
**18.30 "Замандаш" (6+).**
**18.45 "Помни меня" (16+).**
**По окончании: "Сәңгелдәк" (0+).**
**21.00 "Автограф" (12+).**
**22.00 "Аль-Фатиха" (12+).**
**23.00 "Кука" (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15 "Одолжи мне жеребца" (12+).**

## 18 ИЮЛЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.10, 06.10 "Воры в законе". Худ. фильм 16+).
06.00 Новости.
07.05 "Найти и обезвредить" (12+).
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Играй, гармонь любимая!"
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Василий Ливанов. Кавалер и джентльмен". Док. фильм (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.10, 15.15 "Личная жизнь следователя Савельева". Сериал (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
17.20 "Угадай мелодию" (12+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
19.15 "ДОстояние РЕспублики: Алексей Рыбников".
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
23.00 "КВН". Премьер-лига (16+).
00.30 "Таинственный лес" (12+).
02.30 "Цвет денег" (16+).
04.40 "Мужское/Женское" (16+).

### РОССИЯ 1
05.30 "Тайна виллы". Худ. фильм (12+).
07.30 "Сельское утро".
08.00 "Вести".
08.20 "Вести-Башкортостан".
08.30 "Планета собак".
09.10 "Укротители звука" (12+).
10.05 "Качество жизни".
11.00 "Вести".
11.20 "Вести-Башкортостан".
11.30 "Кулинарная звезда" (12+).
12.35, 14.40 "От сердца к сердцу". Худ. фильм
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
15.10 "Субботний вечер".
17.05 "Улица Веселая". Юмористическая развлекательная программа (12+).
18.00 "Уйти, чтобы остаться". Мелодрама
20.00 "Вести".
20.35 "Бежать нельзя погибнуть". Мелодрама
00.15 "Охота на принцессу" (16+).
03.35 "Выбор моей мамочки" (16+).
05.30 "Комната смеха".

### БСТ
**07.00 Гимн Республики Башкортостан.**
**07.05, 22.30 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.15 "Джордж из джунглей" (0+).**
**09.30 "Здоровое решение" (6+).**
**10.00 "КЛИО" (6+).**
**10.45 "Большой чемодан" (6+).**
**11.30 "Аль-Фатиха" (6+).**
**12.00 "Следопыт" (12+).**
**12.30, 21.30 Новости.**
**12.45 "Наука 102" (12+).**
**13.15 "Весело живем" (12+).**
**13.30 "Автограф" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Баик-2015" (12+).**
**17.00 "Хазина" (6+).**
**17.30 "Девушка с монистами" (12+).**
**19.00 "Башҡорттар" (12+).**
**19.30 "История признания" (0+).**
**19.45 "Свадебный переполох" (12+).**
**22.00 "Легенды спорта" (12+).**
**23.00 "Башкорт йыры-2015" (12+).**
**23.45 "Боец".**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 Лучшие матчи ХК "Салават Юлаев". Сезон 2014-2015. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Металлург" (Магнитогорск) (12+).**

## 19 ИЮЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.45, 06.10 "Коллеги". Сериал (16+).
06.00 Новости.
07.50 "Армейский магазин
08.25 "Смешарики. ПИН-код".
08.35 "Здоровье" (16+).
09.40 "Непутевые заметки" с Дм.Крыловым (12+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Парк".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Фазенда".
12.50 "Горько!" (16+).
13.40 "Теория заговора" (16+).
14.40 "Приходите завтра..." Комедия (12+)
16.35 "Олимпиада-80. Больше чем спорт"
17.40 "Голосящий КиВиН". Музыкальный фестиваль (16+).
21.00 "Воскресное "Время".
21.20 "Танцуй отсюда!" Комедия (16+).
23.00 "Танфуй! (16+).
01.00 "Казанова". Комедия (12+).
03.10 "Модный приговор".
04.10 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
06.30 "Штормовое предупреждение". Худ. фильм (12+).
09.10 "Смехопанорама Евгения Петросяна".
09.40 "Утренняя почта".
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.10 "Родители". Сериал (12+).
12.10 "Страховой случай". Худ. фильм (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Смеяться разрешается". Юмористическая программа.
16.15 "Один на всех". 4 серии. Мелодраматический сериал (16+).
20.00 "Вести".
20.35 "Снова один на всех". 4 серии. Мелодраматический сериал (16+).
00.05 "Жила-была любовь" (12+).
02.00 "Клинч" (16+).
04.00 "Освободители". "Разведчики" (12+).

### БСТ
**07.00 Гимн Республики Башкортостан (12+).**
**07.05 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Йома" (0+).**
**08.30 "Энн из поместья "Зеленые крыши" (0+).**
**10.00 "Физра. Спортблог спецкора" (6+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Бауырһаҡ" (0+).**
**10.45 "Фанташ" (0+).**
**11.00 "Ал да гөл" (0+).**
**11.15 "Байтус" (0+).**
**11.30 "Сулпылар" (0+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Автограф" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.00, 17.15 "Весело живем" (12+).**
**15.15 "Аргымак" (0+).**
**15.45 "Учу башкирский язык" (0+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.30 "Путешествие в Булгар-2014" (12+).**
**17.30 "Судьба, выбранная мной" (12+).**
**19.00 "Мир настоящих мужчин" (12+).**
**19.15 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).**
**19.30 "История признания" (6+).**
**19.45 "Полезные новости" (12+).**
**20.00 "Любимое дело" (12+).**
**20.30 "Мы из прошлого" (12+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Байык-2015" (6+).**
**2330 "Вечер.com" (12+).**
**00.15 "Свидание с джазом" (12+).**
**00.45 "Ширли-мырли" (16+).**
**03.15 "Кавказский меловой круг" (12+).**


## ИҒТИБАР!

МУП "Редакция газеты "Киске Өфө" объявляет сведения о размере и условиях оплаты печатного материала, а также иных условиях размещения предвыборной агитации по дополнительным выборам депутатов Совета городского округа город Уфа Республики Башкортостан третьего созыва по одномандатному избирательному округу №2:

| Площадь в кв.см | 1 кв.см | 120 | 180 | 250 | 500 | 1000 |
|---|---|---|---|---|---|---|
| Блок, модуль | | 8 м - 1/16 | 12 м | 1/8 А2 | 1/4 А2 | 1/2 А2 |
| Формат А3 | | 1/8 | | 1/4 | 1/2 | полоса |
| Цена, в рублях | 22 | 2640 | 3960 | 5500 | 11000 | 22000 |

Расценки на перевод текста на башкирский язык: стоимость перевода одного слова малого текста (не более 50 слов) составляет 10 (десять) рублей; стоимость перевода большого текста (более 50 слов) определяется в зависимости от сложности текста и составит от 150 (ста пятидесяти) до 600 (шестисот) рублей за страницу.

Для заключения договора должна быть предоставлена нотариально удостоверенная копия доверенности уполномоченного представителя по финансовым вопросам кандидата на должность депутата Совета городского округа город Уфа РБ, специально наделенного полномочиями на заключение договоров о предоставлении площади на размещение печатного материала, подписания актов об оказании услуг и иных документов, связанных с исполнением договора о предоставлении площади, а также копии иных документов.

Наш адрес: 450005, г. Уфа, ул. Революционная, д.167/1, тел./факс 253-25-44, 252-39-99.

✓ ***Ханды Хоҙай ораһы булһа, үҙ халҡына хасланыр; байҙы Хоҙай ораһы булһа, дәүләтенә маһайыр.***

***(Башҡорт халыҡ мәҡәле).***



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# БРИКС ИЛДӘРЕ - БЕҘҘӘ ҠУНАҠТА




* *Бразилия Президенты фамилияһы Википедиялағыса алынды.*

**24-сы һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса: Ризаитдин**. Крыжановский. Сарбай. Грамм. Ҡалым. **Аҡмулла**. Арбат. Мөхәммәт. Радар. Автолавка. Титов. Нөктәләр. Дао. Арпа. Ләм. Мәскәүле. Аргентина. Әкиәт. Зөлхизә. Батыр. Арба. Байтал. **Мөжәүир**. Рәсүлү. Оло. Нәсихәт. Ейлу. **Зәйнулла**. Илама. Сымыры. Шәғбан. Үтәҙек. Тайм.

**Вертикаль буйынса:** Дана. Астролог. Тойғо. Мендәр. Ураҙа. Алма. Роми. Кәсә. Ҡарама. Астра. Әрепләшеү. Рәжәб. Рауза. Йомарт. Азов. Снек. Герб. Урманлы. Мәрт. Декларатив. Сеул. Мөьмин. Мәте. Алырым. Өлкә. Зәйтүн. Сөйлә. Әфтиәк. Лемнос. Әруах. Рәүеше. Әкәмәт.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1436 һижри йыл.*

| Июль (Рамаҙан - Шәүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 13 (27) дүшәмбе | 3:28 | 4:58 | 13:30 | 20:14 | 21:44 | 23:14 |
| 14 (28) шишәмбе | 3:29 | 4:59 | 13:30 | 20:13 | 21:43 | 23:13 |
| 15 (29) шаршамбы | 3:30 | 5:00 | 13:30 | 20:12 | 21:42 | 23:12 |
| 16 (30) кесе йома | 3:32 | 5:02 | 13:30 | 20:11 | 21:41 | 23:11 |
| 17 (1) йома | 3:33 | 5:03 | 13:30 | 20:09 | 21:39 | 23:09 |
| 18 (2) шәмбе | 3:34 | 5:04 | 13:30 | 20:08 | 21:38 | 23:08 |
| 19 (3) йәкшәмбе | 3:36 | 5:06 | 13:30 | 20:07 | 21:37 | 23:07 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

ҠЫҘЫҠ ТАҺА!



# КЕШЕ ТУРАҺЫНДА

• Йоҡлап китер өсөн кешегә уртаса 7 минут тирәһе ваҡыт кәрәк.

• Ер шарында ни бары 7 процент кеше һулаҡай.

• Һәр кеше үҙ ғүмерендә яҡынса 8 бәләкәй үрмәксе йота.

• Кеше организмында йәшәүсе бактерияларҙың уртаса ауырлығы 2 килограмм тәшкил итә.

• Организмдағы кальцийҙың 99 проценты тештәрҙә.

• Үбешкәндә бер кешенән икенсеһенә 278 төрлө бактерия күсә. Уларҙың 95 проценттан күберәге хәүеф тыуҙырмай.

• Кеше организмындағы тимер сәғәт өсөн бәләкәй генә шөрөп эшләүгә етә.

• Тымау тыуҙырыусы 100-ҙән артыҡ вирус бар.

• Баш менән стенаға бәрелгәндә сәғәтенә 150 калорий юғалтырға мөмкин.

• Кешенең тиреһе бөтә ғүмере дәүерендә мең тапҡыр алмашына.

• Көнөнә бер ҡап тәмәке тартҡан кеше йылына ярты сынаяҡ сайыр эсә.

• Ҡатын-ҡыҙҙар ир-атҡа ҡарағанда 2 тапҡырға һирәгерәк күҙҙәрен йома.

• Кешенең организмында ни бары 4 минерал бар. Улар - апатит, арагонит, кальцит һәм кристобалит.

• Ҡулдың тырнаҡтары аяҡтыҡына ҡарағанда 4 тапҡырға тиҙерәк үҫә.

• Мейелә бер секундта 100 мең химик реакция була.

• Үҙ ғүмерендә һәр кеше үбешеү өсөн яҡынса 2 аҙна ваҡыт сарыф итә.

• Кеше организмында лейкоциттар 2-4 көн, ә эритроциттар 3-4 ай "йәшәй".

• Кеше тәнендәге иң көслө мускул - тел.

• Тыуғанда уҡ мейелә 14 миллиард күҙәнәк була. 25 йәштән һуң уларҙың һаны көн һайын 100 меңгә кәмей башлай. Китаптың бер битен уҡыу өсөн сарыф ителгән бер минут эсендә яҡынса 70 күҙәнәк үлә. 40 йәштән һуң мейенең деградацияһы ҡырҡа үҫә, ә 50 йәштән һуң нейрондар (нервы күҙәнәктәре) кибә һәм мейенең күләме кәмей.

• Уң яҡтағы үпкәгә, һулаҡайына ҡарағанда, һауа күберәк һыя.

• Оло кеше көнөнә яҡынса 23 мең тапҡыр тын ала.

• Кешенең ауыҙында яҡынса 40 мең бактерия йәшәй.

• Кеше организмында 2 мең тирәһе тәм рецепторы бар.

• Йөрәк ҡанды дүртенсе ҡат кимәленә тиклем күтәрергә мөмкин булған баҫым булдыра.

• Йоҡлағанда, телевизор ҡарауҙан айырмалы, калориялар тиҙерәк яна.

• Балалар яҙ көнө шәберәк үҫә.

• Йыл һайын, уң ҡуллылар өсөн тәғәйенләнеп эшләнгән механизмдарҙы эксплуатациялағанда, 2 меңдән ашыу һул ҡуллы кешеләр һәләк була.

• Йылмайғанда кеше 17, ә бойоҡҡанда 43 мускул файҙалана.

• Самолетта осҡанда сәс тиҙерәк үҫә.

• Ғүмеренең яҡынса ике аҙнаһын кеше светофор янында үткәрә.

• 24 сәғәт эсендә кеше яҡынса 4800 һүҙ әйтә.

• Күҙ тыуғандан алып ғүмер ахырына тиклем бер үк ҙурлыҡта була, ә ҡолаҡ һәм танау бер ҡасан да үҫеүҙән туҡтамай.

• Иртән кеше, кискә ҡарағанда, яҡынса 8 миллиметрға бейегерәк була.

• Һөйәк ҡоросҡа ҡарағанда 5 тапҡырға нығыраҡ.

**(Аҙағы. Башы 27-се һанда).**

ӘЙТЕШ

# ЯҠШЫҒА ВАҠЫТ ЕТТЕ...

**Гәзитебеҙҙең 25-се һанынан алып шиғри әйтеште Ағылса менән Супай сәсәндәр дауам итә. Үткән һанда Ағылса Супай сәсәнгә:**

Тағы ла бирәм һорау,
Түгел ҡатмарлы, урау.
Нинә әле һуң нинә,
Нинә һаман да нинә,
Беҙҙе күрә алмағанды,
"Игеҙәк"кә һанайһыҙ?
Әллә үтә һармаҡбыҙмы?
Әллә ҡолаҡ һалмайһыҙ? - тигән һорауын төбәгәйне.

**Супайҙың Ағылсаға яуабы:**
Һармаҡ, наян тиергәме,
Бер ҡатлы әллә халҡым,
Был хаҡта ситтән килгәндәр
Әйтеп тора ла буйтым.
Ҡалалар боҙалыр инде
Тәбиғәттең балаһын.
Донъя шуға йөҙөн борғас,
Инде ҡайҙа бараһын?
Ишеткәйнем бер идея:
Стәрле менән Өфөнө
Бер ҡалаға ҡушырға ла,
Йыйып бөтә кешене,
Яңы Мәскәү эшләргә тип
Тәҡдим иткән бер ағай.
Орлоҡ бар бит - Мәскәүҙәрҙә
Йәшәйеш ана ҡалай!
Ә ҡалған яҡ - урман-тауҙар
Йәйрәп ятһын хөрлөктә,
Йәшәр ҡош-ҡорт һәм мал-тыуар
Ирәүәндә, иректә.
Әкренләп, тим, барыбер ҙә
Шуға баралыр тормош -
Кешелектең мәмерйәнән
Таш йорттарына сабыш.
Ҡырмыҫҡа иләүендә лә
Йәшәйеш шулай, хәйер.
Ҙур бер тупҡа туплангас та
Кешелек тигән өйөр,
Бөтәр ине ығы-зығы,
Бер-берең менән талаш,
Илдәр менән сик бүлешеү,
Ҡорал йыйыуҙа ярыш...
... Хыялланып киттем, буғай,
Кем шулай уйламаған?
Әлегәсә тотош донъя
Берҙәм ил ҡоралмаған.
Ҡабат мәмерйә, Ҙур боҙлоҡ
Янаһа беҙгә әгәр,
Тотош кешелек, моғайын,
Оло бер кәнәш йыйыр,
Әле Өфөлә йыйылған
ШОС менән БРИКС һымаҡ.
Ана шунда асыҡланыр -
Кем наян да кем һармаҡ...

**Ағылсаның Супайға әйткәне:**
Магазиндар асалар,
Мәктәптәрҙе ябалар.
Һалымдарҙы өстәп-өстәп,
Кешеләрҙе һауалар.
Илдең теҙгененән тотоп,
Ҡайҙа алып баралар?
Өфө-Стәрле ҡушҡандың
Баш эсендә тю-тюлыр.
Хыялланып мейе кипкәс,
Эстәрендә тәтәндәр.
Өфө саммитынан минә,
Түгел йылы ла, һыуыҡ.
Тик ундағы һөйләшеүҙәр,
Булмаһындар буш ҡыуыҡ.
Бүреләр өйөрөнөң дә
Һунар иткән ере бар.
Үҙемдеке тип һаҡлаған
Айыуҙың да өңө бар.
Кешеләр ҙә хай(ы)уандай,
Өйөр булып тупланған.
Йәшәү сиген билдәләгән,
Минең ил тип уйлаған.
Әле лә беҙҙең йәшәйеш
Ил эсендә - мәмерйә.
Ҡанундарҙы боҙмай кеше,
Йәшәп китә ҡәбергә.
Йәшәйештең үҙ ҡануны -
Еребеҙ ҙур төрмәһәс.
Дәүләттәрҙе тапап уҙа,
Мәңгегә тәгәрәгәс...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Бәйгелә әйтеш ҡоролға теләүсе яңы авторҙарҙы көтәбеҙ. Улар ҡарамағында - СМС өсөн +7-937-835-34-74 телефоны, "Киске Өфө"нөң электрон почтаһы kiskeufa@ufacom.ru. Бәйге барышын "Бәйләнештә" сайтының "Башҡорт ҡатын-ҡыҙ бите"ндә күҙәтеп барыу мөмкинлеге лә бирелә.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА

**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## БУЯЛҒАН ҠЫҘҘАН...
### оялған ҡыҙ матур

Ханды Хоҙай ораһы булһа, үҙ халҡына хасланыр; байҙы Хоҙай ораһы булһа, дәүләтенә маһайыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ваҡ-төйәк нәмәләр беҙҙең кәйефте төшөрә, ваҡ-төйәк нәмәләр беҙҙе йыуата ла.

**(Блез Паскаль).**

Һәр кем йылына бер тапҡыр ғына булһа ла генийға әйләнә ала.

**(Георг Лихтенберг).**

Кешене уның индивидуаль сиренән түгел, ә универсаль сиренән дауалау кәрәк.

**(Джуна Бернас).**

Кәрәк саҡта тәүәккәллек күрһәтмәгән кешене ул тиклем аҡыллы тип әйтеп булмай.

**(Генри Бичер).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Уҡытыусыға һәм уның уҡыусыларына бер миңә бал биргәндәр. Улар һауыт тирәләй теҙелешеп ултырып, күмәкләп бал ашай башлаған. Уҡытыусы ла бер ҡалаҡ бал һоҫоп алған, үҙе шундай ҡомһоҙлоҡ менән бал ашаған уҡыусыларын күҙәткән. Уҡыусыларының бал һоҫоп алған ҡулдарына күҙ эйәрмәгән хатта. Һәр береһе был татлы ризыҡты ҡалағына күберәк һәм йышыраҡ һоҫорға тырышҡан. Етмәһә, был ҡылыҡтарына аҡланыу ҙа уйлап сығарғандар: береһе, бал миңә көс бирә, тигән. Икенсеһе, бал минең тәнемде сәләмәт итә, тип раҫлаған. Өсөнсөһө, бал миңә аҡыл өҫтәй, тип билдәләгән. Ә дүртенсеһе, һәр ҡалаҡ бал менән мин тағы ла аҡыллыраҡ була барам, тигән.**
**Һауыттағы бал бөткәндә, Уҡытыусы бер ҡалаҡ балын да ашап бөтмәгән була. Быны ул үҙенең уҡыусыларынан былай тип һорай:**
**- Әйтегеҙ әле, һеҙҙең кемегеҙ күпме бал ашаны?**
**- Мин һанаманым, - ти берәүһе.**
**- Мин һауытта бал бөткәнен һиҙмәнем, - ти икенсеһе.**
**Шул саҡ уҡыусыларҙың береһе:**
**- Минеңсә, Уҡытыусыбыҙ бер ҡалаҡ балды ла ашап бөтөрә алманы шикелле, - тип аптыраған.**
**- Кемегеҙ әйтер, нинә мин бер ҡалаҡ балды ла ашап бөтөрә алманым? - тигән Уҡытыусы.**
**- Сөнки һинә ул тиклем бал ашау кәрәкмәй. Һин былай ҙа көслө, сәләмәт, аҡыллы һәм артыҡ аҡыллы...- тигән уҡыусылар.**
**- Мин, моғайын, доҫоҡ туклана белгәнгә көслөмөндөр, - тигән Уҡытыусы. - Сәләмәтмен, сөнки мин намыҫым рөхсәт иткәндән артыҡты ашамайым. Аҡыллымын, сөнки минең аппетит ошондай ризыҡлы һауыттар бушағанға тиклем үк тыныслана. Күп ашаған өсөн түгел, ә аҡыллы булыр өсөн күпме ашарға кәрәк икәнен аңлаған өсөн аҡыллыға әйләнәләр..."**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# БАШҠОРТ ДОНЪЯҺЫ МЕНӘН...
## ҡунаҡтар ҙа танышты

**2013 йылда Өфө амфитеатры тәүге тапҡыр күләмле акциялар үткәреү өсөн майҙансыҡ булараҡ файҙаланылғайны. Бында бер нисә киносеанс һәм "Башҡортостанда тыуғандар" классик музыка концерты ойошторолғайны. Әле бында "Ватан" этник паркы эшләй.**



Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы һәм БРИКС саммиттары уҙғарылған көндәрҙә ҡунаҡтар һәм сит ил делегациялары башҡорттарҙың милли йолалары һәм мәҙәниәте, шулай уҡ республика ҡаҙанылыштары менән танышты. Этноауыл башҡорт ырыуҙарының һаны буйынса ҡоролған ете тирмәнән тора. Унда төбәктең үҙенсәлектәре сағылдырылған. Бында ҡурайсылар, ҡумыҙсылар, думбырасылар, йырсылар һәм бейеүселәр сығыш яһай, биҙәү-ҡулланма сәнғәте оҫталары халыҡ һөнәрҙәрен күрһәтә. Республиканың төрлө райондарынан килгән "Уралтау" (Ейәнсура районы), "Табын" (Ғафури районы), "Елмерҙәк" (Белорет районы), "Тамға" (Благовар районы) этнотөркөмдәре, солистар Марсель Ҡотоев, Иҙел Аралбаев, Гөлгөнә Баймырҙина, Миңлеғәфүр Зәйнетдинов, Гүзәл Үмөргәлина һәм башҡалар ҡунаҡтар алдында йырланы, бейене, башҡорт халҡының мәҙәниәте, сәнғәте тураһындағы һорауҙарға яуап бирҙе.

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# ҠУЛ ЯЛҒАУ ЯРҘАМДЫ АҢЛАТА

**Сөмәкәй** - йылғаның өйөрөлөп ятҡан урыны, ул әләккән бөтөн нәмәне "йота"
**Сөмбәй** - йылға эсендәге соҡор
**Ҡырла** - төрлө формалағы ҡая һикәлтәләре
**Әлпе** - тәпәшәк кенә ҡыуаҡ
**Тубылғы** - ваҡ алһыу сәскәле ҡыуаҡ, орлоғо тупҡа оҡшаш
**Ауыҙы һалыулы** - ашау мәлендә генә килеп инеүсе
**Ҡалбырҙаҡ, ҡалбырауыҙ** - теле телгә йоҡмай ашығып, күп һөйләүсе
**Урыҡ-һурыҡ** - арлы-бирле, онтҡанда бер
**Торараҡ** - бер аҙҙан, аҙағыраҡ
**Семсенеү** - ашты һайлау, ашар-ашамаҫ ултырыу
**Екһенеү, ек күреү** - биҙеү, бүгеү, яратмау
**Һыуын сәсә** - әсе телле, һүҙе ағыуҙай
**Көсәү** - теләү, ашағы килеү, өмөт итеү
**Башалтай** - ойоҡбаш
**Ҡул ялғау** - ярҙам итеү
**Бартамдап йөрөү** - юҡтан иреш сығарып йөрөү, өйсәләү
**Шаҡай** - аҡайып ҡараусы, шар бәбәкле
**Басымы менән үлсәү** - әҙ генә артыҡ һалыу
**Ауан кеше** - теләгәнен эшләй, үҙ аллы
**Күтәмәй** - төрлөсә һөйләп, төрлөсә эшләй, алдай
**Ас яңаҡ** - яҡтары эскә батҡан, ябыҡ
**Һолһоҙ** - туймаҫ тамаҡ
**Билбыуар** - бейек булып үҫкән үлән, бесәнлек
**Ҡаҡтүш** - үтә ябыҡ, тире менән һөйәктән генә тора
**Төйөрлә тел** - әйткәне таштай һуғыла
**Бөтә донъяһы лапшайған** - донъяһын ҡыйбаҫҡан, емерелгән, сөй-сүкеш теймәгән.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы: **Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде. Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:** Лəйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Гөлназ МАНАПОВА, Азамат ӘБҮТАЛИПОВ, Илгиз ИШБУЛАТОВ, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 10 июль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4717
Заказ 3155